ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Ҡиске Өфө

21-27 ноябрь (ҡырпағай) 2015

№47 (673)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тәбиғәт нисек яралтҡан,**

шул килеш торһон Торатауыбыҙ



4-5

**Ырыуҙарҙы бергә йыйған...**

сәйәси институт булған ҡоролтайҙар



6-7

**Булыр илдең балаһы...**

ҡорға йыйылып, фекер белдерер



10-11

**Өфөбөҙҙә...**

ҡымыҙсылыҡ үҙәге итергә хыялланам



13

**ТВ-программа** 14

***"Һаумыһығыҙ, һаумыһығыҙ, бөтөн донъя башҡорттары!" тип сәләмләйбеҙ 21 ноябрҙә баш ҡалабыҙға оло ҡорға йыйылған милләттәштәребеҙҙе. Кәңәштәрегеҙ берекһен, фекерҙәр уртаҡ булһын, илһөйәрлек, телһөйәрлек нығынһын, рух осҡоно, сәм ҡунһын йөрәктәргә, аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр аҡылы өҫкә сыҡһын, тип теләйбеҙ. Хәйерле сәғәттә!***

ҠОРОЛТАЙҒА ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# ЗАТЫБЫҘҘЫ, БЕҘҘЕҢ ЕРЕБЕҘҘЕ

## Рухи ҡоролтайҙар яулаһын!




*Сафуан Яҡшығоловҡа хат**

*Ҡәүемемдә болғауырҙар мәле,*
*Һинең уйың нисек, олатай?*
*Килеп тыуған ошо өҙәремде*
*Ййлай алыр микән Ҡоролтай?*

*Халыҡ бит ул былар ғына түгел,*
*Ҡәүемемдең күбе - йырыңда!*
*Ҡәүемемдең күбе - ер ҡуйынында,*
*Ҡәүемемдең күбе - йырында.*

*Әле лә беҙ тупраҡ йырын көйләп,*
*Ер китә тип башты ватабыҙ.*
*Алһалар ҙа,*
*Һатһалар ҙа - китмәҫ.*
*Унда ята баба-атабыҙ.*
*Ер - ул беҙҙең изге батабыҙ.*

*Бетеү булып баба ҡаны тамған,*
*Затлы диуар хасил һөйәктән.*
*Инанғаным ошо -*
*Халыҡ йыры - доға,*
*Ул айырмаҫ беҙҙе төйәктән.*
*Мөҡәддәс һүҙ килә - Бөйөктән!*

*Илебеҙҙе һаман һаҡлап тота*
*Бәндәбикәләрҙең (ы)рухы.*

*Беҙҙең дәүерниҙәр ҡылды икән*
*Ишәйтергә милләт ырыҫын?..*
*Туҙманымы ҡәүем мираҫы?*

*Ауылдарҙа - затлы тамыр,*
*Халыҡ*
*Тамырлана бөгөн ҡалала.*
*Иномаркаларҙа елгән рухлы*
*Яңы башҡорт илдә ярала.*
*Тик табыла сүбек арала...*

*Яңы башҡорт һиндәй "Урал" тыңлай,*
*Ул да һинең кеүек намаҙҙа.*
*Улар һүҙе бер көн алға сығыр,*
*Иман илде тотор бер аҙҙан.*
*Айыҡ халыҡ сығыр мираждан!*

*Тик табыла һаман ил өҫтөндә*
*Тамаҡ ярыусылар:*
*- Ҡоролтай!*
*Ил ҡаймағын һөҙөп улар бөгөн*
*Милләт асманында шом туплай...*

*Тибеп асмайбыҙ беҙ ишектәрҙе,*
*Төкөрмәйбеҙ әҙәм башына.*
*Ҡыҙыҡмайбыҙ яттың ерҙәренә,*
*Үрелмәйбеҙ ситтең ашына.*
*Ҡаҡмайбыҙ беҙ илгә буш шына.*

*Урал батырҙан да уҙып тағы*
*Ниҙәр әйтеп була халыҡҡа?*
*Берҙәм булмағандан ғына ҡай саҡ*
*Эсем бошоп китә һис юҡтан!*
*Зар иламай ҡәүем юҡлыҡтан.*

*Мәскәүҙә лә, Америкала ла*
*Белем эстәй башҡорт балаһы.*
*"Ете ҡыҙ" ҙа ҡайтып төштө, ана,*
*Һаҡлар өсөн башҡорт ҡалаһын!*

*Тик замандаш шуны аңлаһын:*
*Заман заңы, сире түгел беҙҙе,*
*Башҡорт рухы йәнде яулаһын!*
*Йөрәктәрҙә,*
*Аңда, зиһендәрҙә*
*Иманыбыҙ ҡаны ҡайнаһын!*
*Затыбыҙҙы, беҙҙең еребеҙҙе*
*Рухи ҡоролтайҙар яулаһын!*

*...Минең менән килешмәгән, ана,*
*Һинең яҙмаларға күҙ һалһын...*

**Лариса АБДУЛЛИНА.**

*Сафуан Яҡшығолов XIX быуат мәғрифәтсеһе.

12+

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ошоға тиклем булып үткән королтайҙарҙың халҡыбыҙ тормошондағы әһәмиәтен нисек баһалайһығыҙ?



***Рәшит ШӘКУР, филология фәндәре докторы, профессор, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитеты ағзаһы:*** Ошоға тиклем булып үткән өс ҡоролтай тураһында мин шундай фекерҙәмен: уларҙың тәүгеһе рухи күтәрелешебеҙҙең иң юғары нөктәһе булғандыр, тим. Был аңлашыла ла, сөнки ул йылдар бөтөн ил, шулай уҡ Башҡортостан буйынса ла йәмәғәтселек хәрәкәтенең иң юғарыға күтәрелгән дәүере ине. I Ҡоролтайҙың әһәмиәте хаҡында әйткәнем бар, ул беҙҙең тарихыбыҙҙа ла, күңелебеҙҙә лә ныҡлы урын алды. Беҙ уны хәҙер ҙә ҙур ҡыуаныс менән иҫкә алабыҙ. Иң мөһиме, унда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы - башҡорт халҡын берләштереүсе, уның социаль, милли-мәҙәни үҫешенә булышлыҡ итергә тейешле йәмәғәт ойошмаһы булдырылды. Ҡаралған мәсьәләләр буйынса бик күп мөрәжәғәттәр, шул иҫәптән РФ Федераль Йыйылышына, РФ Президентына, БМО-ға, Донъя халыҡтары һәм дәүләттәренә мөрәжәғәттәр ҡабул ителде.

II Ҡоролтайҙың да әһәмиәте ҙур булды: беҙ тәүгеһе менән икенсеһе араһында нимәләр эшләнгәнен, нимәләргә өлгәшә алғанлығыбыҙҙы күрҙек. Беҙҙең ҡоролтайҙарға Мәскәүҙең дә иғтибары ҙур ине. Мәскәүҙән юғары кимәлдәге федераль етәкселек вәкилдәре ҡатнашты, сығыш яһаны. Башҡортостан, башҡорт халҡы тураһында бик яҡшы, төплө фекерҙәр әйттеләр. Ләкин быларҙың күбеһе III Ҡоролтайҙа булманы. Сираттағы, өсөнсө ҡоролтай шулай уҡ күтәренке шарттарҙа үтте, ләкин ул нисектер икенсе төрлөрәк ҡабул ителде. Мәскәү яғынан да һалҡынырaҡ мөнәсәбәт һиҙелде. Эшлеклеге яғынан III Ҡоролтай ҙа тәүгеләренән кәм булмағандыр, ләкин Үҙәктән дә, үҙебеҙҙең тарафтарҙан да әлеге шул һалҡынлыҡ "еле"н тойомларға була ине. Был айҡанлы борсолоу белдереүселәргә мин: "Юҡҡа борсолмағыҙ, Ҡоролтай - ул беҙҙең халыҡ трибунаһы. Халыҡ - бик юғары төшөнсә. Халыҡ ихтыяры - Хоҙай ҡушҡан ихтыяр", - тип тынысландыра килдем. Шуға ла мин үҙем быңдай мөнәсәбәтте ҡабул итмәнем. Дөрөҫ сәйәсәт булманы ул. Ҡоролтай - ул легитимлы, халыҡ һайлап ҡуйған орган. Ә халыҡ ихтыярын һанларға, уның һүҙенә ҡолаҡ һалырға кәрәк. Власть тап шуның менән көслө булырға тейеш тә.

Хәҙер бына IV Ҡоролтайҙы ҡаршылайбыҙ. Яйлап ҡына замандар үҙгәрә бара. Бәхеткә, ил Президенты В.Путиндың йәмәғәт ойошмалары эшмәкәрлегенә иғтибары артты. Мәскәү ҙә хәҙер йәмәғәт ойошмаларына, уның көсөнә, милли мәсьәләләргә иғтибарлы һәм ихтирамлы була башланы. Был миндә киләсәгебеҙгә, шул иҫәптән, сираттағы буласаҡ ҡоролтайҙың уңышлы эшләүенә ышанысты арттыра, сөнки ул III Ҡоролтай булып үткән йылдарҙағына ҡарағанда ҡулайырaҡ, уңайырaҡ осорға тап килә. IV Ҡоролтай ҙа халҡыбыҙ яҙмышы өсөн мөһим булған мәсьәләләрҙе тикшерер, тигән ышаныстамын. Телебеҙҙе, рухиәтебеҙҙе, динебеҙҙе һаҡлау буйынса. Һәм, әлбиттә, ер мәсьәләһе лә һөйләшеүҙең уртаһында булыр. Динебеҙ, тигәндән, тағын бер фекерем бар. Бөгөн дин өлкәһе бөтөн донъя кимәлендә мөһим мәсьәләгә әйләнде. Донъя аренаһында дини тәғлимәттән алыҫ торған "Ислам дәүләте" тигән агрессив көстәр, ҡанһыҙ террористар баш күтәрҙе. Был бик ҙур хәүеф сығанағы. Беҙ йәштәребеҙҙе ана шундай дини тайпылыштар йоғонтоһонан, ваххабистар һәм башҡа хата юлдағылар шауҡымынан, баштары буталыуҙан һаҡларға бурыслыбыҙ. IV Ҡоролтай ошо йәһәттән үҙ халҡына Мөрәжәғәт ҡабул итер, тигән өмөттәмен. Сөнки Башҡортостан - традицион ислам тәғлимәтенә тоғро булған Зәйнулла Рәсүлев, Аҡмулла кеүек диндарҙар һәм әүлиәләр иле, тыныслыҡ һәм татыулыҡ төйәге. Ошондай изге зыялыларыбыҙ ҡалдырған рухи традицияларыбыҙҙы һаҡлайыҡ. Халҡыбыҙҙа сәләмәт рух тәрбиәләүҙә Ҡоролтайҙың йоғонтоло көс икәнен дә оноторға ярамай власть әһелдәренә. Бына ни өсөн Ҡоролтай һүҙенә ҡолаҡ һалыу ғына түгел, ә һәр яҡлап уға ярҙам итергә, уның һәр башланғысын күтәрмәләп алырға кәрәк.

***Миҙхәт МӘМБӘТОВ, филология фәндәре кандидаты, Рәсәйҙең почетлы мәғариф хеҙмәткәре:*** Ҡоролтайҙарҙың әһәмиәте хаҡында һүҙ алып барғанда, уларҙың һәр яҡлап халыҡ яҙмышын хәстәрләүсе, тормошобоҙҙағы хәлдәрҙе күҙәтеп, анализлап, баһа биреп барыусы һәм халҡыбыҙ мәнфәғәттәренә ҡағылышлы мәсьәләләрҙе урындарҙағы власть органдары менән тығыҙ бәйләнештә хәл итә алыусы вәкәләтле бер орган булырға тейешлеге күҙ алдына баҫа. Үткән ҡоролтайҙарға ошо юҫыҡтан ҡараш ташлағанда, әлбиттә, I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының тарихи әһәмиәте хаҡында бик оҙаҡ һөйләргә булыр ине. Милләт яҙмышына ҡағылышлы тел һәм рухиәтебеҙ мәсьәләләрен күтәреп сығыуы һәм халыҡ аңын уятып ебәреүе менән дә, күңелдәребеҙҙә ифрат ҙур рухи күтәрелеш, яңырыу хистәре тыуҙыра алыуы менән дә уның тарихи әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Шул уҡ ваҡытта тәүге ҡоролтайыбыҙҙың башҡорт халҡын бар донъяға танытыуҙа ла роле ҙур булды. Ул беҙгә халыҡ-ара кимәлдә эштәрҙе ойоштора алыу тәжрибәһе бирҙе. Бөтөн донъя буйлап таралған милләттәштәребеҙҙе йыйып алыуҙа беҙгә шулай уҡ Рәсәй һәм бик күп сит илдәр вәкиллектәре лә ярҙам күрһәтте. Был йыйынды ойоштороусыларҙың береһе булараҡ, мин был хаҡта яҡшы беләм. Башҡорттар өсөн башҡорттар йыйыны ғына булманы ул. Илебеҙҙә йәшәүсе бөтөн халыҡтар иғтибары төбәлгәйне ул мәл Башҡортостанға. Мәскәүҙән абруйлы ҡунаҡтар, Федерация Советы Рәйесе, Рәсәйҙең Хөкүмәт Рәйесе урынбаҫары кимәлендәге вәкиллектәрҙең ҡатнашыуы ла Ҡоролтай әһәмиәтен күтәреп ебәрҙе. Ә республикабыҙ районларынан килгән делегацияларҙың етәкселәре итеп шул районлар башлыҡтарының тәғәйенләнеүе айырыуса мөһим ойоштороу сараһы булды. Йыйын эшмәкәрлегендә туранан-тура ҡатнашып, халҡыбыҙ йәшәйеше проблемаларына төшөнөп, хәләхүәлде яҡшы аңлап таралды улар. Аҙаҡ урындарҙағы ҡоролтай әүҙемселәре менән бергәләп эшләү өсөн уларҙың ишектәре лә һәр саҡ асыҡ булды. Дөрөҫ, ул йылдарҙа заманы ла икенсерәк, тотош йәмғиәтебеҙҙә яңырыу рухы кисергән йылдар ине шул... Тәүге халыҡ йыйыны ла ана шул яңырыуыбыҙға юл ярыусы булып тарихҡа инде.

II Ҡоролтай тәүгеһе рухында үтте, тиергә кәрәк. Өсөнсөһө тәүге ике йыйын ҡарарҙарының үтәлешен барлау һымағыраҡ ҡабул ителде, миңә ҡалһа. Байрам рухына ҡарағанда, эшлеклелек өҫтөнлөк итте. Ғөмүмән, булып үткән ҡоролтайҙарҙың береһе лә әһәмиәтһеҙ ҡалманы халҡыбыҙ тормошонда. Күптәр тарихи тамырҙарын танып, шәжәрәләрен төҙөп алып, ата-олаталары милләтенә, тимәк, үҙ асылдарына ҡайтты. Башҡортостаныбыҙҙа гөрләп "Шәжәрә байрамдары", "Салауат" йыйындары, "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр, сәсәндәр конкурстары, башҡа бик күп саралар үткәрелә башланы. Халҡыбыҙҙың әүҙемлеге артты. Әле бына сәләмәт тормош өлгөһөн таратып, ауылдарыбыҙҙы, тирә-яҡ мөхитебеҙҙе һаҡлау, йолаларыбыҙҙы тергеҙеү, ата-бабаларыбыҙҙың тәрбиә мәктәбен аяҡҡа баҫтырыусы "Ағинәйҙәр" ҡорҙары әүҙем эшмәкәрлеге менән ҡыуандыра. Былар барыһы ла башҡорт халҡының иҡтисади хәле менән бер рәттән, мәҙәни-рухи донъяһын үҫтереү буйынса ҡоролтай ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу мөмкинлектәре хаҡында һөйләй. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең ошондай мөмкинлектәрҙе тулыһынса файҙалана алмауыбыҙ, урындарҙа ҡоролтай ҡарарҙары ҡуйған бурыстарҙың үтәлеп етмәүе лә ныҡ борсолдора. Һәр кемгә ҡулынан килгән тиклем әүҙемлек күрһәтеү етешмәй. Ҡоролтай әһәмиәтен, уның абруйын күтәреү үҙебеҙҙең ҡулдарҙа икәнлекте онотоп ебәрмәһәк ине.

***Рим ВӘЛИӘХМӘТОВ, социология фәндәре кандидаты:*** Башҡорт ҡоролтайҙарының, айырыуса халыҡты бергә туплау, ойоштороу һәм хәл итеү мөҙҙәте еткән көнүҙәк проблемаларҙы асып һалып, уларҙы хәл итеү юлдарын күрһәтеүе менән тәүгеһенең тарихи әһәмиәте, һис шикһеҙ, ҙур булды. Икенсе һәм өсөнсө ҡоролтайҙар ҙа тәүге йыйында көн тәртибенә ҡуйылған бурыстарҙы дауам итеп, мәсьәләләрҙең нисек хәл ителешен анализлап, урындарҙағы ҡоролтайҙар эшмәкәрлеген йәнләндереп ебәреү йәһәтенән билдәле бер кимәлде күрһәтә алдылар. Һуңғы ике ҡоролтайҙа байрам күтәренкелегенән бигерәк, аныҡ мәсьәләләр буйынса эш мөхите өҫтөнлөк итте, тип әйтер инем. Мәҫәлән, һуңғы ике ҡоролтайҙа ла илдәге федератив мөнәсәбәттәр үҫеше, Башҡортостан дәүләтселегенең артабанғы үҫеш перспективалары, башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү, ер мәсьәләһе, шулай уҡ милләттәр һәм конфессия-ара тыныслыҡ, теләктәшлек мәсьәләләре көн үҙәгендә торҙо. Өсөнсө йыйыныбыҙ үҙенсәлеге тағы ла Йәштәр ҡоролтайы үткәрелеүе менән дә яҡшы хәтерҙә ҡалды. Ғөмүмән, ошоға тиклем булып үткән ҡоролтайҙар "Рәсәй Федерацияһы башҡорттары", "Башҡорт халҡын тергеҙеү һәм үҫтереү","Башҡортостан халыҡтары" Дәүләт программаларын тормошҡа ашырыу буйынса эҙмә-эҙлеклеге менән айырылып торҙо.

Шул уҡ ваҡытта борсолоу белдерергә лә урын бар: бынан 20 йыл элек булып үткән тәүге ҡоролтай ваҡытындағы кеүек үк, башҡорт халҡының хәле ярайһы ҡатмарлы һәм күп мәсьәләләр хәл ителмәгән килеш ҡала килә. Мин бында айырыуса социаль-иҡтисади хәлебеҙҙе (ауыл тормошо һәм ер мөнәсәбәттәре), демографиябыҙҙы (ассимиляция һәм миграция мәсьәләләре), туған телебеҙ, этник үҙаңлылыҡ кимәлебеҙҙе күҙҙә тотам. Башҡорт халҡын үҫтереү буйынса Дәүләт программаларының үтәлеш барышы етди анализлауға мохтаж, тип уйлайым. IV Ҡоролтайға ошо өлкәләргә төп иғтибарҙы йүнәлтеп, һөҙөмтәле һәм уңышлы эшләүен теләйем.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Павел Астахов менән осрашты. Осрашыу барышында республикала хәйриә эшмәкәрлеген үҫтереү мәсьәләләре тикшерелде. Балалар омбудсмены хәбәр итеүенсә, 2012 йылда Башҡортостанда 26 балалар йортонда яҡынса 1100 бала йәшәгән. 2015 йылдың башына балалар йорттарының һаны - 20 процентҡа, унда тәрбиәләнеүселәр 500 балаға тиклем кәмегән. Шуның менән бергә республикала ата-әсә ҡарауынан мәхрүм балаларҙың һаны тәрбиәгә алынған балалар һанынан артмай. Мәҫәлән, былтыр шундай 1 700 бала асыҡланған, 2 600-ө ғаиләгә алынған.

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Русфонд президенты, Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Граждандар йәмғиәтен үҫтереү һәм кеше хоҡуҡтары буйынса совет ағзаһы Лев Амбиндер менән осрашты. Русфондтың (Рәсәйҙең ярҙам фонды) бурысы - ауыр сирле балаларҙы һәм инвалидтарҙы дауалауҙа ярҙам күрһәтеү, граждандар йәмғиәтен үҫтереүгә булышлыҡ итеү һәм юғары медицина технологияларын индереү. Русфонд Башҡортостанда үҙенең төбәк бюроһын 2011 йылда асты. Дүрт йыл эсендә фонд тарафынан 131,4 миллион һумлыҡ ярҙам күрһәтелгән. 2015 йылда 152 баланы дауалау өсөн 47,74 миллион һум тотонолған.

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәте ултырышы үткәрҙе. Төбәктәге демографик хәл көн тәртибендәге мәсьәләләрҙең береһе булды. Билдәләнеүенсә, быйыл тыуым былтырғы менән сағыштырғанда 3 процентҡа кәмегән, үлем 2,5 процентҡа артҡан. 2015 йылдың туғыҙ айында Башҡортостанда 44 040 сабый, уҙған йылдың шул уҡ осоронда 45 504 бала тыуған. Был бала табыуға һәләтле ҡатын-ҡыҙҙарҙың аҙайыуына бәйле. Шуның менән бергә Башҡортостан тыуым буйынса Рәсәйҙең иң яҡшы 20 төбәге иҫәбенә инә һәм ошо күрһәткес буйынса Волга буйы федераль округында өсөнсө урын биләй.

✓ Башҡортостандың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы хәбәр итеүенсә, Төбәк үҫеш банкы аша социаль пособие алыусыларға социаль түләүҙәрҙе килтереү тураһында яңы ғариза бирергә кәрәк. 10 ноябрҙә Рәсәй банкы Төбәк үҫеш банкының банк операцияларын башҡарыуға лицензияһын тартып алды. Яңы ғариза яҙыу өсөн Республиканың халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү үҙәге филиалдарына мөрәжәғәт итеү зарур.

✓ *IV Ҡоролтайҙан беҙ рухи мираҫыбыҙға хоҡуҡи яҡлау көтәбеҙ. Рәсәй халыҡтары араһындағы бер биҙәк булып ҡына түгел, ә быуаттар төпкөлөнән килгән үҙенсәлекле бер ҡомартҡы, дәһшәтле тарихы булған милләт булып ҡалғы килә.*



*ҠОРОЛТАЙҒА ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...*

**Ни тиклем ҡатмарлы ла, көсөргәнешле лә, тиҙ үҙгәреүсән заманда йәшәгәнебеҙҙе хәҙер аңламаған кеше юҡтыр. Аңлап та ни файҙа, күберәк аңларға тырышҡан һайын ҡурҡыу тойғоһо көсәйә генә бара һымаҡ. Шул уҡ ваҡытта эске тауыш, Хоҙай ҡушмаған ғәмәл юҡ, барыһы ла Уның ихтыярында, яҡшылыҡ та, яманлыҡ та Унан, тип тынысландыра. Бөгөнгө ваҡиғалар "күктә" күптән хәл ителгән. Донъялар һаман да имен тора икән, тимәк, беҙҙең цивилизация әле генә юҡҡа сығырға тейеш түгелдер. Шуға ла киләсәкте хәстәрләргә кәрәк.**

# НӘҪЕЛ ОЯЛАРЫ...

## ерҙе һаҡлар

Ә башҡорттоң киләсәге, әлбиттә, тик ер менән генә бәйле. Үҙ еребеҙҙә, аҫаба халыҡ булараҡ, ерле булып ҡала алырбыҙмы, әллә толерантлыҡ һаҡлап, ауыҙ асып ҡалырбыҙмы? Совхоз-колхоздарҙа эшләп, пай ерҙәренә хужа булыусыларҙан һәм бер нисә тиҫтә фермерҙан башҡа кемдең ере бар? Ул пай ерҙәре менән дә күпме ҡаңғырыҡ сығып тора, сөнки аңлатыусы, барыһын да асып һалыусы юҡ.

Сығышым менән, әлбиттә, ауылданмын. Ауылда йәшәүемә 10 йылдан ашыу. Йорт-ҡура, баҡсанан башҡа ерем юҡ. Совхозда эшләмәнем. Минең кеүегерәктәр, заманалар үҙгәреп, ерҙәр һатыла башлаһа, ерһеҙ тороп ҡалмаҫмы?

Әлбиттә, быуаттар буйы йәшәгән ата-бабаларымдың ерендә ғәмһеҙ генә йәшәп тик ятыр инем, һәм ошоғаса ғәмһеҙ йәшәнек тә инде. Тик, башта яҙғанымса, заманалар һуңғы ваҡытта нык үҙгәреүсән. Беҙҙең, нанотехнологиялар заманына ҡарамаҫтан, юлы ла булмаған бәләкәй генә ауылыбыҙҙағы тыныс тормош селпәрәмә килмәгәйе... Газы ла булыр, юлын да төҙөрҙәр, тик эргәлә бөтөнләй ят, бар булмышы менән айырылып торған көнбайыштыҡымы, көнсығыштыҡымы "күрше" килеп ултырмағайы.... Ә мин, аҫаба халыҡтың вәкиле, ерем булмаһа, шул ваҡытта күкрәк киреп тора алырмынмы?

Бер 15 йыл элек Владимир Мегрэның "Звенящие кедры России" тигән серияла Анастасия тураһында китаптары сыҡҡайны. Кемдер, бәлки, әкиәт, тип, уҡымағандыр ҙа. Әммә Анастасия кеүектәр Илаһи көскә эйә һәм Ерҙе ҙур афәттән һаҡлап тороусылар, кедрҙар араһында, тайганың кеше аяғы баҫмаҫ ерҙәрендә йәшәй. Беҙ, шәжәрә ағасы, нәҫел, аҫабалыҡ, тип һөйләйбеҙ, ә Анастасия ошо уҡ төшөнсәләрҙе "родовое поместье" тип атай. Уның әйткәненең мәғәнәһе буйынса һәр нәҫелдең, тоҡомдоң быуындан-быуынға күсеп килгән 1 гектар ере булырға тейеш. Ул турала хатта Үҙәк телевидениенан да ишетелә биреп ҡалды: Владимир өлкәһендә бер нисә ғаилә ҡаланан күсеп, үҙҙәренең нәҫел ояларын ойошторған. Һәм быйыл Алыҫ Көнсығышта бушлай 1 гектарға тиклем ер бирә башлағандар.

Тарих ҡабатланып тора, тип юҡҡа әйтмәйҙәрҙер. Ҡасандыр булған ваҡиға икенсе төрлөрәк, икенсе формала беҙгә әйләнеп ҡайталыр. Һүҙем II-V быуаттар арауығында булған Бөйөк күсенеү тураһында. Әгәр ул ваҡытта халыҡ Алтайҙан Көнбайышҡа күсенһә, хәҙер килеп киреһенсә булыуы ихтимал. Аллаһы Тәғәлә беҙҙең яҙмышҡа нимә яҙғандыр, уныһы Уға ғына мәғлүм. Нисек кенә булмаһын, милләттәштәрҙе үҙенең нәҫел ояларын булдырырға, ергә ҡайтырға саҡырам һәм бындай саҡырыуҙар буласаҡ IV Ҡоролтайҙа ла яңғырар, тип ышанам.

**Зәлифә ЗӨЛҠӘРНӘЕВА.**
**Баймаҡ районы.**

# РУХИ МИРАҪҠА...

## ситтәр ҡағылмаһын

**Барыбыҙ ҙа яҡты өмөттәр менән IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын көтөп алдыҡ. Минең фекеремсә, Ҡоролтай резолюцияһында халыҡ ижадын һаҡлау һәм пропагандалау эшмәкәрлеген хоҡуҡи яҡлау тураһында пункт булырға тейеш.**

Был пункт милләтебеҙҙең ҡурай, халыҡ йырҙары, йолалары, тарихи шәхестәре, боронғо баҫмалары кеүек рухи мираҫын сит-яттарҙан һаҡлаһын ине. Был хаҡта күптән хәбәр һөйләүҙән үтеп, реаль эштәр күрһәтергә ваҡыттыр. Ҡоролтайҙың һәм, ғөмүмән, республика халҡы хеҙмәтендә булған башҡа ойошмаларҙың да иң беренсе бурысы милләттең рухын тергеҙеү булырға тейеш. Һау-сәләмәт рух булмай тороп, нимәгәлер өлгәшеү икеле.

Борон-борондан башҡорт ҡоролтайҙары милләт мәнфәғәттәрен яҡларҙай мәсьәләләрҙе хәл иткән. Уларҙың ҡарары киләсәк быуындар өсөн эшләгән. Уйлап ҡараһаң, Зәки Вәлиди заманында ойошторолған Ҡоролтай документтарын хатта большевиктар власы ла юҡ итә алмаған. Ә бит ул көндәрҙә батша хөкүмәтенең күпме мөһим ҡағыҙҙары яндырылған. Тимәк, ул ҡоролтайҙарҙың ҡөҙрәте көслө булған.

Дүртенсе Ҡоролтайҙан беҙ рухи мираҫыбыҙға хоҡуҡи яҡлау көтәбеҙ. Рәсәй халыҡтары араһындағы бер биҙәк булып ҡына түгел, ә быуаттар төпкөлөнән килгән үҙенсәлекле бер ҡомартҡы, дәһшәтле тарихы булған айырым милләт булып ҡалғы килә. Сөнки әле тупланған халыҡ ижады - ул быуаттар буйы һаҡланып, быуындан-быуынға күсеп килеүсе аҫыл ҡомартҡы, ҡиммәтле хазина, изге аманат, ҡәҙерле мираҫ. Боронғо сәнғәтте яңынан тергеҙеү бик мөһим. Халыҡ ижады иҫ китмәле юғары ҡаҙаныштарға өлгәшкән. Уларҙы өйрәнеү, заманға яраҡлаштырыу беҙҙең артабанғы үҫешебеҙ өсөн мәртәбә генә.

**Нәфисә ТУЛЫБАЕВА,**
**БР Мәҙәниәт министрлығы ҡарамағындағы Республика халыҡ ижады үҙәге директоры урынбаҫары.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АУЫЛЫҢА ҠАЙТ, УҠЫТЫУСЫ!

**Ринат СИТДИҠОВ, Салауат районы Лағыр урта мәктәбе директоры:** Бөгөнгө еңел булмаған заманда милләттәштәргә тәү сиратта телебеҙҙе, тарихыбыҙҙы һәм мәҙәниәтебеҙҙе һаҡларға кәрәк, тип өндәшәм. "Һаҡларға кәрәк" тигәндә, был хәҡиҡәтте һәр башҡорт кешеһе белергә, өйрәнергә һәм үҙ балаларына дөрөҫ, теүәл итеп аңлатып, еткерергә тейешлеген күҙ уңында тотам. Милләтебеҙҙең киләсәге мәктәп яҙмышы менән тығыҙ бәйләнеүе тураһында яҡшы беләбеҙ. Сөнки мәктәп бөттөмө, ауыл нигеҙе лә яйлап юҡҡа сыға. Һуңғы ике ай эсендә ауылыбыҙҙан ике ғаилә ҡалаға күсеп китте, мәктәп өсөн был алты бала, тигән һүҙ. Йәштәр белем, яңы мөмкинлектәр артынан ҡалаларға китә лә, кире ауыл еренә әйләнеп ҡайтмай. Ауылда уларға перспективалы эш урыны, шөғөл юҡ. Әлбиттә, йәштәрҙе ауыл тормошона нисек ылыҡтырыу мәсьәләһе дәүләт кимәлендә хәл ителергә тейеш. Шулай ҙа, халыҡтың киләсәген хәстәрләү бурысы мәктәп уҡытыусыларының да иңендә ята. Бөгөн беҙ Берҙәм дәүләт имтихандарына әҙерлек буйынса ығы-зығы араһында рухи тәрбиә тураһында онотоп барабыҙ кеүек тойола. Ысын кеше, шәхес булып үҫешер өсөн төрлө яҡлы белем алыу ғына етмәй, рухи тәрбиә лә кәрәк. Балаларҙа рух тәрбиәләү өсөн спорт, патриотик клубтар, мәҙәни һәм әҙәби түңәрәктәр, хеҙмәт дәрестәре кеүек бик күп юлдар бар. Әммә һуңғы йылдарҙа күп мәктәптәрҙә өҫтәмә дәрестәр, түңәрәктәр эше, финанс мөмкинлектәр юҡ, тигән һылтау менән туҡтаны. Коллегаларым һәр береһе үҙ урынында эшен тейешлесә, урынына еткереп атҡарһын һәм түләнгән эш хаҡынан саҡ ҡына артығыраҡ көс түкһен ине. Уҡытыусы һөнәре кешенән ҙур яуаплылыҡ, энтузиазм талап иткән эш бит. Был һөнәрҙе һайлағас, илдең ҡайһы өлкәһенә лә барып эшләргә әҙер булырға кәрәк. Юғиһә, һуңғы йылдарҙа ауыл мәктәптәренә эшкә килергә теләгән йәш белгестәр юҡ. Бөгөн беҙҙең Лағыр урта мәктәбе уҡытыусыларының уртаса йәше 49 йәш. Ике йыл рәттән төрлө юғары уҡыу йорттарына мөрәжәғәт итеп, физика һәм математика уҡытыусыларын мәктәпкә эшкә йүнәлтеүҙәрен һораным. Әлегә ауыл мәктәбенә килергә теләүселәр табылманы. "Земство табибы" кеүек, уҡытыусылар өсөн дә берәй дәүләт программаһы булдырыу һөҙөмтә бирер ине, бәлки.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Төбәк Башлығы Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәтендә уҙған ултырышта билдәләүенсә, әле күмәртәләп һәм берәмләп һатыу, ауыл хужалығы, төҙөлөш, эшкәртеүсе производство, элемтә һәм транспорт өлкәһендә 240 мең самаһы кеше теркәлмәйенсә эшләй. Башҡортостандың хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова мәғлүмәттәре буйынса, республика иҡтисадында эшләүселәрҙең уртаса йыллыҡ һаны - 1 миллион 761 мең кеше. Теркәлмәйенсә эшләүсе граждандар хеҙмәткә һәләтле халыҡтың 13 процентын тәшкил итә.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Федераль һалым хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығы хеҙмәткәрҙәрен һөнәри байрамы менән ҡотланы. Әлеге ваҡытта Федераль һалым хеҙмәтенең республика буйынса идаралығы яҡынса 88 мең юридик берәмек, 87 мең шәхси эшҡыуар һәм 4 миллиондан ашыу физик берәмек менән идара итә. Башҡортостан керемдәр күләме буйынса Волга буйы федераль округы субъекттары араһында өсөнсө урын биләй, йәғни Республиканың тупланма ҡаҙнаһына 90 миллиард һумдан ашыу һалым килемдәре ингән.

✓Республика СПИД-ты, йоғошло сирҙәрҙе иҫкәртеү һәм уларға ҡаршы көрәш үҙәгендә иҫәптә торған кешеләрҙең һаны 17 093-кә етте, тип хәбәр итте үҙәктең баш табибы Рафаэль Яппаров. Башҡортостан округтың сир күрһәткестәре юғары булған алты биләмәһе иҫәбенә инә. Шуның менән бергә һүҙ асыҡланған ауырыуҙар хаҡында бара, ысынында иһә ВИЧ инфекциялыларҙың һаны күберәк.

✓Башҡортостанда Яңы йыл шыршыларын әҙерләү башланды. Шыршы баҙарҙарына 120 мең ағас килтереү күҙаллана, тип хәбәр иттеләр республиканың Урман хужалығы министрлығында.

✓Башҡортостандың Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитетында хәбәр итеүҙәренсә, хеҙмәткәрҙәр делегацияһы Әрмәнстандан урындағы баҙарҙа аҙ булған аҙыҡ-түлек тауарҙарын килтереү тураһында яҡынса килешеүҙәр төҙөп ҡайтты. Башҡортостан вәкилдәре "Двин Гудс" eләк-емеш, йәшелсә һәм балыҡ әҙерләү холдингында, "Арарат" йәшелсә-емеш консервалау комбинатында, "Бекон" фирмаһында, "Спайка" һәм "Евротерм" логистик предприятиеларында булды.

**“Башинформ”дан.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# БОҘ ҠУҘҒАЛДЫМЫ?



**Ноябрҙең 13-ө Франция халҡының йөрәгендә иң ҡурҡыныс көндәрҙең береһе булып уйылып ҡалды. Парижды бер-бер артлы тетрәткән алты террористик акт һөҙөмтәһендә 150-нән ашыу кешенең ғүмере өҙөлдө, 200-ҙән ашыуы йәрәхәтләнде. Был террористик һөжүм, ҡыҙғаныска ҡүрә, Париж өсөн тәүгеһе түгел. Йыл башынан алып Францияның бер нисә урынында үлемесле һөҙөмтәләргә алып килгән ошондай уҡ ваҡиғалар булды.**

Францияның бындай хәлгә тарыуына алып килгән сәбәптәрҙең иң төбөндә ил хөкүмәтенең "ғәрәп яҙы" ваҡиғалары башланғандан алып барған сәйәсәте ята икәнлеген бер кем дә инҡар итмәҫ, моғайын. Нәҡ Францияның Муаммари Каддафиҙы алып ташлауҙың инициаторы булып сығыш яһауы, самолеттарының Ливияны утҡа тотоуы был илдәге радикаль төркөмдәр яғынан үҫеүсе хәүеф-хәтәрҙең көсәйеүенә сәбәпсе булды. Бөгөнгө көндә Ливияла боевиктар әҙерләүсе лагерҙар асыҡтан-асыҡ үҙ эшмәкәрлеген алып бара. Ошондай урындарҙа "тәрбиәләнгән" йөҙҙәрсә мең террорист донъяның төрлө илдәренә "изге һуғышҡа" оҙатыла. Һәм уларҙың юлында Европа, шул иҫәптән Франция ла бар. Шулай уҡ Сирия ерендәге террористик төркөмдәрҙә әҙерлек үтеп, үҙ иленә кире ҡайтыусы Франция граждандарын да иҫәптән алып ташларға ярамай, сөнки уларҙың ниндәйҙер ваҡытҡа "йоҡлатылған" аңы ниндәй мәлдә булһа ла уянырға һәм үҙенең ҡанлы эшен башҡарырға әҙер. Парижға һөжүм итеп, ИГИЛ (нәҡ ошо террористик ойошманың ҡанлы ваҡиғаға сәбәпсе икәнен барыһы ла яҡшы аңлай) "союздаштарына" ла, дошмандарына ла үҙенең ниндәй дәһшәтле мөмкинлеккә эйә икәнлеген күрһәтте. Был акттар ИГИЛды яҡлаусыларҙың һәм уларға финанс ярҙам күрһәтеүселәрҙең артыуына, "Ислам дәүләте"нә башҡа террористик төркөмдәрҙең күсеп, уның ҡеүәтен тағы ла арттырыуға килтереүе ихтимал. Ул саҡта инде Сирия етәксеһе Бәшәр Әсәдтең "Франция Сирияның һуңғы биш йыл дауамында кисергәндәрен татыны", тиеүе бөтә донъя өсөн актуаль буласаҡ.

Әле уҡ террористик акттарҙың Францияла ғына туҡталып ҡалмаясағын ышаныс менән әйтергә була. Теге йәки был төбәктәге геополитик хәлде төбө-тамыры менән үҙгәртеүҙе күҙаллаған маҡсатты тормошҡа ашырыуҙы күҙ уңында тотоп башҡарылған эшмәкәрлек - терроризмдың нигеҙе. Ә Ливия, Сирия, Афғанстан, Ираҡ һәм башҡа ошондай ҡыҙыу нөктәләрҙә үҙ эшмәкәрлеген киң йәйелдергән һәм барыһына ла билдәле булған террористик ойошманың маҡсаты тағы ла киңерәк - ул бөтә ислам донъяһында берҙәм сөнни дәүләте төҙөү. Әлегә тиклем улар менән тыным-тырағай көрәшеп маташыуҙан бер файҙа ла булманы, ИГИЛ үҙ маҡсатына ҡарай ҙур һәм ышаныслы аҙымдар менән барыуын дауам итә.

Терроризмдың яҡшыһы һәм насары булмай. Ләкин ҡайһы бер дәүләт етәкселәре уның бөтәһе өсөн дә хәүефле булған дөйөм дошман икәнен танырға теләмәй. Дөрөҫөрәге, теләмәне. Ниһайәт, 13 ноябрь ваҡиғалары уларҙың күҙен бер аҙ асты, буғай. Нисек кенә булмаһын, Төркиәнең Анкара ҡалаһында уҙған G20 саммиттында әлегә тиклем Рәсәйҙең ошо хаҡтағы кисәтеүҙәрен ишетергә теләмәгәндәр ҙә терроризм менән дөйөм көрәш юлдарын бер өҫтәл артында ултырып эҙләргә тотондо. Боҙ ҡуҙғалды, тип әйтергә мөмкин. Тик уның артында күпме күҙ йәше, өҙөлгән ғүмер, ҡыйратылған яҙмыш тора. Шуныһы йәл.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.**

КӨН ҠАҘАҒЫНДА

# ТӘБИҒӘТ НИСЕК ЯРАЛТҠАН,

## шул килеш торһон Торатауыбыҙ

**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Торатауҙы эшкәртеүгә юл ҡуймаясағын белдереүе һәм "Башҡортостан сода компанияһы"на альтернатив сеймал сығанағын тәҡдим итеүе йәмғәтселектә киң резонанс тыуҙырҙы. Бөгөн уларҙың бер нисәһен гәзит уҡыусыларға ла тәҡдим итәбеҙ.**



***Рөстәм Хәйруллин, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Сәнәғәт, инновацион үҫеш һәм эшҡыуарлыҡ буйынса комитет рәйесе:*** Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Шихандар буйынса белдереүендә "Башҡортостан сода компанияһы"н үҫтереү перспективаһы ла сағылыш таба. Предприятиеға альтернатив сеймал сығанағы итеп Ғүмәр яткылығы тәҡдим ителә, ә БСК бары тик яҡындағы ятҡылыҡты - Торатауҙы ғына күҙ уңында тота. 1965 йылдан был тау тәбиғәт һәйкәле булып тора һәм законға ярашлы һаҡлана. Хоҡуҡи дәүләттә йәшәп, берәү ҙә законды боҙорға юл ҡуйырға тейеш түгел: республика Башлығы ла, предприятие ла, граждандар ҙа.

Төбәк Башлығына шулай уҡ производствоны һаҡлап ҡалыу ҙа мөһим. БСК - республика өсөн әһәмиәтле предприятие, ул рентабелле, бюджетҡа һалым түләүсе, унда бер нисә мең кеше эшләй. Эйе, предприятиены сеймал менән тәьмин итеү ауыр буласаҡ, ятҡылыҡтар алыҫтараҡ, технология буйынса ла ниндәйҙер үҙгәрештәр индереү талап ителәсәк. Әммә предприятие ниндәй генә сығымдар кисермәһен, был аҙымға барырға кәрәк. Мин быны хәл итеү юлы табылыр, производство тиҫтәләрсә йылдарға һаҡланыр, тип уйлайым, сөнки Рөстәм Хәмитов әйтеүенсә, БСК өсөн сеймал 50 йылға етәсәк.

***Рузалия Хисмәтуллина, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Бюджет, һалымдар, инвестиция сәйәсәте һәм территориаль үҫеш буйынса комитет рәйесе:*** Шихандар буйынса ҡарар - Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың уйланылған ҡарары һәм мөһим аҙымы. Төбәк етәксеһенең Шихандарҙы һаҡлау тураһындағы белдереүе республика халҡының күпселегенең позицияһына нигеҙләнгән. Әгәр тәүге фекер алышыуҙарҙа күберәк хис-тойғо сағылһа, хәҙер улар нигеҙле. Бөгөн "Башҡортостан сода компанияһы"ның рентабелле, килемле эшләүе республика халҡының барыһын да, шул иҫәптән Торатауҙы яҡлап сығыш яһаусыларҙы ла ҡыҙыҡһындыра. Рөстәм Зәки улының белдереүе лә компанияға производство өсөн сеймал сығанаҡтарын эшкәртеүгә юл ябыу түгел, ә альтернатив сығанаҡтар эҙләү. Республика етәкселеге менән БСК мәсьәләне хәл итеү юлын табыр һәм ул предприятиены ла, республика халҡына ҡәҙерле ҡомартҡыны һаҡлап ҡалырға тырышыусыларҙы ла ҡәнәғәтләндерер, тип уйлайым.

***Ғәли Вәлиуллин, Милли музейҙың генераль директоры, Республика крайҙы өйрәнеүселәр йәмғиәте рәйесе:*** Торатауға тейергә ярамай! Нисек инде беҙҙең тарихыбыҙҙы экскаваторҙар менән ҡаҙырға мөмкин? Әгәр Торатау йәшәй икән, башҡорт халҡы тарихы ла йәшәйәсәк. Халыҡтың мәнфәғәте һәр йүнәлештәге ваҡ ҡына ваҡиғаларҙан тора. Торатауҙы һаҡлап, беҙ дөрөҫ йүнәлештә барабыҙ. Беҙ тарихыбыҙҙы ла һаҡлай алаҡбыҙ, тамырҙарыбыҙҙы ла өҙмәйәсәкбеҙ.

***Эльвира Ҡорбанаева, БР Экология министрлығының ООПТ һәм биотөрлөлөктө һаҡлау буйынса бүлек начальнигы:*** Торатауҙы тәбиғи торошонда, уны тәбиғәт нисек булдырған, шулай килеш, төбәктең үҙенсәлекле флора һәм фаунаһын һаҡларға тейешбеҙ. Ошо маҡсаттан бында 2014 йылдың мартында БР Хөкүмәте ҡарары менән һаҡлау режимы булдырылды. Тау тоҡомдарын табыу, мал көтөү, ағас ултыртыу, файҙалы үҫемлектәрҙе йыйыу, һунар, күмәк кеше йыйылған саралар уҙғарыу, шулай уҡ тәбиғәт комплексын емереүгә һәм һәйкәлдең эстетик йөҙөн боҙоуға килтерәсәк башҡа хужалыҡ эштәре алып барыу тыйылды. Торатауҙың үҫемлектәр донъяһы бик бай - уның Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән үҫемлектәрҙе һаҡлау буйынса әһәмиәте бик ҙур.

***Руфина Шаһапова, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Аграр мәсьәләләр, экология һәм тәбиғәтте файҙаланыу буйынса комитет рәйесе урынбаҫары:*** Торатау - Ер йөҙөндәге иң боронғо тауҙарҙың береһе. Бында табылған боронғо диңгеҙ тереклегенең ташҡа әйләнгән ҡалдыҡтары тауҙың йәшен аныҡ билдәләргә ярҙам итте - 285 миллион йыл. Тауҙың үҙенсәлеге тағы шунда - унда Ҡыҙыл китапҡа индерелгән һирәк үҫемлектәр үҫә. Был крайҙа йәшәүселәр шихандарҙың яҙмышына битараф түгел.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Силәбелә тәүге тапҡыр "Ҡыш Бабай-2016" башҡорт Ҡыш бабайҙары конкурсы уҙғарыла. Унда 18 йәштән алып Ҡыш бабайҙар ҡатнаша ала. Ғаризалар 30 ноябргә тиклем ҡабул ителә. Конкурстың маҡсаты - башҡорттарҙың традицияларын тергеҙеү һәм һаҡлау, үҙешмәкәр артистарҙың абруйын күтәреү, халыҡ сараларын ойоштороуҙа һәм үткәреүҙә яңы ижади алымдар эҙләү. Еңеүселәрҙе Яңы йыл бүләктәре һәм аҡсалата призлар көтә.

✓Сентябрь аҙағында башҡорт ирекмәндәре үҙҙәренең берләшмәһен таныту өсөн ғариза биргәйне. Ошо көндәрҙә Wikimedians of Bashkortostan User Group 49-сы булып донъялағы шундай төркөмдәр исемлегендә теркәлде һәм ул Рәсәйҙә берәү генә. "User Group статусы беҙгә саралар ойоштораған саҡта Викимедианың билдәләрен файҙаланырға, башҡорт телендәге вики-проекттарҙың рәсми вәкилдәре сифатында сығыш яһарға, шулай уҡ Википедияның Башҡортостан менән бәйле башҡа тел бүлектәре волонтерҙарының мәнфәғәттәрен яҡларға хоҡуҡ бирә", - тип һөйләне Башҡорт Википедияһы администраторы Рөстәм Нурыев.

✓Мәскәүҙәге "Аҡ тирмә" башҡорт фольклор ансамбле ижади сәфәр менән Латвияла булып ҡайтты. Республиканың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитетының Латвиялағы вәкиле Рина Хәмитова хәбәр итеүенсә, сәфәр латыштарҙың Лачплесис көнө уңайынан ойошторолдо. Шулай уҡ башҡорт делегацияһы Палдиски ҡалаһына барҙы. Сарала "Аҡбуҙат" башҡорт ойошмаһы рәйесе Ришат Ҡаҙаҡбаев һәм Таллинндағы "Ағиҙел" башҡорт йәмғиәте ҡатнашты. Эстонияға һәм Латвияға сәфәрҙе "Салауат Юлаев" Балтика халыҡ-ара үҙәге ойошторҙо.

✓2016 йылда Рәсәйҙең Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын торлаҡ менән тәьмин итеүгә бюджетта 10 миллиард һумдан ашыу аҡса ҡаралған. Билдәле булыуынса, 2015 йылдың 1 октябренә торлаҡҡа мохтаждар исемлегендә 1,22 мең һуғышта ҡатнашыусы һәм инвалид тора. Һуңғы биш йылда Башҡортостанда 8873 ветеран торлаҡ шарттарын яҡшыртҡан. Ошо маҡсатҡа федераль бюджеттан 11 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленгән.

✓Башҡортостанда һигеҙ дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр үҙәге асылды. Хәҙер республика халҡы Өфө, Ағиҙел, Баймаҡ, Межгорье ҡалаларында, Аҡъяр, Ҡырмыҫҡалы ауылдарында, Николо-Березовка һәм Раевка ҡасабаларында "берҙәм тәҙрә" принцибы буйынса кәрәкле хеҙмәттәр алыу мөмкинлегенә эйә.

✓ *Мин былтыр март айында "Башҡортостан сода компанияһы" акционерҙар йәмғиәте етәкселәренә, сода продукцияһын аш тоҙон ғына ҡулланыу юлы менән дә етештереп була, тигән фекеремде тәҡдим иткәйнем.*



***Әхәт Мостафин, БР Фәндәр академияһы академигы, Башҡорт дәүләт университетының "Физик химия һәм химик экология" кафедраһы мөдире:*** Башҡортостанда Торатауҙан башҡа сода етештереү өсөн яткылыҡтар етерлек. Бигерәк тә уның көньяҡ өлөшөндә эзбизташ яткылыҡтары бихисап. Шуның өсөн сеймалға Торатауҙы ғына күҙ уңында тотоу хата булыр ине. Минеңсә, сеймалдың башҡа альтернатив сығанаҡтары ла, шул иҫәптән Ғүмәр яткылығы ла бар. Яңы яткылыҡты үҙләштергәндә эзбизташ запасы оҙаҡ йылдарға етеүенә инаныу өсөн ентекле геология-разведкалау эштәре үткәреү зарур.

***Гөлназ Халиҡова, "Торатау" гәзитенең йәш журналисы, Ишембай ҡалаһы:*** Ишембайҙарҙың властарға ышанысы тағы ла артты. Башҡортостан халҡы һәр саҡ төрлө кимәлдәге властар тарафынан үҙ мөрәжәғәттәренең ишетеләренә тағы бер инанды. Республика Башлығы тағы бер тапҡыр республиканың иҡтисади мәсьәләләрен бары тик халыҡ фекерен иҫәпкә алып ҡына хәл итеүен раҫланы.

Республика Башлығы үҙенең позицияһын белдереп: "Шихандар махсус һаҡланыусы тәбиғәт территорияһы булып тора, республика халҡының 70 проценты уларҙы эшкәртеүгә ҡаршы. Шуға ла мин шихандарҙы БСК өсөн сеймал сығанағы сифатында ҡарамаҫҡа ҡуштым", - тине. Мин үҙемдең һорауыма шундай яуап алырыма өмөтләнгәйнем.

***Рәис (rais) Ғәбитов, билдәле башҡорт блогеры:*** Башҡортостан властары халыҡтың, Торатау - ул республика символдарының береһе, уны һаҡларға кәрәк, тигән фекерен ишетте.

Бына бер нисә йыл инде йәмәғәтселек Шихандарҙы һаҡлау кәрәклеген белдереп саң ҡаға. Был тема төрлө һөнәр кешеләрен - ябай халыҡтан алып экологтар һәм сәйәсмәндәргәсә - берләштерҙе. Шихандар ысын мәғәнәһендә дөйөм республика ҡиммәте булып ҡалды.

Мин элек үҙем унда бер ваҡытта ла булғаным булманы, ә һуңғы йылдарҙа бер нисә тапҡыр барҙым. Мин генә түгел, күпселек урындағы блогерҙар был матур мәғрүр тауҙан репортаждар яҙҙы һ.б. Башҡортостан халҡы проблемаға иғтибар йүнәлтеү өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләне һәм властар уларҙың фекеренә ҡолаҡ һалды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**БР тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министры Илдар Һаҙыев белдереүенсә, Торатауҙан махсус һаҡланған тәбиғәт территорияһы статусын алыу өсөн бер ниндәй ҙә хоҡуки нигеҙ юҡ. Шуға ла биологик, палеонтологик һәм тарихи әһәмиәткә эйә был тәбиғәт ҡомартҡыһында уға зыян килтергән, тәбиғи торошон үҙгәрткән эшмәкәрлек алып барыу тыйыла. Үҫемлектәр донъяһына килгәндә лә, Торатауҙа республикала булған дөйөм төрҙөң 23 проценты - 402 төр үҫемлек үҫә. Уларҙың 12-һе реликт (борондан ҡалған), 21-е - эндемик (урындағы) төр. Биологик үҙенсәлегенә ярашлы, ҡайһы берҙәрен күсереп ултыртыу мөмкин дә түгел. Ошоларға Торатауҙың 250 миллион йылдар самаһы элек, Урал тауҙары формалашыуҙың иң башланғыс осоронда ук хасил булған һәм Ер йөҙөндәге иртә перм йәшендәге тау массивы һәм бөтөн донъяға билдәле уникаль тәбиғәт объекты икәнен дә өҫтәйек. Йә, кемдең ҡулы барыр ошондай фәнни, экологик, тарихи, мәҙәни һәм эстетик йәһәттән иң ҡиммәтле тәбиғәт ҡомартҡыһын юҡ итергә!**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ШИХАНДАРҒА ТЕЙМӘЙЕНСӘ ЛӘ...

## сода етештереп була




**Мәғлүм булыуынса, хәҙерге ваҡытта "Башҡортостан сода компанияһы" акционерҙар йәмғиәте кальцийланған һәм аш содаһы продукцияһын ике химик матдә: аш тоҙо һәм эзбизташ (бурташ) ҡулланып етештерә.**

Был сеймал сығанаҡтары - Шихантау яткылыҡтары һәм Урман-Бишҡаҙаҡтың ер аҫты байлыҡтары республикабыҙҙың тәбиғәт байлығы булып иҫәпләнә. "Сода" производствоһында был тәбиғи матдәләрҙең 40 проценты файҙаланыла, ҡалған 60 проценты һыу ҡалдыҡтарына әйләнеп, дистиллирланған шыйыҡса, хлорлы кальций, эзбиз һөтө хәлендә "Аҡ диңгеҙ" бассейнына һәм ер аҫты скважиналарына ебәрелә. Һуңғы ваҡытта "Башҡортостан сода компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте етәкселеге, Шахтауҙа бурташ запасы бөтә барыу сәбәпле, Шихандарҙы бирмәһәләр, "Сода" етештереү производствоһы туҡтатыласаҡ, ҡалала күп халыҡ эшһеҙ ҡаласаҡ, ҡала кассаларында аҡса аҙаясаҡ, тип тауыш күтәрә.

Ошо шау-шыуҙы иҫәпкә алып, шулай уҡ Шихандарыбыҙҙы бындай һөжүмдәрҙән яҡлауҙы ла күҙҙә тотоп, мин былтыр март айында "Башҡортостан сода компанияһы" акционерҙар йәмғиәте етәкселәренә, сода продукцияһын аш тоҙон ғына ҡулланыу юлы менән дә етештереп була, тигән фекеремде тәҡдим иткәйнем. Был тәҡдимемде Стәрлетамаҡ ҡала округы хакимиәте башлығы Алексей Изотов һәм Башҡортостан Республикаһы Президентының техник советнигы Спартак Әхмәтовҡа ла еткерҙем. Шунан мин ҡала округы хакимиәтенән ошондай яуап хаты алдым:

*"Хөрмәтле Рәлиф Рәхим улы! Кальцийланған сода алыу мөмкинлеге ысулдарының береһе тураһындағы Һеҙҙең белдереүегеҙгә яуап итеп, түбәндәгеләрҙе хәбәр итәбеҙ. Һеҙҙең рационализаторлыҡ тәҡдимегеҙҙе ентекле өйрәнеү һәм эксперт һығымтаһы яһау маҡсатында Стәрлетамаҡ ҡала округы хакимиәте үл тәҡдимде Башҡортостан Республикаһының Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы Ғәмәли тикшеренеүҙәр институтына ебәрҙе. Институттан яуап алғандан һуң, Һеҙҙең тәҡдимегеҙгә ҡарата муниципалитет фекерен еткерербеҙ".*

Мин тәҡдим иткән ысул менән эшләгәндә "Сода" производствоһында ҡалдыҡтар, эшкәрткәндә ҡулланылған һыу ҡалдыҡтары бөтөнләй булмай. Киреһенсә, 1 тонна сода етештергәндә өҫтәмә рәүештә 1 тонна хлор барлыҡҡа киләсәк. Йәғни, технология ябайлаштырыла ғына.

**Рәлиф РӘХИМОВ,**
**техник фәндәр кандидаты,**
**СССР-ҙың атҡаҙанған рационализаторы,**
**Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған химигы.**

*ҠОРОЛТАЙҒА ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...*

# АТА-ӘСӘЛЕ ЕТЕМДӘР БЕҘ

**Йәш быуын вәкиле булараҡ, Ҡоролтайға әйтер һүҙем шул булыр: бөгөнгө көндөң төп проблемаһы - ғаиләләр тарҡалыуы, әсәләре тәрбиәһендә генә үҫкән балалар һаны артыуы, заман афәте эскелектең сәскә атыуы, күптәрҙең етемлек әсеһенә дусар булыуы. Ҡоролтайыбыҙ ошо күренештәргә ҡаршы етди көрәш аҫһа ине.**

Эскелектең ниндәй фажиғә икәнлеген мин үҙ йөрәгем аша үткәреп беләм. Беҙ, береһенән-береһе бәләкәй дүрт бала: ағайым - 7-се синыфта, мин - 4-сеплә, һеңлем Әлиә - 1-селә, ә иң бәләкәйебеҙ Рузилә-гә ни бары биш кенә йәш, "йәшел йылан" ҡоллоғона бирелгән ата-әсә "тәрбиәһендә" ҡалдыҡ. Уйнап-көлөп, ата-әсә назына төрөнөп, иркәләнеп йәшәү урынына беҙ мунса тәҫлә бәләкәй, бысраҡ, һыуыҡ өйҙә, кейемһеҙ, ризыҡ-тәғәм күрмәй йәшәнек. Ярай әле, беҙҙе Сибай ҡалаһындағы приютҡа урынлаштырҙылар, ә Ринат ағайымды синыф етәксебе Рәйсә инәй тәрбиәгә алды. Ул мәктәпте көмөш миҙалға тамамлап, Өфө нефть техник университетының студенты булып китте. Ә мин ике һеңлем менән инде һигеҙ йыл Йәнйегет ауылында яңы ғаиләлә йәшәйбеҙ. Хәҙерге ата-әсәйҙәребеҙ беҙҙән башҡа тағы 4 баланы тәрбиәгә алды. Ошо йылдар эсендә "кәкүк" атайыбыҙ менән әсәйебеҙ беҙҙең хәлебеҙҙе килеп белгәне лә юҡ. Беҙ уларҙың иҫтәренә лә төшмәйбеҙ, күрәһең. Хайуандың-хайуаны үҙ балаһы өсөн үлергә әҙер, ә улар бит - кешеләр...

Аллаға шөкөр, беҙ хәҙер бәхетлебеҙ, сөнки шкафыбыҙ тулы кейем, ғаиләбеҙ ҙур булһа ла, өҫтәлебеҙ тулы тәмле-татлы ризыҡ, йылы өй, унда шат балалар тауыштары өҙөлмәй. Ата-әсәйебеҙ беҙҙе һәр саҡ ҡурсаларға әҙер. Кемдер мине үҙ ата-әсәһен онотҡан, ҡаты бәғерле кеше булыуҙа ғәйепләр, юҡ, улай түгел, мин ата-әсәләре эскелек һаҙлығына баткан бөтә балалар исеменән өндәшәм: "Тапҡан әсәй түгел, баҡҡан әсәй". Беҙҙе ваҡытында эскән ата-әсә ҡулынан ҡурсып алған, үҙҙәренең ҡанаттары аҫтына алған, беҙҙе үҙ иткән, беҙгә бәхетле балалыҡ бүләк иткән һөйөклө ата-әсәйебеҙгә, беҙҙе матди яҡтан тәьмин иткән хөкүмәтебеҙгә сикһеҙ рәхмәтлебеҙ...

Хәмер булған ерҙә етемлек арта. Етемлектең ниндәй ауыр ғазап икәнлеген мин һәм беҙҙең ғаиләгә тәрбиәгә алынған балалар яҡшы беләбеҙ. Атаәсәйле көйө етем балалар күп. Иҫән-һау көйө үҙ балаларынан баш тартҡан, уларҙы тәрбиәләмәгән атаәсәләргә ҡарата ҡаты закон уйлап сығарыу, минеңсә, иң дөрөҫ юл. Сөнки бөтә етемдәрҙе балалар йорттарына урынлаштырып ҡына мәсьәләне хәл итеп булмай. Шуға күрә, етемлекте иҫкәртеү, киләсәге булмаған ғаиләләрҙе алдан күреп асыҡлау, уларҙы һәр яҡлап контролгә алыу, ҡурсалау хәстәрлеген күрһен ине Ҡоролтай.

**Гөлназ ҒӘЛӘҮЕТДИНОВА,**
**Баймаҡ районы 1-се Әтҡол ауылы**
**Башҡорт республика компьютер лицей-интернаты уҡыусыһы.**
**11-се синыф уҡыусыһы**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анык диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Гайморит

❖ Был сирҙән ҡотолоу өсөн аҙнаһына 2 тапҡыр мунса инергә. Бынан алда 5 лимондың һутын һығып, уға яңы ғына ҡырылған керән өҫтәргә, ҡуйы ҡаймаҡ шыйыҡлығында булырға тейеш. Мунсаға инер алдынан ярты балғалаҡ ҡатнашманы ашарға. Мунсала танау менән генә тын алырға. Бер нисә процедуранан һуң сирегеҙ тураһында онотorһоғоҙ.

### Бөйөрҙәге таштар

❖ Бөйөрҙәге таштар ауыртыуһыҙ ғына ирееп бөтһөн тиһәгеҙ, 1-әр балғалаҡ петрушка тамыры һәм япраҡтарын ваҡлап, 1 стакан ҡайнар һыуҙа 2-3 сәғәт төнәтеп, ашарҙан бер сәғәт алда 1-әр стакан эсергә.

### Невралгия

❖ 10 грамм тал ҡайырыһын ваҡлап, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡасын ябып, 20 минут талғын утта ҡайнатырға. Һыуынғас, һөҙөргә һәм көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

### Депрессия

❖ Депрессиянан ҡашҡарый (астра) сәскәһе ярҙам итә. 1 ҡалаҡ кипкән сәскәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр 1-2 ҡалаҡ эсергә.

### Быуын һыҙлағанда...

❖ Быуын һәм мускулдар һыҙлағанда ҙур ғына дегәнәк япрағын өҙөп алығыҙ, бер нисә секундҡа эҫе һыуға тығып алығыҙ, ҡороҡҡансы һөртөгөҙ һәм һыҙлаған урынға бәйләгеҙ. Япраҡ кипһә, алыштырығыҙ. Бер нисә көн дауаланғандан һуң, хәл яҡшыра.

### Тимерәү

❖ Тән тиреһе тимерәүҙән таҙарһын өсөн бер нисә көн уны уртаға бүленгән йөҙөм менән ышҡырға.

### Йоҡоһоҙлоҡ

❖ Йоҡлай алмай яфаланһығыҙ, ҡомалаҡ тубырсыҡтарынан яҫтыҡ эшләгеҙ һәм йоҡлай алмағанда эргәгеҙә һалып ятығыҙ. Бындай яҫтыҡты яҡшы итеп тукымаға төрөп, шкафта һаҡлайҙар.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Айҙа болон яланында борон ете ырыуҙың тамғалары һуғылған имән бағана торған. Бағана серешә, уның урынына яңыһын ултыртҡандар. Ете ырыу берләшмәһе монгол-татар яуы дәүеренән, йәғни XIII быуат башынан билдәле.*



## ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# АҠҠОШ - УҢЫШ БИЛДӘҺЕ

**Бөтөн халыҡтарға, шул иҫәптән, башҡорттарға ла аҡҡошто изгеләштереү хас. Фольклор прозаһында һәм дини ҡараштарҙа аҡкош иң тәүҙә ваҡиғаларҙы һәм бәләләрҙе алдан иҫкәртеүсе булараҡ һүрәтләнә. Был түбәндәге ышаныуҙарҙа ла күренә: аҡҡош төшкә инһә - бәхеткә, аҡҡош йорт-ҡура тирәһенә оя ҡорһа - изгелеккә һәм, киреһенсә, ауыл өҫтөнән аҡҡош осһа - аслыҡҡа.**

Халыҡ ижады өлгөләрендә аҡҡош кешене бөтөнләй икенсе сифаттар менән яңынан тыуҙыра ала, тип тә яҙыла. "Ғәҙел батша" әкиәтендә малды ҡурҡытып, көтөүлектәр өҫтөнән осоп йөрөгән аҡҡошто батша атырға бойора. Атылған аҡҡошто батшаға килтерһәләр, ул уның маңлайында яҙыу күрә: "Кем минең башымды ашай, шул мәңге батша буласаҡ". Батша шунда уҡ аҡҡоштоң итен бешерергә ҡуша. Тик аҡҡоштоң башын батшаның кесе улы яңылыш ашай ҙа ҡуя. Ул төрлө һынауҙар үтеп, бер нисә йылдан ғәҙел батша булып китә.

2000 йылда Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында Ә. Усманованан яҙып алынған "Алтын ашыҡ" әкиәтендә аҡҡош кеше ашаусы мәскәйҙән малайҙы ҡотҡара. Малай ултырған ағасты мәскәй бына-бына ҡырҡып йыға тигәндә, уның эргәһенә аҡҡош осоп килә. Малай үҙенең хәлен белдереп, уның ҡанатына ата-әсәһенә хат яҙа. Аҡҡош уларҙың ихатаһына осоп төшә һәм ҡанатын йәйеп ебәрә. Малайҙың әсәһе хатты уҡый ҙа, бәйҙә торған ике этен ысҡындыра. Эттәр мәскәйҙе өҙгөләп ташлай һәм малайҙы ҡотҡара.

"Майсәрүәр" әкиәтендә аҡҡош-ҡыҙ геройҙы диңгеҙ аша алып оса, егет өсөн ҡатмарлы хәлдәрҙе үтәй йәки егеткә кәңәштәре менән ярҙам итә. "Алдар менән Зөһрә" эпосында дәүләтле ҡош - аҡ ҡош геройҙарға шулай уҡ ҙур ярҙам күрһәтә. Ул уларҙы ҡара ҡоштар һәм айыуҙар һөжүменән ҡотҡара, бәрей аты менән көрәшә һәм һуңынан уны батырға ҡыуып алып килә. Был ҡош батырҙы Зөһрәгә тиклем оҙатып та ҡуя. Геройҙар рәхмәт йөҙөнән уға ҡорбан салалар.

Көнбайыш Себерҙең төньяғында йәшәүсе секлькуптар тигән халыҡта ла бындай мотивтар һәм сюжеттар бар. Уларҙың ышаныуы буйынса, яҙын аҡҡоштар ауыл өҫтөнән өсөн барғанда түбәнерәк төшөп, өйрөлөп китһәләр, был ғаилә бәхете килтерә. "Кощей Бессмертный" тигән урыҫ әкиәтендә аҡҡош Иван-царевичҡа Кощейҙың йәне йәшерелгән йомортҡаны алып осҡан өйрәкте тоторға ярҙам итә. Немецтарҙа аҡҡош диңгеҙселәрҙе һаҡлаусы.

Хакастар аҡҡоштоң муйын тиреһенән тегелгән муҡсала аҡса һаҡлаған. Был кешенең һәр ваҡыт аҡсаһы буласаҡ, тип ышанғандар. Бүрәт риүәйәттәрендә аҡҡош-ҡыҙҙар фәҡирҙәргә байлыҡ бүләк итә. Көньяҡ Азия халыҡтарында ла аҡҡош байлыҡ, уңыш символы, тип иҫәпләнә. Боронғо төрки яҙма ҡомартҡыһы "Ырк битиг"та ("Яҙмыштар китабы") боронғо бер риүәйәт бар. Бер яугирҙың аты хәлдән тайғас, ҡайҙандыр аҡҡош килеп сығып, яугирҙы ултыртып ала һәм атаәсәһенә илтеп тапшыра. Ҡаҙаҡ әкиәт фольклорында бер туғандар араһында ыҙғыш сығып, герой ер аҫты батшалығына барып эләгә. Уға бер аҡыллы ҡарт осрап, аҡҡошҡа әйләнеп, уны ер өҫтөнә сығара.

Бөтөн был этнографик һәм фольклор материалдар раҫлауынса, Европа, Азия һәм Америка халыҡтарының барыһында ла аҡҡош тотемик тәүбаба булараҡ ҡабул ителгән.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

## ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**Боронғо башҡорт ҡоролтайҙары һәм йыйындары тураһында яҙма сығанаҡтар күп түгел. Тарих фәнендә лә был темаға бағышланған ғилми хеҙмәт юҡ. Беҙ бөгөн был хаҡта күберәк риүәйәттәр һәм ошо оло йыйындарҙың эҙен һаҡлаған тарихи урындар аша ғына фекер йөрөтә алабыҙ. Шуларҙың береһе - Йылайыр районындағы Айҙа болон яланы (Иван-Ҡыуалат ауылынан алыҫ түгел ерҙә урынлашҡан).**

# ЫРЫУҘАРҘЫ БЕРГӘ ЙЫЙҒАН...

## сәйәси институт булған ҡоролтайҙар



*Илдар Ғаяновтың "Йыйын" картинаһы.*

Халыҡ һөйләүе буйынса, бында борон Ете ырыу берләшмәһе (Үҫәргән, Бөрйән, Түңгәүер, Тамъян һәм Ҡыпсаҡ ҡәбиләһенең өс ырыуы) ҡоролтай, йыйындар үткәрер булған. Айҙа болон яланында борон ете ырыуҙың тамғалары һуғылған имән бағана торған. Бағана сереһә, уның урынына яңыһын ултыртҡандар. Башҡортостандың ҙур ғына территорияһын биләп торған Ете ырыу берләшмәһе монгол-татар яуы дәүеренән, йәғни XIII быуат башынан билдәле. Сыңғыҙханға барып, башҡорт ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғы һәм үҙенә бейлек ярлығы алып ҡайтҡан Үҫәргән бейе Мөйтәндең ошо берләшмәнең башында торғанлығы билдәле. Артабанғы быуаттарҙа Ете ырыу берләшмәһен Мәсем хан етәкләүе тураһында "Күсәк бей" дастанында бик асыҡ бәйән ителә.

Бына ошо ырыу вәкилдәре XVI быуаттың урталарында Айҙа болон яланында ҡоролтай үткәреп, Рус дәүләте составына инергә, тигән ил алдында торған бик мөһим мәсьәләне лә хәл иткәндер, тигән фекергә урын бар. Сөнки 1555 йылдың аҙағында һәм 1556 йылдың башында ете ырыу вәкилдәренең берләшкән илселеге (үҫәргәндәрҙән - Бикбау бей, ҡыпсаҡтарҙан - Мөшәүәли Ҡарағужаҡ, Тамъян ырыуынан - Шәғәли Шаһман, Бөрйәндән - Иҫке бей) Иван батшаның наместнигына барып, һөйләшеүҙәр үткәреп ҡайта. Ә инде 1557 йылда "Аҡ батша"нан, үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғын раҫлатып, ярлыҡ - жалованный грамоталар алалар. Ете ырыу берләшмәһендәге ырыуҙарҙың ер биләмәләренең сиктәре билдәләнә. Был турала ырыуҙарҙың шәжәрәһендә яҙылған. Шәжәрәлә ете ырыу йыйылыр Айҙа болон урыны ла телгә алынған. Тимәк, был осорҙа Айҙа болон яланы ысын мәғәнәһендә мөһим ижтимағи-сәйәси әһәмиәткә эйә урын булған, тип фекер йөрөтөргә мөмкин.

Бөрйән районындағы Тарауыл (Тарыуал) яланы ла ете ырыу ҡор йыйған урындарҙың береһе иҫәпләнә. Әлбиттә, Башҡортостандың һәр төбәгендә төрлө ырыу башҡорттары йыл һайын үҙҙәренең йыйындарын үткәреп торор булған. XVII - XVIII быуаттарҙағы дөйөм башҡорт ҡоролтайҙары тураһында Зәки Вәлиди бик тә ҡиммәтле мәғлүмәттәр яҙып ҡалдырған. Ул үҙенең "Башҡорттар тарихы" китабында төрлө быуаттарҙа булып үткән өс башҡорт ҡоролтайын телгә ала. Иң мөһиме - ул дөйөм башҡорт ҡоролтайҙары уҙғарылған урындарҙы күрһәтә. Мәҫәлән, 1681-1684 йылдарҙа, батша хөкүмәтенең суҡындырыу сәйәсәтенә ҡаршы ҡупҡан Сәйет яуы осоронда, "Башҡорттар 1682 йылда Нуғай даруғаһындағы Суртанлы күл янында ҡоролтайға йыйылды", - тип яҙа ғалим (Зәки Вәлиди Туған. "Башҡорттар тарихы", Анкара, 2003, 280-се бит). Был ҡоролтай хәҙерге Әбйәлил районының көнсығышында урынлашҡан Суртанды (әҙәби тел менән әйткәндә - Суртанлы) күл янында уҙғарылған.

XVIII быуат башында дөйөм башҡорт ҡоролтайы 1704 -1711 йылдарҙағы Алдар Күсем яуы, башҡорт азатлыҡ хәрәкәте осоронда үтә. Башҡа һыймаҫлыҡ күп яһаҡ һалыныуға (башҡорттарға 72 төрлө яһаҡ уйлап сығарыла, шуларҙың береһе күҙҙәре һоро булған өсөн, икенсеһе - һәр өйҙөң мөрйәһенә яһаҡ һ.б.), батша хакимиәтенең урындағы түрәләренең баш-баштаҡлығына сик ҡуйыу өсөн башҡорттар, 1706 йылдың февралендә ҡоролтай үткәреп, Петр батшаға үҙҙәренең ауыр хәле тураһында мөрәжәғәт итергә була. Ҡоролтайҙа бөтә башҡорт халҡы исеменән батшаға, уның ғәҙеллегенә өмөт итеп, хат яҙыла. Ул хаттың аҙағында: "...Өфө өйәҙенең төрлө улыстарынан һайланмыш башҡорттар: Нуғай даруғаһы Мең улусынан - Тимербулат Яҡшыуанов; Себер даруғаһынан - Сурағол Тойғолдин, Ишбай Несесов; Ҡаҙан даруғаһы Байлар улысынан - Урсай Мәтеков; Уҫа даруғаһы Уран улысынан - Тыныс Тереғолов, Ыҫмаҡ Исаев үҙ иптәштәре менән. Бөтә дүрт даруға бөтә улыстарҙың башҡорттары..." - тиелгән ("Башҡорт әҙәбиәте антологияһы", Өфө, 1999, 1-се том, 313-сө бит).

Был хатты Тимербулат Яҡшыуанов етәкселегендәге һигеҙ башҡорт вәкиле Мәскәүгә алып бара. Ләкин батша Петр I, халыҡ вәкилдәрен ҡабул итеү урынына, аяҡ-ҡулдарын бығаулатып, Ҡаҙанға оҙата. Ҡаҙан властары, үтенес хатында үҙҙәренең баш-баштаҡлыҡтары хаҡында ла яҙылғанлыҡты белеп, вәкилдәрҙең береһен аҫа, ә ҡалғандарын зинданға яба. "Ғәҙел" батшаның ошондай ҡылығынан һуң башҡорт халҡы үҙ азатлығы өсөн яуға күтәрелә. Ихтилал Волганан - Тубылға, Яйыҡтан Пермгә тиклемге араны ялмап ала. Зәки Вәлиди 1724 йылда Өфө өйәҙендәге Бәрсеүән күле янында башҡорттарҙың ҡоролтайға йыйылғанлығы тураһында яҙа: "Алдар тархан 700 кешеһе менән, Сәйет баһадирҙың 1707 йылда ҡырғыҙҙарға ҡасып киткән улы 500-гә яҡын ҡырғыҙ менән ошо ҡоролтайға килгән. Һәр тарафтан күл янына йыйылған башҡорттар һәм татарҙар, Өфөгә һөжүм итергә, тигән ҡарарға килә" ("Башҡорттар тарихы", 309-сы бит). Зәки Вәлиди телгә алған ҡоролтайҙың 1706 - 1711 йылдар тирәһендә булыуы ихтимал. Тап ошо осорҙа башҡорт хәрәкәте дөрләп торған. Сөнки Петр батшаның ғәҙеллегенә өмөтөн өҙгән халыҡ, ҡоролтайға йыйылып, ғәҙеллекте ҡорал менән дауларға ҡарар иткән.

1734 йылдың декабрендә үткән ҡоролтай ҙа Башҡортостан алдына килеп баҫҡан ауыр дәүер менән бәйле. Батша хөкүмәте, башҡорт халҡының рөхсәтенән тыш, Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында ҡәлғәләр төҙөргә ҡарар итә. Ошо арҡала азатлығын юғалтасағын яҡшы аңлаған халыҡ оло ҡоролтайға йыйыла. Зәки Вәлиди был ҡоролтай тураһында бына нимә тип яҙа: "Рәсәй хөкүмәтенең яңы сәйәсәте тураһында Түләкәй улының Петербургтан яҙған хатын алыу менән Килмәк абыҙ башҡорт ырыуҙары күренеклеләренән Йыһанғол улын, Ирәҡол улын, Кимәт улын саҡырып, "Хажи мәсете"ндә (йәғни хәҙерге Хажи ауылында) ҡоролтай, башҡортса - йыйын тупланы. Унда урыҫтарҙың был эштәренә ҡорал менән ҡаршы торорға ҡарар иттеләр, күтәрелештең планын ҡорҙолар" ("Башҡорттар тарихы", 314-се бит).

Әйткәндәй, Зәки Вәлиди Хажи ауылындағы ҡоролтай тураһында ҡыҙ-

ыҡлы мәғлүмәттәр килтерә. Ул: "Ырымбур ҡалаһын төҙөй башлауҙан әүәл үк ғәскәрендә үҙ ирке менән хеҙмәт итеүсе тархандар булған хәлдә лә, Юрматы улысы үҙәге Һиҡәҙе йылғаһы буйындағы Хажи мәсете исемле ерҙә йыйын - халыҡ ҡоролтайы тупланды. Боронғо хандарҙан Күсем улдары, ҡаҙаҡ хандарынан Ҡайып хан һәм уның улдары төрлө күтәрелеш һәм яу ваҡыттарында дөйөм хәрби етәксе һәм хакимдар сифатында танылһа ла, тыныс дәүерҙә уларҙың Башҡортостандағы хакимиәте номиналь рәүештә ҡала ине. Йәғни хандар бөтә башҡорт өлкәһендә танылған дөйөм бер хөкүмәт ҡорманы, һәр улыс үҙ тарханына һәм бейенә буйһонды. Ҡаҙан вәлийе Апраксин 1709 йылда Петрға ебәргән рапортында башҡорттар тураһында ошолай яҙа: "Был мәлгүн башҡорттар - күмәк, һуғышсан һәм ғәскәри бер милләт. Ләкин баштары боҙоҡлоҡтан, һис юғында, Дон казактарындағы кеүек булһа ла, барыһы ла танығын дөйөм бер атамалары ла, эштәре хаҡында мөрәжәғәт итерлек дөйөм бер үҙәктәре лә юҡ". Башҡорттар ғөмүми бер "атаман"ға буйһонмауға ҡарамаҫтан, "Хажи мәсете"ндәге йыйын уларҙың хөкүмәте ине. Рустарға төбәп яҙылған документтар унда йыйылған "Ете ырыу бейҙәре" исеменән ебәрелер булған", - тип яҙа ("Башҡорттар тарихы", 311-се бит).

Үҙе өсөн ҡурҡыныс янауын тойған батша власы 1736 йылдың 11 февралендәге указы менән башҡорт ҡоролтайҙарын һәм йыйындарын үткәреүҙе тыя. Тик йылына бер тапҡыр ғына Өфө янында Ҡаратүң (Чесноковка) тауында, властар күҙәтеүе аҫтында ғына башҡорт старшиналарына йыйылып, кәңәш-төңәш ҡороп, булған мәсьәләләрҙе урындағы властарға яҙма рәүештә еткерергә рөхсәт ителә. Тарихсы Әнүәр Әсфәндийәров яҙыуынса, XIX быуаттың беренсе яртыһында бындай йыйындар тураһында әлегә бер документ та табылғаны юҡ. Тимәк, кантон идаралығы осоронда дөйөм ҡоролтай, йыйындар юҡҡа сыҡҡан, тиғән һығымта яһай, һәм был осорҙа инде бер нисә ауыл халҡы йыйылып, байрам итеү рәүешендә генә йыйындар ойошторор булған, ти. Халыҡ хәтерендә һаҡланып ҡалған "Һәүәнәк йыйыны", "Зәйнулла йыйыны", "Атайсал йыйыны" тип аталған йыйындар тап ошо дәүерҙән киләләр.

Шулай итеп, дөйөм ҡоролтайҙар, йыйындар башҡорт халҡын ауыр мәлдәрҙә туплау һәм ил алдына килеп баҫҡан мәсьәләләрҙе бергәләп хәл итеү йәһәтенән ҙур роль уйнаған мөһим үҙидара органы, сәйәси институт булып торған.

Батша власы дөйөм ҡоролтайҙарҙы XVIII быуаттың төүге яртыһында уҡ тыйып, уны юҡҡа сығарыуға өлгәшһә лә, халыҡ аңынан юйыуға өлгәшә алмай. 1917 йылда, Февраль революцияһынан һуң, үҙ яҙмышын үҙе хәл итерҙәй мөмкинлек тыуыу менән, башҡорт халҡы, боронғо замандарҙағы кеүек, тағы ҡоролтайҙарға йыйыла. I Дөйөм башҡорт ҡоролтайы Ырымбурҙа 1917 йылдың 20 - 27 июнендә уҙғарыла. Бында башҡорт халҡын борсоған ер мәсьәләһе - тартып алынған аҫаба ерҙәрҙе кире ҡайтарыу, милли ғәскәр төҙөү мәсьәләләре күтәрелә. Ҡоролтайҙың ҡарарҙарын бойомға ашырыу өсөн Башҡорт мәркәз шураһының башҡарма комитеты һайлана.

Шул уҡ йылдың 25 - 29 авгусында Өфөлә II Башҡорт ҡоролтайы үтә. Ҡоролтайҙа Петроградта үтәсәк Ойоштороу йыйылышында ҡатнашасаҡ вәкилдәрҙең кандидатуралары раҫлана. Башҡорт мәркәз шураһының эшмәкәрлеге буйынса доклад уҡыла.

Башҡорттарҙың III ойоштороу (учредительный) ҡоролтайы 1917 йылдың 8 декабрендә Ырымбурҙа, Карауанһарай бинаһында асыла. Уның эшендә 223 делегат ҡатнаша. Бында Башҡорт мәркәз шураһы тарафынан 15 ноябрҙә иғлан ителгән Рәсәй составындағы Башҡортостан автономияһы раҫлана. Ҡоролтай делегаттары Башҡортостан хөкүмәтен һайлай. Ойоштороу һәм закондар сығарыу хоҡуғына эйә булған даими орган - 22 кешенән торған Кесе ҡоролтай ҙа шунда һайлана. Шулай итеп, 1917 йылда үткән дөйөм башҡорт ҡоролтайҙарында Башҡортостан автономияһы тыуа - башҡорт дәүләтселеге тергеҙелә. Ҡоролтай ҡарарҙары ғәмәлгә ашырыла башлай.

1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Советтар яғына сыға. Ошо уңайҙан 21 февралдә Темәс ауылында I Дөйөм башҡорт хәрби ҡоролтайы уҙғарыла. Унда 92 делегат ҡатнаша. Хәрби ҡоролтай башҡорт ғәскәрҙәренең ҡыҙылдар яғына сығыуын хуплай. Йыйында Башҡортостандың ваҡытлы революцион комитеты - Башревком һайлана. Башҡортостандағы бөтә власть Башревком ҡулына тапшырыла. 1919 йылдың мартында килешеү буйынса Үҙәк совет власы Башҡортостан автономияһын таный. Шулай итеп, Рәсәйҙә ысын мәғәнәһендә федерация иткән, уның федерализм йүнәлешендәге үсешенә нигеҙ һалған республика - Башҡортостан Совет автономияһы барлыҡҡа килә. Ләкин бер йылдан һуң, 1920 йылдың майында, Үҙәк совет власы үҙенең декреты менән Башҡортостандың киң автономиялы хоҡуҡтарын юҡҡа сығара. Ошонан алып Башҡортостан автономияһы исем өсөн генә тиерлек тороп ҡала, етмеш йылдан ашыу ошо хәлендә йәшәй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тарихи сығанаҡтарҙы барлағанда, башҡорттоң әллә нисә быуат ағымында үткәрелә килгән бар ҡоролтайҙарының да уртаҡ хәстәре - ер икәнен аңлайһың. Улар шул ер өсөн ҡор йыйған, ер өсөн баш һалып батшаларға барған, ер өсөн ҡан түккән, ғүмерен ҡорбан иткән. Бөгөнгө ҡуҙлектән беҙ үткән ҡоролтайҙарҙың ни тиклем баһаһы юғары булғанлығын, уларҙың ысынлап етди проблемалар хәл иткәнлеген һәм мотлаҡ ниндәйҙер маҡсаттарға өлгәшкәнлеген аңлайбыҙ. Ошоларҙан сығып, бөгөнгө ҡоролтайҙарҙың да киләсәк быуындар фекере, баһаһы өсөн эшләргә тейешлектәре тураһында хәтерләтке килә. Ни тиер киләһе быуын, киләһе быуат балалары әлеге ҡоролтайҙар хаҡында? Баһаһы булырмы уларҙың? Ә бит тарих өсөн уларҙың фекере үтә лә мөһим буласаҡ. Сөнки былар барыһы ла башҡорт иленең, милләтенең тарихы булып ҡаласаҡ.**

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
**әҙерләне.**

## БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Усольск заводынан юлыбыҙ Ағиҙел йылғаһының таулы яры буйлап дауам итте. Ул саҡта йылғаларҙа шаулап-гөрләп аҡҡан яҙғы һыуҙар юлыбыҙҙы ауырлаштырҙы; ул көндө алға табан 16 саҡырымда ятҡан башҡорт ауылы Ҡотлоғужанан да йырағыраҡ китә алманыҡ. Ошо 16 саҡырым арауыҡта Ағиҙелгә ҡойоусы Инйылға тигән ҙур булмаған йылғасыҡ исеме менән аталған бәләкәй генә башҡорт ауылы бар, беҙгә ошо йылға кисеүе аша сығыу уңай булды.

Беҙ Ҡотлоғужа ауылына килгәндә, башҡорттар ығы-зығылы эштәр менән мәшғүл ине; ошоноң сәбәбе тураһында һорашҡас, улар иртәгә буласаҡ Һабантуйға йәғни, Һабан байрамына әҙерләнеүҙәрен белдерҙе. Башҡорттар әле лә бик әүҙем һәм шәп ер эшкәртеүсе булмаһа ла, урыҫ һәм яһаҡ түләүсе татар ауылдары менән күрше йәшәгәнлектән, игенселеккә илтифат итә башланы; һәр кем иң кәмендә үҙенә етерлек кимәлдә булһа ла ашлыҡ сәсергә тырыша. Улар күбеһенсә тары һәм һоло сәсә, ә ужым игенен үҙҙәренә кәрәк тип тапмай. Тарма сәсеүгә лә үтә иғтибарлы улар: көнкүреш тәжрибәһе уларға киндер тукыманың ата-бабалары ҡулланған кесерткән тукыманан күпкә яҡшыраҡ икәнен төшөндөргән. Үҙ губернаһының етеш тормошо хаҡында ҡайғыртҡан Ырымбур идаралығы төрлөсә хуплау юлдарын табып, башҡорттарҙың ер эшкәртеүгә йылдан-йыл хәстәрлерәк тотоноуына булышлыҡ итә һәм, бәлки, ваҡыттар үтеү менән улар үҙҙәренең игенселеге менән мишәрҙәр һәм татарҙар кеүек үк файҙалы эш башҡарасаҡ; тик бының өсөн уларҙы аҡрынлап күсмә тормош алып барыуҙан арындырырға кәрәк буласаҡ. Табын ҡаласығы янында башҡорттар урыҫтар менән шулай уҡ күршеләш булһалар ҙа, башҡаларға ҡарағанда үҙ ерҙәштәренең йолаларын тиҙерәк ҡабул итә, һәм Һабан байрамы ошоға миҫал булып тора.

Һабан байрамы ер һөрөү ҡоралы булған һабан менән бәйле шулай атала һәм һабанға төшөү алдынан билдәләнә. Был тантанала донъяуи һәм рухи йолалар ҡатнаш булып, түбәндә бәйән ителгәнсә башҡарыла.

Кистән бөтөн ауылдан йәш егеттәр йыйылып, иң шәп аттарҙа ауылдың бер осонан икенсеһенә тиклем үтеп, кире килгәндә һәр өй ҡаршыһында туҡтала, ошо өй хужаһы ниндәйҙер бер бүләк алып сыҡҡансы иҫ китмәле тауыш һәм шау-шыу сығара. Башлыса, уларға тауыҡ йомортҡалары бирәләр. Һәр йорттан ошо түләүҙе йыйып бөткәс, йәштәр үҙ йорттарына ҡайтып китә. Иртә менән ҡояш сыҡҡансы ошо йәштәр төркөмө яланға йүнәлә һәм, байтаҡ ҡына ара тәшкил иткән ерҙе билдәләп, кемуҙарҙан сабышып сығып китә. Ауылға кергән ерҙә уларҙы ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙан торған тамашасылар көтә; тамашасыларҙан бер ни тиклем алыҫлыҡта ҡулына мөйөштәре төрлө төҫтәге ебәк еп менән сигелгән аҡ яулыҡ бәйләнгән ҡолға тотҡан егет йәиһә ҡыҙ тора: үҙ атында беренсе килгән дә уҙып, ошо яулыҡты ҡолған эләктереп алыусыға ошо яулыҡ бүләк итеп ҡалдырыла. Яулыҡтың әллә ни баһаһы булмаһа ла, ошо уҙышта еңеү бик ололана, ә тамашасылар, күмәкләшеп ҡысҡырып, еңеүсегә күп маҡтау һүҙҙәре яуҙыра. Әгәр билдәләнгән урынға бер юлы ике кеше бергә килеп етеп, яулыҡты тотһа, ошо бүләкте алыр өсөн бер-береһен көрәшеп еңергә тейеш. Уларҙың көрәше уғата шәп булыуы менән билдәле: улар, урыҫ көрәшселәре кеүек, бер-береһенең яғаһынан алмай, ә билбауҙарынан тота һәм көрәштә ҡулланылған ҡәҙимге алымдар ҡуллана. Яулыҡ ҡиммәтле булмаһа ла, осһоҙло бүләкте лә башҡа кешегә үҙ теләге менән ҡалдырыусы һирәк була: уларҙың ҡанунына ярашлы, Һабантуй батырына бирелә торған бүләк ауылдың иң йәш килене тарафынан яһалған була. Батырҙар ярышынан һуң ауылдың бар кешеһе мәсеткә намаҙға йыйыла һәм Аллаһтан мул уңыш һорай. Ошонан һуң ауылда дөйөм ҡунаҡ булышыу башлана; ә йәштәр көрәш, йомортҡа менән йүгереү, бәүеләсҡтә атыныу, әйләнбәйлән кеүек уйындар ҡора; байрам тамамланғас, ер һөрөүгә тотоналар.

## ҠОРОЛТАЙҒА ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...



# ТЫНЫСЛЫҠТЫ...

## беҙҙең тамырҙар тотоп тора

**Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы шатлыҡ байрамы булараҡ хәтерҙә ҡалған. Суверенитет яулаған осор ине бит - проблемалар тураһында күп һөйләнелде, ә йыйындың үҙендә байрам кәйефе тантана итте. Икенсе ҡоролтай беренсеһе менән сағыштырғанда эшлеклерәк үтте, Өсөнсөһө тағы ла эшлеклерәк булды.**

Заманалар менән бергә йәмғәт ойошмаларының эшмәкәрлек йүнәлештәре лә үҙгәрергә тейештер инде. Етмәһә, донъялар ҙа тыныс түгел. Шуға ла Дүртенсе ҡоролтайҙа шуға иғтибар итергә кәрәк: күп динле, күп милләтле республикала тыныслыҡты тотоп торған сабыр тамыр - ул башҡорт халҡы. Әгәр ҙә башҡорт халҡы башҡаларға изге күңел менән яҡты йөҙ күрһәтмәһә, әллә ниндәй хәлдәр килеп сығыр ине. Беҙҙең дуҫлыҡтың төп нигеҙе - халыҡтың быуындан-быуынға, быуаттан-быуатҡа килгән аҡылынан, Рәсәйгә бирелгәнлегенән килә. Беҙҙең халыҡ бер ҡасан да һуғыш башламаған. Бына ошо хәҡиҡәт менән ғорурланмау мөмкин түгел.

Икенсе ҙур проблема -халыҡты һаҡлау. Минең торғонлоҡ осоронда арнап яҙылған "Торналарға ялбарыу" тигән поэмам бар. Унда ирҙәребеҙҙең күпләп Себер тарафтарына эшкә китеүе тураһында телгә алына. Шул процесс яңынан ҡабатлана бит - мине шул борсоуға һала. Эш эҙләп ситкә киткәндәрҙең ассимиляцияға бирелеүе иң ҙур бәлә. Үҙебеҙҙең асылыбыҙҙы, илебеҙҙе һаҡлап ҡалыу - беҙҙең төп маҡсат шул булырға тейеш. Ереbеҙгә үҙебеҙ хужа булайыҡ. Ереһеҙ ил булмай. Әгәр ерҙәребеҙ ситтәргә һатылып бөтһә, дәүләт, республика булмай. Шуға күрә, бәлки, Дүртенсе ҡоролтайҙа фермерҙарҙы үҫтереү, яңы кооперативтар ойоштороу тураһында мәсьәләләр күтәрелер? Ер халыҡтың яҙмышы менән бәйле. Әгәр ерҙәр һаман ташландыҡ хәлдә ята бирһә, халыҡҡа был да кире тәьсир итә. Кеше күңелендә битарафлыҡ тыуа. Шунан ул тағы эскелеккә йәбешә. Ауыл кешеһе ерҙе эшкәртергә, иген үҫтерергә үҙе тотонор ине - техникаһы юҡ, аҡсаһы юҡ. Бына шул проблемаларҙы асыҡтан-асыҡ һөйләшергә кәрәктер инде беҙгә артабан йәшәү өсөн...

Бөтәһе лә шыма ғына бармай шул, ни хәл итәһең. Мәсьәләләр бик күп. Мәктәптәрҙе, мәҙәниәт усаҡтарын, фельдшер-акушер пункттарын оптималләштереп бөткәс, халыҡ нисек йәшәргә тейеш, тигән һорау тыуа. Шулай уҡ беҙҙең тормош-йәшәйеш айырым бер утрауҙа түгел - Рәсәй йәшәйешенә, сәйәсәтенә, иҡтисадына бәйле. Шуға ла был заман көрсөктәренән ҡотолоу юлдарын бергәләп эҙләргә, илде тотоп торорҙай йәш лидерҙар үҫтерергә кәрәк.

**Фәкиһә ТУҒЫҘБАЕВА,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

**✓ Шулай итеп, еренә, иркенә ҡурҡыныс янаған саҡта башҡорттар, сараһыҙҙың көнөнән, дошманға ныҡлы ҡаршылыҡ та күрһәтә, мәле еткәндә дипломатик һөйләшеүҙәр ҙә алып бара белә. Әммә бер илгә лә баҫып инмәй.**

# АЛҒА ҠАРАП

## тарихи үткәндәребеҙгә

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайҙарында күтәрелгән милләтебеҙ проблемалары, ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы тормошҡа ашырыу мәсьәләләре ниндәйҙер кимәлдә "Киске Өфө" гәзите биттәрендә сағылыш таба килә. Һеҙҙең иғтибарға билдәле шәхестәрҙең гәзиттең "Диалог", "Монолог", "Түңәрәк ҡор" рубрикаларында баҫыла килгән милләтебеҙ тарихы, бөгөнгөһө һәм киләсәге, рухи һәм дини булмышы, менталитеты, сәнғәте һәм мәҙәниәте хаҡындағы фекерҙәренән өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.**



### Эште үҙебеҙҙән башлайыҡ...

***Мансур ӘЙҮПОВ, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының вице-президенты:*** Бөгөн милли тел, мәҙәнилек мәсьәләләре бик етди тора. Был хаҡта ил Президенты В.В. Путин әйткән шундай һүҙҙәр бар: "Беҙгә граждандлыҡ рухына нигеҙләнгән милли сәйәсәт стратегияһы кәрәк. Беҙҙең илдә йәшәгән кеше үҙенең дине һәм милләте хаҡында онотторға тейеш түгел. Әммә ул иң элек Рәсәй гражданины булырға һәм ошоноң менән ғорурланырға тейеш. Берәүҙең дә милли һәм дини үҙенсәлектәрен дәүләт закондарынан өҫтөн ҡуйырға хаҡы юҡ. Ләкин был осраҡта дәүләт закондары милли һәм дини үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алырға тейеш". Күренеүенсә, милли мәсьәләнең ҡуйылышы бик етди һәм төплө. Ҡыҫҡаса әйткәндә, һүҙ кешенең милли һәм дини үҙенсәлектәрен уның дөйөм граждандлыҡ сифаттары менән яраштырыу тураһында бара. Был бик ҡатмарлы, хатта урыны менән ҡапма-ҡаршылыҡлы эш, бигерәк тә милли республикаларҙа етәкселәрҙән, сәйәсмәндәрҙән, ғалимдарҙан, журналистарҙан, мәғариф, мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренән эштең асылын белеү, төптән уйлап эш итеүҙе талап итә. Миҫалға тел мәсьәләһен алайыҡ. Бөгөн бөтәбеҙ ҙә башҡорт теленең яҙмышы, уның үҫеше, ҡулланыу даирәһен киңәйтеү, дәүләт теле сифатында ҡулланыу мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһына, борсола. Ләкин... Халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре, социологик тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, башҡорттарҙың 67 проценты ғына башҡорт телен туған теле тип иҫәпләй, ә туған телендә һөйләшеүселәр тағы ла аҙыраҡ икән, бында кемде ғәйепләргә була? Шуның өсөн телде һаҡлауҙы, үҫтереүҙе үҙебеҙҙән башларға кәрәк...

***Зөһрә БУРАҠАЕВА, яҙыусы:*** Башҡорттарҙың тәүге ҡоролтайында: "Аh, башҡорттар Австралияла ла, Японияла ла, аh, хатта Африка менән Көньяк Америкала ла йәшәй!" - тип аһылдашып, ошо факттарға ҡыуанып, күкрәк һуғып алдыҡ бит инде. Ул ваҡытта, әлбиттә, үҙаңды үҫтереү өсөн бөтә Ер шарының башҡорттарын йыйыу кәрәк булғайны. Ә бөгөнгө көндә милләтебеҙ алдында торған бурыстар барыбер ҙә икенсе. Ошо егерме йыл эсендә башҡорт телен ғаилә теле итеүсе егет-ҡыҙҙарыбыҙ, ысын патриоттар, ысын алмаш быуын үҫте. Егерме йыл - аҙ ваҡыт түгел, ул быуындар алмашыуын күҙәтерлек ваҡыт. Кемдең балалары йөрөй тәүге рәттәрҙә, кемдең балалары башҡорт мәктәптәрендә уҡый? Кемдең ейәндәре башҡортса һөйләшә лә, кемдең ейәндәре, милләтем, тип, сит-яҡтарға түгел, ә республикабыҙҙа эшләй? Аҡса өсөн дә, дан өсөн дә түгел, ә үҙебеҙҙең еребеҙҙе, үҙебеҙҙең баш ҡалабыҙҙы ташлап китергә намыҫы етмәгән шәхестәребеҙ улар. Республикабыҙ, башҡорт иле хаҡына улар бында йәшәй. Эшләй. Уйлана. Көрәшә...

### Тарихыңдан дан тап!

***Юлдаш ЙОСОПОВ, тарихсы:*** Булат Аҙнабаев "Тик хәрби халыҡтың ғына тарихы була", тип әйткәйне бер мәл. Ысынлап та, көнө буйы, йылдар буйы, быуат буйы һабан һөрөп, мал көтөп кенә йәшәгән халыҡҡа үҙ тарихын белеүҙең ихтыяжы ла юҡ. Ә хәрби халыҡҡа иһә, яугир рухын һүндермәй һаҡлар өсөн дә үҙ тарихын белеү фарыз. Халыҡ - ул сәйәсәт субъекты, ә ниндәйҙер кешеләр төркөмө фәҡәт ашауэсеү өсөн генә йәшәй икән, ул бары төркөм генә. Алтын Урҙала теге йәки был батырҙың, яугирҙең исеме һәр ваҡыт ырыуының исеме менән ҡуша аталып йөрөтөлгән. Башҡорттарҙы ла ырыу кланы системаһы тарих аренаһына алып килгән. Сөнки һәр бер ырыуҙың башҡорт милләте ҡорона ҡушылғанға тиклем үҙ тарихы булған һәм бар. Ул тарих донъяла йәшәгән бер халыҡтың йә дәүләттең тарихына барып ялғана. Башҡорт этногенезының барлыҡ күркәмлеге лә ошо факторға барып ялғана. Башҡорт ырыуҙарының гаплатөркөмдәрен өйрәнә башлағанда күптәр уның бындай һөҙөмтәләргә алып килеүен көтмәгәйне, йәғни гаплатөркөмдәр беҙҙең милләттә ырыуҙар бүленеше менән тура килә. Был күренеш шул турала һөйләй: беҙ меңәр йылдар һуҙымында ошо ерҙә йәшәп тә, берберебеҙ менән буталып бөтмәгәнбеҙ, һәр ырыу үҙенең гаплатөркөмгә бәйле үҙенсәлеген дә һаҡлап ҡала алған.

***Нәзир ҠОЛБАХТИН, БДУ-ның тарих факультеты профессоры, тарих фәндәре докторы:*** Башҡортоң иҫәбен һаҡлау өҫтөндә лә ентекле һәм уйланылған эш алып барылыуы зарур. Ассимиляция тигән ғәләмәт XIX быуатта ла булған, башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә генә түгел, Башҡортостан райондарында был процесс әле лә дауам итә. Әйтәйек, Татарстандың Баулы, Бөгөлмә, Аҙнаҡай, Әлмәт, Аҡтаныш, Минзәлә, Зәй райондары - Минзәлә өйәҙе. Ә Октябрь революцияһына тиклем Минзәлә өйәҙендә 200 мең башҡорт йәшәгәнлеге билдәле. Сиктәрҙе Ыҡ йылғаһы буйлап билдәләгәс, ул ерҙәр Татарстан биләмәһенә күсә һәм 1927 йылдағы халыҡ иҫәбен алғанда был төбәк халҡы тотошлайы менән үҙен татар тип яҙҙыра.

Пермь крайында йәшәүсе башҡорттар менән күп аралашырға, уларҙың 2006 йылда үткәргән йыйынында ҡатнашырға ла тура килде. Ғәйнә ырыуы халҡы бөгөн башҡорт ғалимдары, яҙыусылары менән осрашыуҙар көтөп йәшәй: "Бөйөк Ватан һуғышына тиклем килә инегеҙ, ниңә бөгөн килмәйһегеҙ?" - тип өндәшә оло йәштәгеләр. Барҙы төбәгендә тыуып-үҫкән шағирҙар, композиторҙар, рәссамдар ижад емештәрен Башҡортостан халҡы менән уртаҡлашырға зар илай, ләкин башҡорт йәмәғәтселеге уларҙың зарын ҡәнәғәтләндерә алмай әле...

***Азамат АҠЪЮЛОВ, Башҡорт дәүләт университетының тарих факультеты доценты:*** Тарих аренаһында башҡорттар һымаҡ ыҙалар, һуғыштар, туҡтауһыҙ барымта-ҡарымталар, карател операциялары кисергән бер халыҡ та юҡтыр, моғайын. Батырлыҡтарына ла хайран ҡалырлыҡ. Әйтәйек,14 йыл буйына башҡорттар менән һуғышҡандан һуң, ҡан ҡойоштоң мәғәнәһеҙлеген танып, Сыңғыҙхан үҙе башҡорттарға килешеү төҙөргә сапҡын ебәрә. XVI быуатта "Аҡ батша" Иван Грозный ҙа башҡорт иле менән рус илен бергә ҡушыу тураһында килешеү төҙөргә тәҡдим итә. Шулай итеп, еренә, иркенә ҡурҡыныс янаған саҡта башҡорттар, сараһыҙҙың көнөнән, дошманға ныҡлы ҡаршылыҡ та күрһәтә, мәле еткәндә дипломатик һөйләшеүҙәр ҙә алып бара белә. Әммә бер илгә лә баҫып инмәй. Был - башҡорт халҡының иң төп үҙенсәлектәренең береһе.

Рус дәүләтенә ҡушылғас та халҡыбыҙ үҙ хоҡуҡтарын яҡлап, ихтилалдарға күтәрелгән, ҡурҡмаған. Шуға күп кенә хоҡуҡтарын һаҡлауға өлгәшкән.

### Халҡыбыҙҙы һаҡлау юлы ниҙә?

***Әмир ИШЕМҒОЛОВ, "Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге" дәүләт учреждениеһы генераль директоры, биология фәндәре докторы, профессор:*** Бал ҡорто күсенең йәшәү рәүеше кешелек, ил, дәүләт һәм милләт өсөн милли идея булырлыҡ. Миҫалға барыбыҙҙы ла борсоған коррупцияны алайыҡ. Коррупция бөгөн Рәсәй дәүләтенең бәкәленә һуҡҡан күренеш булып тора. Владимир Жириновский коррупцияға ҡаршы көрәште ҡайһы бер чиновниктарҙы эштән бушатыу, төрмәгә ултыртыу рәүешендә күрә. Әммә бындай сараларҙың башҡа проблемалар тыуҙырғанын да беләбеҙ.

Ҡасандыр беҙҙең халыҡта ишеккә йоҙаҡ һалыу булмаған. Иркен йәйләүҙәрҙә көн иткәнбеҙ. Халҡыбыҙҙың асыҡлығы ла уның көнитмешенә бәйле булған. Башҡа халыҡтар менән ҡарымта, барымталарҙы иҫәпкә алмағанда, урлашыуҙар бөтөнләй булмаған тиерлек. Асыҡ өйлө, асыҡ йөҙлө, ҡунаҡсыл булғанбыҙ, коррупция шуның өсөн дә беҙгә ят күренеш. Ошо тәңгәлдә башҡорт тоҡомло бал ҡорттарының тормошона күҙ һалайыҡ. Әйткәндәй, башҡорт тоҡомло бал ҡорто үҙенә исем биргән халыҡтың менталитетына яҡын тора. Кавказ, себер, итальян тоҡомло ҡорттарҙан айырмалы рәүештә, башҡорт тоҡомло бал ҡорто сит ояға инеп бал урламай. Ә башҡа тоҡомға ҡараған ҡорттарҙың бер күсе ауылға килеп индеме, беҙҙең ҡорт ояларына һөжүмдәр башлана. Шуның өсөн дә беҙ башҡорт тоҡомло ҡорт ояларын уларҙан йәшерә һалабыҙ. Үкенескә ҡаршы, бал ҡорто тормошо менән үҙебеҙҙеке бермәбер тап килә.

***Әхтәр БОҪҠОНОВ, сәйәсәт фәндәре кандидаты:*** XXI быуатта халыҡты халыҡ булараҡ һаҡлауҙың ниндәй механизмдары булырға тейеш? Ә бына 1917 йылға тиклем төрлө губерналарҙа йәшәгән халҡыбыҙ үҙен һаҡлаған бит. Башҡорт - диаспорала йәшәй торған халыҡ түгел. Беҙҙең халыҡ йәшәгән еренән сығып китһә, юғалыуға еңелерәк дусар итәлә. Сөнки беҙҙең менталитетҡа, бал ҡорттары һымаҡ, күстә берҙәм булып йәшәү механизмы һалынған. Күп халыҡтарҙа үҙ-үҙен танып белеү дин менән бергә бара, ҡайһы бер халыҡтар дәүләтселек юлы менән берләшә, беҙҙең халыҡтың үҙ-үҙен таныуы Уралына, туған моңона, ҡурайына, бейеүенә һәм мәҙәниәтенә бәйле. Беҙҙә ватансылыҡ тойғоһо көслө. Баҡтиһәң, Мәскәү ҡалаһының 4 кенә процент үҫмерҙәре әрмелә хеҙмәт итә. Уларҙың ата-әсәләре "Рәсәй, ватан" тип яу һала-һалыуға, әммә уларҙың балалары шул ватанды һаҡларға теләмәй. Ә беҙҙең башҡорт егеттәре өсөн әрмегә бармау һаман да ғәрлек һанала. Шулай булғас, дәүләтселек, ватансылыҡ тойғоһо кемдә көслөрәк һуң?

***Мәүлит ЯМАЛЕТДИН, шағир һәм прозаик:*** Өмөтлө киләсәккә бер генә ышаныс бар. Алдынғы ҡарашлы ғалимдарыбыҙ, зыялыларыбыҙ халыҡҡа юл күрһәтергә тейеш. Минеңсә, әҙәбиәт, сәнғәт, ғөмүмән, мәҙәниәт һәр кемдә ниндәйҙер ышаныс тыуҙырырға, өмөтһөҙлөккә юл ҡуймаҫҡа тейеш. Ижад ителгән әҫәр кешенең күңелен күтәрһен. Яҙыусы ла, граждан булараҡ та үҙ бурысымды шунда күрәм. Сөнки халыҡ борон-борондан, беҙҙең сәсәнебеҙ бына шулай тине, тип, сәсән һүҙенә ҡарап торған. Һәм, иң мөһиме, иманға ҡайтырға кәрәк. Ә иман - бик ҙур төшөнсә. Кескәй генә дүрт хәрефле һүҙгә әхлаҡ та, әҙәп тә, телеңә тоғролоҡ та, илеңә һөйөү ҙә, үҙ-ара мөнәсәбәт тә һыя. Иманлы кеше түрә булһа ла иманын юғалтмаясаҡ, халыҡты ҡайғыртасаҡ, уның өсөн көсөн йәлләмәйәсәк. Ә әлеге мәлдә иҫ киткес тиҙлек менән байыған кешеләрҙең күңелендә иман юҡ. Хаҡ юлды мәҙәниәттең, имандың күтәрелеп сығыуында ғына күрәм мин.

### Ауылдар - милләт бишеге

***Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, яҙыусы:*** Атай-олатайҙарыбыҙ дини мәнфәғәт менән милли мәнфәғәтте бергә уҡмаштыра һәм шуның нигеҙендә үҙҙәрен яҡлай алған. Күрәһең, беҙҙә хәҙер ана шундай берҙәмлек ҡаҡшаған һәм шуның өсөн дә ауылдарыбыҙҙың ҡапҡаһы милләттәштәребеҙҙең күңеле кеүек шарран асыҡ. Башҡорт ауылы, улай ғына ла түгел, Рәсәй ауылдары (Кавказ ауылдарын иҫәпкә алмағанда, әлбиттә) хәҙерге ваҡытта әйбере бушлай өләшелгән йә арзан ғына хаҡҡа һатылған "коммунизм магазины"н хәтерләтә. Ул магазинға инеп, арзан ғына хаҡҡа үҙеңә һәм тотош әҡрәбәңә йорт, ер, сабынлыҡ, көтөүлек, ғөмүмән, бы-

✓ ***Беҙгә Аллаһы Тәғәлә ошо ерҙе биргән һәм беҙ үҙ тыуған еребеҙҙә йәшәйбеҙ. Был ерҙе башҡортлоҡ асылыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу шарты менән биргән, шуға күрә үҙ асылыбыҙҙы һаҡлай алмауыбыҙ Хаҡ Тәғәлә алдында хыянатҡа тиңләнәсәк.***



# УЙЛАНАЙЫҠ,
## ҡарап ғорурланайыҡ!

уаттар буйы йәшәрлек йорт-ер һатып алырға була. Хәйер, ауылдарыбыҙ ғына түгел, ҡалаларыбыҙ, хатта илебеҙ шундай хәлдә бит. "Ереңһатһаң, ауылыңа һат: бер ситенә үҙең барып ултырырһың..." тигән хәҡиҡәтте алға һөрәйек. Фәҡәт бары тик һинең менән бер мөхиттә, бер йәмәғәтселек ҡоронда, бер үк төрлө йола-традициялар үтәп йәшәүсе ауылдашың, күршең генә һинең ошо ерлеккә бәйле проблемаларыңды аңлай һәм һиңә ярҙам итә ала. Был йәһәттән ситтә йәшәүсе туғаның, дуҫың, танышың, ғөмүмән, ситтәге кеше ул барыбер ҙә ят кеше. Шуның өсөн дә йортоңдо, ереңде фәҡәт һинең менән бер лөғәт-йола-традиция солғанышында йәшәгән ауылдашыңа, күршеңә һатыу башҡа ауылдаштарыңа зыян килтермәҫлек шарт булып һаналалыр ҙа инде.

йыҡ. Бөгөн был дәүләттәр һәр йәһәттән алға сыҡты. Шуға күрә беҙҙең барлыҡ уңышһыҙлыҡтарыбыҙҙың, бөтә бәләләребеҙҙең сәбәбе милли асылыбыҙҙан айырыла, йола-традицияларыбыҙҙы онота барыуыбыҙҙа. Сөнки һәр милләттең йәшәү рәүеше йола-традициялар рәүешендә уға бит Хоҙай һәм тәбиғәт тарафынан һалынған һәм мәңгелеккә нығытылған. Беҙ меңәр-меңәр йылдар буйынса шул йола-традициялар нигеҙендә йәшәп килеп, XX быуатта уларҙан айырылдыҡ та, йәшәүебеҙҙең мәғәнәһен, тормошобоҙҙоң ҡотон юғалта башланыҡ. Милләтте теленән, тамырынан, йолаһынан айырырға тырышыу тотош илдең тамырына балта сабыу менән бер. Әгәр ҙә дәүләт күп милләтле икән, ундағы һәр милләттең үҫешен тәьмин итмәйенсә тороп, дәүләттең берлеген тәьмин итеү мөмкин булмаясаҡ. Үҙенең милли тойғоһо ҡыйырһытылған кеше башҡа-

***Иршат АҪЫЛҒУЖИН, эшҡыуар:*** Элек башҡорттоң яугир, шағир образын алға һөрөү булһа, беҙ XXI быуатта уның яңы имиджын да тыуҙырырға бурыслы. Ысынлап та, XXI быуат башҡорто ниндәй булырға тейеш һуң? Ул - һөҙөмтәле менеджер, ҡулынан килмәгән эше булмаған шәхес. Элек башҡорт бер әсмүхә сәйгә ерен һатҡан, тигән ҡараш та ысынбарлыҡҡа тура килеп бөтмәй. Совет осорона тиклем башҡорт ерен ҡуртымға биреп йәшәгән. Беҙ ҡайһы саҡ тарихҡа һылтанып, тарихи ауырыу менән ауырып китәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта хәҙер Рәсәй Дәүләт Думаһы биргән законды файҙаланып, аҫабалыҡ хоҡуғыбыҙҙы киренән ҡайтарыу мөмкинлеге барлығын күрергә теләмәйбеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, Ер кодексы беҙгә киренән аҫаба булырға мөмкинлек бирә бит. Ер кодексы, икенсе төрлө әйткәндә, "Аҫаба башҡортлоғобоҙҙо кире ҡайтарыу" законы бит ул. Әлегә ереңун ғына гектар икән, әгәр ҙә һөҙөмтәле эшләһәң, башҡаларҙың пайын ҡуртымға алып, ереңде киңәйтә алаһың бит...

## Йолаларыбыҙ, ҡурайыбыҙ йәшәһен!

***Ноғман МУСИН, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:*** Хәҙерге ваҡытта, асылда, бер милләтле булған, боронғо йәшәү рәүештәрен, милли йолаларын һаҡлаған милләттәр һәм дәүләттәр үҫеш осоро кисерә. Миҫал өсөн Ҡытай менән Японияны ғына алаларға нисек тыныс, уларҙың ихтыяжын аңлап ҡарай алһын инде? Ошоларҙан сығып шундай һығымта яһарға ла була: беҙҙең илдең иң ҙур бәләһе - унда йәшәүсе халыҡтарҙың милли тамырҙарынан айырылыуында, илебеҙҙең һаман да мандып йәшәп китә алмауы ла ошо сәбәпкә бәйле.

***Роберт ЮЛДАШЕВ, ҡурайсы:*** Сит тарафтарҙа ҡурайҙы бик ыңғай ҡабул итәләр. Таң ҡалып, ҡурай тауышының һәр тулҡынын күңелдәренә һеңдереп тыңлайҙар. Беҙҙә ҡурай тауышын ишетеп өйрәнгәнгәме икән, уға иғтибар биреп еткермәйҙәр. Һуңғы бер конкурста музыканы бик тәрән аңлаған жюри баһаланы. Шуға күрә, ундай оҫталар алдында уйнауы бик еңел ине. Конкурста "Сыңрау торна" көйөн башҡарғайныҡ. Моңға һалынған драматик тойғоларҙы, афәт яңғырашын, яу-ут тауышын тотоп алғандар, ахыры, сығышыбыҙҙан һуң: "Һеҙ башҡарған көйҙә агрессив энергетика ишетелә, әммә шул энергетика аша беҙ Аллаһы Тәғәлә кешене бар иткән заманға, ир-аттың ысын мәғәнәһендә һунарсы, яугир булған дәүергә ҡайттыҡ. Музыкағыҙ менән боронғолоҡто тойорға мөмкинлек бирәһегеҙ", - тинеләр. Тимәк, ҡурай кешелә иң тәрән тойғоларҙы уятыу көсөнә эйә. Конкурста тап музыкаль тауыштың кешегә физик яҡтан тәьҫире баһалау критерийҙарының береһе булып торҙо. Шул йәһәттән иң күп балл йыйҙыҡ...

## Диндә милләт тә бар!

***Салауат ХӘМИҘУЛЛИН, тарихсы, тележурналист:*** Кемдәрҙер, диндә милләт юҡ, тип тылҡырға ярата. Ҡөрьәндә Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙе бер-береһен танып белһен өсөн төрлө халыҡ итеп яралтыуы хаҡында белдерелә. Тимәк, кешеләрҙең милли принцип буйынса бүленеше Ҡөрьән тарафынан тыйылмай, рөхсәт ителә. Беҙгә Аллаһы Тәғәлә ошо ерҙе биргән һәм беҙ үҙ тыуған еребеҙҙә йәшәйбеҙ. Әгәр ҙә беҙ башкорт булыуҙан туҡтаһаҡ, был ер ҙә Башҡортостан тип аталмаясаҡ. Тимәк, беҙгә Аллаһы Тәғәлә был ерҙе башҡортлоҡ асылыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу шарты менән биргән, шуға күрә үҙ асылыбыҙҙы һаҡлай алмауыбыҙ Хаҡ Тәғәлә алдында хыянатҡа тиңләнәсәк. Бына ошо хәҡиҡәтте аңлар өсөн булһа ла беҙгә ислам дине кәрәк. Ислам этник һыҙатты тыймай, уны юҡҡа сығармай. Мин әгәр ҙә батыр ҡартаталарым була тороп, үҙ милләтемдән баш тартам икән, мин бит иң беренсе нәүбәттә уларҙы һатам булып сыға. Улар башҡорт идеалдары өсөн көрәшкән. Ул идеалдар ябай ғына: бына был ер беҙҙеке һәм беҙ уны башҡа берәүгә лә бирмәйәсәкбеҙ. Әгәр ҙә ислам диненә килгән башҡорт үҙ милләтенән ситләшә икән, ул наҙан, үҙ тарихын белмәүсе, атай-олатайҙарынан баш тартыусы кеше. Быға мин башҡа төрлө аңлатма бирә алмайым...

***Урал ВИЛДАНОВ, философия фәндәре докторы, профессор:*** Кеше, шәхес проблемаһы, уның эске донъяһы өлкәһендә оҙаҡ йылдар шөғөлләнгәндән һуң шундай һығымтаға килдем: тышҡы мөхит кешегә бик аҙ йоғонто яһай. Нигеҙҙә барыһы ла эске донъянан тора. Иң мөһиме, үҙ аңыңды үҙгәртеү өҫтөндә эшләргә кәрәк. Кеше һәр эшен, ҡылығын аңлы рәүештә башҡарырға, үҙен һәр саҡ ситтән күҙәтергә өйрәнергә тейеш. Үҙеңә ситтән ҡарай белһәң, ярһыулыҡ, нәфрәт тойғолары шунда уҡ юҡҡа сыға. Аңды үҙгәртеү алымдары бер нисә мең йыл элек билдәле булған. Әйтәйек, буддизмда ул - медитация алымы. Исламда - тәриҡәт, зекер әйтеү, "лә илләһә иллаллаһ" тип ҡабатлау. Мосолман илдәре шәриғәт ҡануны менән йәшәй. Әммә шәриғәт - белемдең тәүге баҫҡысы ғына, дин тураһында өҫтән, һай ғына йөрөтөлгән фекер, икенсе төрлө әйткәндә, һуҡырҙарса табыныу, һуҡыр иман. Бына шуға көнсығыш илдәрҙә һуғыштар тынмай. Икенсе баҫҡысҡа, тәриҡәткә баҫҡан кеше, йәғни суфыйсылыҡ юлында булыусы бер ҡасан да ҡулына ҡорал алмай. Тәриҡәтте үҙләштерәһең икән, аңың үҙгәрә башлай, яҡтыра. Өсөнсө баҫҡыс - мәғрифәт. Бында инде аң киңәйеү һөҙөмтәһендә юғары кимәлдәге белем үҙләштерелә. Ниһайәт, дүртенсе баҫҡыс - хәҡиҡәт, йәғни хаҡ белемгә эйә булыу. Бөтә баҫҡыстарҙы үткән суфый Хоҙай менән бер бөтөн булыуға өлгәшә. Бөгөн дин аяҡҡа баҫа, тибеҙ. Әммә асылда шәриғәт ҡанундарына бикләнеү генә бара. Төрлө дини йолалар ғына атҡарыу әле Аллаға яҡынайыуҙы аңлатмай. Аллаһы Тәғәләгә һуҡырҙарса табынырға түгел, ә Алланы күңелеңә индерергә кәрәк.

## Менталитетыбыҙ шундай, әммә…

***Зилә РӘХМӘТУЛЛИНА, философия фәндәре кандидаты:*** Милләттең яҙмышы уның менталитетына бәйле. Аҫыл сифаттарыбыҙ күп беҙҙең. Һуғыш ҡупҡанда, экстремаль хәлдәр тыуғанда батырлыҡ ҡалҡып сыға, ҡурҡыу тойғоһо юғала. Шул уҡ ваҡытта беҙҙә тыйнаҡлыҡ сифаты ла бик көслө. Боронғо халыҡ булараҡ, беҙ абсолют категорияларҙан сығып, йыһан киңлегендә фекер йөрөтөп эш итәбеҙ. Шуға күрә тормош ығы-зығыһы, аҡса эшләү беҙгә мәғәнәһеҙ шөғөл кеүек тойола. Бөгөнгө типик башҡортҡа интроверт булыу хас, йәғни күбебеҙ үҙ күңел донъяһында йомолоп йәшәй. Беҙҙә һаман да коллективлыҡ сифаты көслө. Йәғни, бөтәһе лә бер тигеҙ йәшәргә тейеш, тигән фекерҙәбеҙ. Бына ни өсөн уңышҡа өлгәшкән милләттәшебеҙҙе яратып еткермәйбеҙ, үҙебеҙгә тиң ҡанҡәрҙәшкә генә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙербеҙ, һине уҙып китә алырлыҡ булһа, ярҙам итеүҙән баш тартабыҙ. Әлбиттә, менталитетты үҙгәртеүе бик ҡыйын, әммә беҙ мотивтарыбыҙҙы үҙгәртә алабыҙ. Шул ваҡытта эш-ҡылыҡтарыбыҙ ҙа үҙенән-үҙе үҙгәрәсәк. Әгәр ҙә, мәҫәлән, еребеҙгә хужа булып ҡараһаҡ, үҙебеҙҙе хужаларса тотасаҡбыҙ ҙа. Халҡыбыҙға ярҙам итәбеҙ тиһәк, телевидение, башҡа матбуғат саралары аша алдынғы, заманса башҡорт образын тыуҙырып, шул образды пропагандаларға кәрәк.

***Эльбрус НИҒМӘТУЛЛИН, Рәсәйҙең көслө атлеттары федерацияһының вице-президенты:*** Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында, башҡортса таҙа һөйләшкән, ҡурайҙа уйнай белгән кеше генә башҡорт тип иҫәпләнә, тигәйнеләр. Шунда ирекһеҙҙән, бәй, беҙ бит башҡорт түгел, тип уйлап ҡуйҙым, сөнки унда тәҡдим ителгән башҡортлоҡто белдереүсе ете пункттың өсәү-дүртәүһе генә беҙгә тура килә, етмәһә, өлкәлә тел өйрәнеү менән проблемалар бар ине. Ул күҙлектән ҡараһаң, Силәбелә башҡорттар бөтөнләй юҡ кеүек. Һуңғы ҡоролтайҙа Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов сәхнәнән, кем үҙен башҡорт тип иҫәпләй - шул башҡорт, тигәс, күңелгә рәхәт булып китте. Тимәк, егерме йыл эсендә беҙ шуны аңлау хәленә еткәнбеҙ, күпмелер ваҡыт үтеү менән хәл тағы ла яҡшырасаҡ, тип ышанам. Ғөмүмән, милләтте дөрөҫ булған һәм дөрөҫ булмаған милләткә бүлгеләү бер ҡасан да яҡшыға алып килмәй. Әгәр кеше башҡорт булып та уны башҡалар башҡорт итеп танымай икән, ул тәбиғи рәүештә кемгәлер ҡушылырға мәжбүр була. Беҙ һәр ваҡыт терәлер өсөн көслө иң эҙләйбеҙ. Кешенең тәбиғәте шулай - ул көслө кеше менән бергә булырға ынтыла. Шуға ла тағы берҙе ҡабатларға мәжбүр булам - милләттәштәребеҙ араһында бар йәһәттән дә көслө, улар менән маҡтанырлыҡ, ғорурланырлыҡ шәхестәр булырға тейеш. Ул сағында башҡорт булмағандар ҙа, мин башҡорт, тип әйтәсәк.

***Клара ХӘМИҘУЛЛИНА, Дәүләкән районы Мәкәш ауылы ағинәйе:*** Милләт - Хоҙай ниғмәте. Милләтте Ул кешелеккә бүләк иткән. Башҡорт кешеһенә башҡорт мөхитендә йәшәүе рәхәт, татарға - татар, урыҫҡа урыҫ мөхитендә рәхәт. Бындай бәйләнеш ҡайҙа ята һуң? Аңдамы? Ҡандамы? Ҡәлебтәме? Күңелдәме? Рухтамы? Хоҙай Тәғәлә булдырған был бәйләнеште. Мин һәр ваҡыт үҙебеҙҙең телдә аралашҡан милләттәштәремә ынтылам. Улар менән аралашыуы миңә шулай уҡ рәхәтлек бирә. Милләттәшемә диндәшемә тартылғандай тартылғас, милләтте лә Хоҙай барлыҡҡа килтергән. Беҙҙең милләт - Рәсәйҙең ҡәлебендә ултырған һайланмыш милләт ул. Быны беҙ, башҡорт рухлы булғандар, бик яҡшы аңлайбыҙ, шул уҡ ваҡытта ни өсөн шулай икәнлеген аңлата ғына алмайбыҙ. Юҡҡа ғына Арҡайым беҙҙә урынлашмаған, "Урал батыр" эпосы ла юҡҡа ғына беҙҙең ерлектә тыумаған. Мин был донъянан киткәндә лә "Урал батыр" эпосы беҙҙең милләт тураһында яҙылған" тигән инаныу менән китәсәкмен. "Ҡөрьән" бынан мең йыл элек "Урал батыр" эпосынан күпкә һуң яҙылған. Тимәк, кешелек дәүерендә булған ваҡиғалар төрлө сүрәттәрҙә ҡабатланып тора. "Урал батыр" эпосы халҡыбыҙҙың "Ҡөрьән"е кеүек. Беҙ әле шундай бөйөк ҡомартҡыбыҙҙың ниндәй оло хазинабыҙ икәнен аңлап ҡына бөтмәйбеҙ. Уға әкиәт тип кенә ҡарайбыҙ. Юҡҡа ғына юрматылар шәжәрәһендә тәүге кешенең башҡорт булыуы хаҡында әйтелмәйҙер ул: "Әҙәм ғәләйәссәләм мотлаҡ башҡорт булғандыр. Шул тиклем изге кеше ни өсөн башҡорт булмаһын ул?" - тип әйтелә. Минеңсә, башҡортлоҡ тап шунан килә. Башҡортлоҡ милләт кенә түгел, тигәнде аңлата булыр был һүҙҙәр.

✓ *"Башҡорт телендә һөйләшеүҙе "модаға" индерергә ул һеҙгә әйбер түгел бит! Кейем модала булыуы мөмкин, уны аҙаҡ, модаһы үтте, тип ташлап та ҡуйып була. Ә туған телде нисек ташлап ҡуйып булһын?"*



*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

**Айыу алыр егетте атынан танырҙар, бүре алыр егетте бүркенән танырҙар, тигән башҡорт халыҡ мәҡәлен ишеткәнегеҙ барҙыр, моғайын. Ошо көндәрҙә IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына арналған I Республика балалар ҡоролтайында ҡатнашыусы мәктәп уҡыусыларын тыңлап ҡайтҡас, был мәҡәлдә телгә алынған батыр егет һәм ҡыҙҙарҙы үҙ күҙем менән күрҙем, тип һис шикләнмәй белдерә алам. Рухлы, аңлы һәм, иң мөһиме, илдәге бер үҙгәрешкә лә битараф булмаған балалар ҡор йыйып, һәр милләттәште борсоған актуаль һорауҙар тураһында фекер алышты. Ҡаралған мәсьәләләр буйынса ҡарарҙар ҡабул итеп, резолюцияға теркәргә һәм ололар йыйыласаҡ IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаттарына мөрәжәғәт яҙырға ла онотманы улар.**

# БУЛЫР ИЛДЕҢ БАЛАҺЫ...

## ҡорға йыйылып, фекер белдерер



*Эдуард Дилмөхәмәтов фотоһы.*

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары һәм БР Мәғариф министрлығы менән берлектә үткәрелгән "Ҡоролтайға әйтер һүҙем бар" республика иншалар конкурсында ҡатнашыусы 9-10 синыф уҡыусылары I Республика балалар ҡоролтайына делегат булып килде. Мандат комиссияһы биргән мәғлүмәттәргә ярашлы, ултырышта бөтәһе 31 мәктәптән 114 делегат, Өфө ҡалаһы милли гимназия-лицейҙарынан 22 уҡыусы, республика дәүләт уҡыу йорттарынан 34, ауыл мәктәптәренән 58 уҡыусы ҡатнашты. Ә Балалар ҡоролтайының пленар өлөшөндә ун делегат төрлө темалар буйынса сығыш яһаны. Улар туған тел, тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау, ауылдар тормошон йәнләндереү, айыҡ һәм сәләмәт булыу, республиканың экологик проблемаларын хәл итеү, милли сәнғәткә һәм матбуғатҡа иғтибар йүнәлтеү, тәбиғәт ҡомартҡыларын һаҡлау, уҡыусы йәштәрҙең граждандлыҡ әүҙемлеген үҫтереү тураһында телмәр тотто, ә асыҡ микрофон эргәһенә теләгән бер бала сығып, уларҙың фекерҙәрен дауам итте.

Балалар ҡоролтайында яңғыраған төп сығыштарҙың береһе башҡорт телен һаҡлау һәм яҡлауға арналды. Республика башҡорт лицей-интернатының 10-сы синыф уҡыусыһы Азат Хоҙайғолов ололарға, киләсәктә илһөйәр балалар тәрбиәләргә теләһәгеҙ, беҙҙе ошо проблемаларҙы хәл итергә өйрәтеүҙән башлағыҙ, тип кәңәш бирҙе. Сөнки башҡорт теленең бөгөнгө хәле тәү сиратта битарафлыҡ һәм ялҡаулыҡтан, ә һуңынан телдең көндәлек ҡулланылышта бик кәрәкле булмауынан тора, тигән фекерҙә егет. Ул шулай уҡ туған телендә һөйләшкән кеше генә үҙен камил шәхес итеп тоя, бер ҡасан да маҡсатһыҙ йәшәмәй, уңышҡа өлгәшә һәм шуның өсөн илең, халҡың, телең менән бер бөтөнһөң, тигән идеяны бала аңына бәләкәйҙән һеңдереп үҫтереү мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Башҡа милләттәр араһында үҙеңде кәм тоймаҫ, үҙ телеңдә аралашыуҙан тартынмаҫ өсөн башҡорт теле модала булырға тейеш, тип тә билдәләне Азат. Асыҡ микрофон алдына теҙелеп, фекер алышыуҙар ваҡытында берәүҙәр уның менән килешеп, башҡорт телен киң ҡулланылышҡа индереү һәм популярлаштырыу ниәтендә һәр урында башҡорт теле яңғырап торорға, яҙыуҙар эленергә тейеш, тип һанаһа, "модаға индереү" һүҙенә ҡаршы сығыусылар ҙа булды. Мәсетле районы Оло Ыҡтамаҡ башҡорт гимназияһының 11 синыф уҡыусыһы Илмурат Ғәлиәкбәров: "Башҡорт телендә һөйләшеүҙе "модаға" индерергә ул һеҙгә әйбер түгел бит! Кейем модала булыуы мөмкин, уны аҙаҡ, модаһы үтте, тип ташлап та ҡуйып була. Ә туған телде нисек ташлап ҡуйып булһын?" - тигәс, залда ултырыусы балалар ғына түгел, мәртәбәле ҡунаҡтар һәм уҡытыусылар ҙа дәррәү алҡышлап ебәрҙе. Ысынлап та, туған телебеҙҙе кәрәге бөткән бер әйбер кеүек "ташлап ҡуйырға" ни хаҡыбыҙ бар? Әйткәндәй, рухлы делегаттарыбыҙ йыйын һуңында Башҡортостан Республикаһында эшләүсе бөтә чиновниктар, юғары власть вәкилдәре лә мотлаҡ башҡорт телен белергә тейеш, тигән тәкдим өсөн тауыш бирҙе.

Юлиә Мансурова Бөрйәнгә Урал батыр эҙҙәре буйлап сәйәхәткә туристар йәлеп итеү хыялы менән янып йәшәһә, Ейәнсура районының Иҫәнғол ауылы башҡорт гимназия-интернаты уҡыусыһы Илгиз Ҡыуатов, үҙе йәшәгән төбәктәге ауыл хужалығы өлкәһен ентекле анализлап, башҡорт ауылдарында социаль-иҡтисади хәлде яҡшыртыу, йәштәрҙе эшкә йәлеп итеү ниәтендә киләсәктә һөт заводы асасағын белдерҙе. Һүҙ республиканың ауыл хужалығы тураһында сыҡҡас, балалар айырыуса йәнләнеп китте. Башҡортостандың төрлө төбәктәренән йыйылған уҡыусыларҙың һәр береһенә башҡорт ауылдары яҙмышы, ундағы эшһеҙлектән тыуған эскелек проблемалары, йәштәрҙең ситкә күсеп китеүе, мәктәптәр ябылыуы, атайҙарҙың ғаиләһенә аҡса алып ҡайтыр өсөн Себергә эшкә китергә мәжбүр булыуы яҡындан таныш. Хатта оло быуын кешеләре күтәреп сығырға ҡыймаған ҡайһы бер мәсьәләләрҙең сиселеш юлдарын эҙләне балалар. Һәр һөйләшеүҙең дә нәтижәһе була, был фекер алышыуға мәктәп уҡыусылары Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө башҡорт лицей-интернаты уҡыусыһы Салауат Шәйәхмәтовтың сығышынан һуң һығымта яһаны: "Ололар беҙгә, бәләкәй балалаларға, спиртлы эсемлектәр эсергә ярамауын, уның зыянлы булыуын аңлатырға бурыслы. Әйҙәгеҙ, һәр беребеҙ ошо өлкәлә эштәр атҡарайыҡ", - тип өндәште ул залда йыйылған делегаттарға.

Балалар милли рух тойғоһо тәрбиәләү өсөн башҡортса йәнһүрәттәр эшләү, бөйөк шәхестәребеҙ тураһында фильмдар төшөрөү - заман талабы, ә милләтебеҙҙең рухи ҡалҡаны - Торатау тауының һәм Ишембай районының эзбизташ ятҡылыҡтары табылған башҡа төбәктәрендәге хозур тәбиғәтен киләсәк быуын өсөн һаҡлап ҡалыу - күңел талабы, тип тә билдәләне. "Торатау һаҡланып ҡалыуына ысын күңелдән шатмын да ул, әммә хәҙер минең тыуған ауылым Ғүмәр эргәһендәге таууҙы емерәсәктәр бит. Минең яҡташтарымды, тиҫтерҙәремде был да хафаға һалды әле..." - тип, бер уҡыусы микрофон эргәһенә атылып килеп сыҡты.

Шулай итеп, I Республика балалар ҡоролтайының һөҙөмтәле эш барышында резолюция ҡабул ителеп, пленар ултырыш тамамланһа ла, уҡыусылар тамаша залынан таралырға ашыҡманы. Республика Башҡорт лицей-интернатының 9-сы синыф уҡыусыһы Иҙел Ишбаев тиҫтерҙәренә: "Әле бында бөтәгеҙ ҙә проблемалар күтәреү менән сикләндегеҙ. Бер шәп план әйтәм: яҡшы итеп уҡып, юғары белем алығыҙ һәм тыуған ауылдарығыҙға ҡайтып, уны һаҡлауға һәм йәшәтеүгә үҙ өлөшөгөҙҙө индерегеҙ. Эш күрһәтегеҙ", - тигән оран ташланы. Уның һүҙҙәрен көслө алҡыштар менән йөпләгән балаларҙың тағы бер һыҙаты күңелдәргә май булып яғылды. Уҡыусылар бер-береһенә ҡарата "рухташтар", "милләттәштәр", "ҡан-ҡәрҙәштәр", "башҡорттарым", "хөрмәтле делегаттар" тип өндәшеп, ихтирамлы мөнәсәбәт күрһәтте. Был күренеш башҡорт халҡының "Булыр илдең балаһы бер-береһенә, батыр, тиер, бөлөр илдең балаһы бер-береһенә, бахыр, тиер" мәҡәленә тура ишара кеүек ҡабул ителде һәм киләсәккә ышанысты арттырҙы.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ*

# ШУНДА ЯТА БАТЫРҘАР ҺӨЙӘГЕ

**Мин - Батырша, Салауат батыр, Ә. Вәлиди, Р. Ғариповты бишегендә бәүелткән Ер-әсә тоҡомонан. Тәнемдә һуңғы ҡаным ҡалғансы Башҡортостан өсөн, халҡым, телем, ерем өсөн көрәшәсәкмен. Ошо изге ниәтемде тормошҡа ашырыр өсөн хәрби уҡыу йортона уҡырға килдем. Үҙ халҡының улы Ватанын яҡлай ҙа, һаҡлай ҙа белергә тейеш бит.**

Әлбиттә, юғары цивилизациялы йәмғиәттә бөтөн мәсьәләләр ҙә өҫтәл артында, күҙмә-күҙ ҡарашып һөйләшеп хәл ителергә тейеш. Ҡыҙғанысҡа күрә, бөгөнгө сәйәси ваҡиғалар күрһәтеүенсә, был ҡанунды һанға һуҡмаусылар ҙа бар. Тимәк, беҙ, киләсәк быуын, рухи яҡтан да, физик яҡтан да камил булып, барыһына ла әҙер торорға тейешбеҙ. Шулай уҡ ил һаҡсыһы ҡорал менән генә түгел, аҡыллы һүҙе менән дә көрәшә белергә тейеш. Һүҙ ҡоралға ҡарағанда лә көслөрәк була ала. Әлеге ваҡытта мин тиҫтерҙәремде тыуған илгә ихтирамлы, иғтибарлы булырға саҡырам. Матбуғатта, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа Торатау тураһында шиғырҙарым, хикәйәләрем, риүәйәттәрем, ғилми-эҙләнеү эштәрем менән сығыш яһайым. Шуға күрә әле лә мин Ҡоролтайға, ил ағаларына мөрәжәғәт итергә булдым.

Башҡорт халҡының рухи ҡалҡаны булған Торатау бөгөнгө көндә яҡлауға мохтаж. Ғалимдар билдәләүенсә, Торатауға 250 миллион йәш. Ул - тере тарих шаһиты. Юрматы ырыуының рухи ҡалҡаны. Был тауға арналған ышаныуҙар, ырымдар, йырҙар, шиғырҙар әлеге көндә лә әһәмиәтен юғалтмай, киреһенсә, рухи сығанаҡ булып тора.

Әхмәтзәки Вәлиди бабабыҙ билдәләүенсә, әүәл Торатау тирәһендә башҡорт ырыуҙары йыйын үткәрер булған. Стратегик яҡтан да бик уңайлы булған был урын, сөнки, беренсенән, тау Башҡортостандың үҙәгендә урынлашҡан, икенсенән, тау тирәләй ярайһы ғына күп кешеләрҙе һыйҙыра алған ялан йәйрәп ята.

Бынан 260 йыл элек, башҡорттарҙың 1737-1738 йылдарҙағы ихтилалы заманында, 1737 йылдың июлендә секундант-майор Останков отряды менән Һаҡмар нығытмаһынан Табынға юл тота. Үҙ юлында осраған һәр башҡорт ауылын ҡырып, үртәп килгән отряд 5 июль көнө Торатауҙың көньяғында ҡоралды башҡорт ғәскәрҙәре менән осраша. Был һуғышта 202 башҡорт ир-егете һәләк була, күбеһе әсирлеккә төшә. Секундант-майор үҙ ирке өсөн көрәшкән башҡорт яугирҙарына ныҡ асыулана. Ошо бәрелеш булған ерҙең тирә-яғындағы ауылдарҙы үртәргә, унда йәшәгән башҡорттарҙы язаларға тотона. Ағиҙел аръяғындағы һәм Ашҡаҙар буйындағы 12 ауыл бөтөнләй юҡ ителә, 30 кешене ҡаҙаҡҡа ултырталар...

Халҡыбыҙҙың ошондай һәм тағы әллә күпме аянысты, хатта ҡурҡыныс тарихи фактарына шаһит беҙҙең Тората-

БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ

# АУЫЛДАРЫБЫҘҘЫ ҮҘЕБЕҘ ҠУРСЫЙЫҠ

**Мин һеҙҙе Шәйхзада Бабичтың "Истиҡбал" шиғыры менән сәләмләйем:**
**Мәрхәбә, ҡоролтайға утлы сәләм!**
**Мәрхәбә, Ил ҡәҙәме - ҡотло ҡәҙәм!**
**Ҡойоп китһен мәңгелеккә нурлы кәбән,**
**Башына ултыртып ҡуй ҡотло әләм!**
**Ҡоролтай - башҡорт халҡының борон-борондан Ил, Ер, Халыҡ яҙмышын уйлап, төрлө яҡлап самалап, һәр тарафты тыңлап, аҡһаҡалдар һәм зыялылар аҡылына таянып фекерҙәр туплай, ҡарарҙар ҡабул ителә торған изге бер йыйын икәнен һәммәбеҙ беләбеҙ. Төп маҡсатыбыҙ - башҡорт халҡының социаль-иҡтисади хәлен, мәҙәни-мәғрифәтселек кимәлен анализлау, милләттең артабанғы үҫеш юлдарын аныҡлау һәм ошолар тураһында етди фекер алышырбыҙ, тип ышаныла. Хис-тойғоға ғына ҡоролған ярһыу һүҙҙәр һөйләргә тейеш түгелбеҙ, етди анализ, аҡыллы фекер, эшлекле тәҡдимдәр кәрәк.**

Мине иң борсоған проблема: ауылдарыбыҙ яҙмышы. Колхоз-совхоздарҙың бөтөүе, мәктәп, балалар баҡсаларының ябылыуы ауылдың бөлөүенә килтерҙе. Ә бит башҡорт милләтенең күп өлөшө ауылда йәшәй, тимәк, бындай үҙгәрештәр шауҡымы башҡорт милләте елкәһенә нығыраҡ төшәсәк.

Беҙҙең Ейәнсура районы Бикбау ауыл Советын миҫал итеп алғанда, уға биш ауыл инә: Буранғол, Үрге Бикбирҙе, Бикбау, Трушин, Ҡарадиғән. Уларҙа барлығы 1107 кеше йәшәй (569-ы - ир-егет, 538-е-ҡатын-ҡыҙ), 166-һы - пенсионер, 155 уҡыусы, 679 кеше эшкә яраҡлы (343-ө - ир-егет, 236-һы - ҡатын-ҡыҙ). 354 йорт бар, уларҙың 32-һе буш тора. Күп балалы 30 ғаилә, 5 ғаиләлә 5-әр бала тәрбиәләнә. 71 кеше бюджет өлкәһендә, 195 кеше Башҡортостандан ситтә эшләй. 250 кеше эшһеҙ, 3 ғаилә эскелек арҡаһында балаларын тәрбиәләмәй иҫәптә тора. Бер йылда 11 кеше тыуған, 5 кеше үлгән.

Биш ауылда 4 мәктәп бар ине: бер урта дөйөм белем биреү, 2 төп дөйөм белем биреү, 1 башланғыс. Хәҙерге көндә урта мәктәп юҡ. Бер генә төп дөйөм белем биреү, 2 башланғыс мәктәп ҡалды. Ауылдағы балалар ҡайҙа уҡырға тейеш? Әлбиттә, йәш ғаилә мәктәп булған ергә күсеп китә. Һуңғы биш йылда йыл һайын уртаса 10 йәш ғаилә ҡалаға күсенгән. Шулай булғас, нисә йылдан ауылдың бөтөүен иҫәпләүе ҡыйын түгел.

Ауыл Советы территорияһының иң матур ерендә ял итеү урыны төҙөлдө. Уға Стәрлетамаҡ ҡалаһы кешеһе хужа. Иң матур еребеҙҙе түләмәйенсә барып күреүҙән мәхрүмбеҙ.

Эйе, ауырлыҡтар етерлек, яуаплылыҡ ғәйәт ҙур, алда торған эштәребеҙ тау хәтле. Донъялағы барлыҡ һәйбәт эштәр иң элек изге ниәттән, яҡшы һүҙҙән башлана. Ләкин һүҙ эшкә әйләнмәһә, уның ҡиммәте бер тингә лә тормай. Халыҡта, өмөтһөҙ - шайтан, тигән һүҙ бар. Халыҡтың өмөтһөҙ шайтанға әйләнеүе ҡурҡыта. Һәр кемде ышаныс йәшәтә. Ышаныс һүнмәһен! Шуның өсөн, йәш быуын вәкиле булараҡ, аныҡ тәҡдимдәрем бар.

Иң беренсе, ауылда эш урыны булдырыу өсөн киләсәктә бәләкәй һөт заводы асырға уйлайым. Уның өсөн мин түбәндәге статистик мәғлүмәттәр менән дә ҡыҙыҡһындым. Биш ауылда: 609 эре мал, 46 ат, 2060 кәзә-һарыҡ, 63 трактор, 130 енел машина, 650 күс ҡорт бар. Тимәк, ауылдарҙа йәшәгән һәр кем миңә һөт тапшыра ала. Халыҡтың ҡулында аҡса барлыҡҡа килә. Эш, аҡса булғас, ауылды ялмап алған эскелек кәмей. Ауылдан кешенең күсеп китеүе туҡталасаҡ. Киреһенсә, ҡалала йәшәп, эшләгән һәр тинен фатирға түләгәнсе, ҡаланан ауылға күсеп ҡайтасаҡтар. Ауылда балалар һаны артасаҡ. Артабан бикле торған мәктәп, балалар баҡсаһы ишеге асыласаҡ. Һәр төбәктә кемдер шулай эш башлаһа, ауылдарҙы ҡотҡарырыбыҙ. Ауыл күҙгә күренеп йәнләнәсәк, йәмләнәсәк һәм йәшәрәсәк. Был эш йәйгә һалынһа, башҡа тармаҡтар асырға була. Эшләргә, тырышырға ғына кәрәк. Ауыл йәшәйәсәк, хөрмәтле милләттәштәрем! Ауыл уттары һүнмәйәсәк!

Әгәр һәр кем үҙ эшен намыҫ менән башҡарһа, берҙәм булып туплаһып, ҙур маҡсаттарыбыҙға тоғро хеҙмәт итһә, шул саҡта ғына беҙ милләт булып йәшәйәсәкбеҙ, ожмах кеүек Башҡортостаныбыҙҙы һаҡлай аласаҡбыҙ. Элек-электән атай-олтайҙарыбыҙ, ҡанын түгеп, Ерен, Илен, Халҡын, Телен һаҡлап ҡалған. Әйҙәгеҙ, ата-олатайҙарыбыҙ аманатына хыянат итмәйек! Көрәшәйек! Еңәйек! Ҡанатлы Аҡбуҙатыбыҙҙа абынмайынса ғына алға сабып барайыҡ!

**Илгиз ҠЫУАТОВ,**
**Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылындағы башҡорт гимназия-интернаты уҡыусыһы.**

уыбыҙ. Ошо ваҡиғаларҙы халыҡ менән бергә кисергән рухи ҡалҡаныбыҙҙы, атай-олатайҙар төйәген, фән уникумы булған Торатауыбыҙҙы - илһам шишмәһен киләсәк быуынға еткереү беҙҙең граждандыҡ һәм илһөйәрлек бурысыбыҙ!

**Минең тәҡдимдәрем:**

Шихандарҙы дәүләт һәм донъя ҡурсыуына алырға; ғалимдарҙы йәлеп итеп, Торатауҙың үҫемлектәре тураһында ғына түгел, ә тарихы менән бәйле мәғлүмәттәрҙе лә табырға, анализларға. Мәҫәлән, ни өсөн башҡорттар уны "изге тау" тип йөрөткән, был ниндәй фактҡа нигеҙләнә? Уҡыусылар, йәш быуын вәкилдәре араһында Торатау, уның тарихы, уникаллеге тураһында мәғлүмәт таратырға; төрлө бәйгеләр, конкурстар, фестивалдәр үткәреп, яҙыусыларҙы, тарихсыларҙы, сәнғәт оҫталарын Торатау тураһында яңы сәнғәт һәм әҙәбиәт әҫәрҙәрен яҙыу һәм пропагандалау эшенә йәлеп итергә; туристик маршрут төҙөргә; нәфис, документаль фильмдар төшөрөргә һ.б. Был тәҡдимдәр исемлеген тағы ла тулыландырырға була.

Донъяла йәшәргә һәм башҡалар рәтендә ғүмер һөрөргә теләгән милләт үҙенең үткәндәрен белергә, үҙ тарихы менән дуҫ булырға һәм тыуған төйәген, тәбиғәт ҡомартҡыларын күҙ ҡараһылай һаҡларға тейеш.

**Рәзил БАЙРАМҒӘЛИН,**
**Ишембай Башҡорт кадет корпусының 9-сы класс уҡыусыһы.**



ҠОРОЛТАЙҒА ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# ЙӘШТӘРҘЕ ЙӘЛЕП ИТӘЙЕК...

**Бөгөнгө көндә райондарҙа ер мәсьәләһе бик киҫкен тора. Әлбиттә, район хакимиәттәрендә эшләгән кешеләр ергә ҡағылышлы һорауҙарҙы яҡшы белә. Беҙгә хәҙер мәктәп йәшендәге балаларға ла, йәштәргә лә ошо мәсьәлә буйынса мәғлүмәт биреп, үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы өйрәтһәк, улар ер мәсьәләһенең нескәлектәренә төшөнөр ине.**

Мәҫәлән, әлеге ваҡытта Территориаль йәмғәт үҙидаралығы ойошмаһын төҙөп, ерҙәрҙе үҙ ҡулыбыҙға алыу мөмкинлеге бар. Бының әллә ни ауырлығы юҡ, киләсәктә ҡоролтай, әлеге кеүек, эшсе төркөмдәр төҙөп, райондарға командировкаларға сығып, халыҡ менән эшләһә, шәп булыр ине.

Башҡорт халҡының ҡоролтай йыйындары боронборондан тел, йолаларҙы һаҡлау мәсьәләһе менән бергә динде лә ҡараған. Һуңғы ваҡытта донъяла барған ваҡиғаларҙың күбеһе дин менән бәйле. Дини ғилемде, йәғни дини уҡыу йорттарын контролгә алып, үҙебеҙҙең милләттәштәрҙе күберәк уҡытып, был өлкәлә лә белемле кадрҙар әҙерләргә кәрәк. Сөнки бөтә булған фетнә белемһеҙлектән килеп сыға. Бөгөн беҙҙең дини уҡыу йорттарында, мәҙрәсәләрҙә уҡыусылар һаны аҙ, уларҙың яртыһынан күбеһе ситтән килгән студенттар. Уҡып сыҡҡас та ундайҙар беҙҙә эшләй алмай, сөнки башҡорт халҡының менталитеты, йолалары, теле башҡа. Бына ошо сәбәптән дини уҡыу йорттарына үҙебеҙҙең йәштәрҙе йәлеп итеп, киләсәктә улар ярҙамында халыҡҡа тәрбиә, әҙәп һабаҡтары һәм дини белемде таратыу кәрәк.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һәр йүнәлештең эшенә йәштәрҙе ылыҡтырһын ине. Шул саҡта ғына халҡының мәнфәғәттәрен яҡларҙай лайыҡлы алмаш үҫтерәсәкбеҙ. Башҡорт халҡының һәр зыялыһының, ғалимының үҙенең юлын дауам итерлек шәкерте булһын. Быуындар күсәгилешлеген, үҙебеҙҙең гөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлап ҡалыуҙы тик ошо осраҡта ғына тормошҡа ашырыу мөмкин.

**Айтуған ҠУЛАНШИН,**
**БДПУ-ның ғәрәп теле һәм Ислам тәғлимәттәре уҡытыусыһы.**

# КӘМЕҮ СӘБӘПТӘРЕ НИҘӘ?

**Мәләүез районынан IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында делегат булып ҡатнашыуым, әлбиттә, миңә ҙур яуаплылыҡ өҫтәй. Үҙемдең әйтер һүҙем дә бар был ҡоролтайға.**

Бөгөн беҙҙе иң борсоуға һалған мәсьәлә - ул халыҡ һанының бермә-бер кәмей барыуы. Ҡоролтай эшмәкәрлеге, төп бурысы милләттәштәребеҙҙе һан һәм сифат яғынан һаҡлауға йүнәлтелгән булырға тейеш. Халыҡтың кәмей барыу сәбәптәрен өйрәнергә, асыҡларға һәм ошо йүнәлештә уратып-суратып, ситләтелгән телмәр менән түгел, ә асыҡтан-асыҡ эш алып барырға кәрәк. Беҙҙең халыҡтың һан яғынан кәмеү сәбәптәренең береһе - уның әүҙем рәүештә ассимиляцияға дусар ителеүе, тип иҫәпләйем. Шуныһы ныҡ хафаға һала: икенсе милләт йоғонтоһона бирелеү бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ, тып-тыныс һәм һәүетемсә бара бит!

Ҡоролтай алдында торған тағы бер мөһим бурыс - ул милләтте тәрбиәләү. Был бигерәк тә йәштәргә ҡағыла. Үҙ милләтебеҙ менән ғорурланыу, нисектер, һүнеп ҡалғандай. Ғорурлана белмәйбеҙ. Ә бит тәүге йыйыныбыҙҙа шундай бер рухи күтәрелеш булып алғайны.

Заманыбыҙ тынысһыҙ бөгөн. Әйләнә-тирәбеҙҙә төрлө сәйәси ваҡиғалар, үҙгәрештәр, һәр төрлө реформалар бара. Ошондай мәлдәрҙә теге йәки был ваҡиғаға ҡарата халыҡ фекере, уның ыжданы булып Ҡоролтай сығыш яһарға, уның һүҙе көр яңғырарға тейеш. Булғаҡ йыйында милләтебеҙ рухын тергеҙеү буйынса етди һөйләшеү башланыуына өмөт итәм. Отчет өсөн генә йыйылышып таралыу булмаһын ине сираттағы ҡоролтай...

**Ильмира ФӘЙЗУЛЛИНА,**
**Мәләүез ҡалаһының архив бүлеге начальнигы.**

✓ *Фарсы телендә "бача" бала, тоҡом тигәнде аңлатһа, "гурд" баһадир, тип тәржемә ителә. Әгәр ошо ике атаманы ҡушып әйтһәк, "башгурд" "баһадирҙар тоҡомо" тигән төшөнсәне аңлата булып сыға.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# НӘҪЕЛ БИЛДӘҺЕ...

## кемдеке көслөрәк?

■ Артыҡ ауырлыҡтан ҡотолоу, тән ауырлығын нормала тотоу өсөн спорт кәрәкмәй, ти Лондондың иҡтисад мәктәбе ғалимдары. Уларҙың әйтеүенсә, даими рәүештә көнөнә 30 минут йәйәү йөрөүсе бөтөн йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар һәм 50 йәште үткән ир-егеттәр әүҙем күнегеүҙәр яһау менән шөғөлләнеүселәргә ҡарағанда еңелерәк булған. Йәйәү йөрөгәндә ауыр эштә эшләүселәр ҡулланған көскә тиң энергия тотонола. Статистика буйынса, 2025 йылға өлкән йәштәге халыҡтың дүрттән өс өлөшө һимереү менән яфаланасаҡ. Табиптар физик әүҙемлеккә аҙнаһына 150 минут бүлергә кәңәш итә. Тимәк, ваҡытығыҙҙы ниндәй шөғөлгә бүлергә кәрәк икәнен хәҙер һеҙ ҙә беләһегеҙ.

■ Баҡсаһында йыл һайын сөгөлдөр үҫтереүселәр ҙә был культураның файҙаһын белеп бөтмәй икән. Ғалимдар раҫлауынса, сөгөлдөр организмдың ҡартайыу процесын туҡтата тиерлек. Унда антиоксиданттар күп. Сөгөлдәрҙәге кеүек файҙалы элементтар алмала ла бар икәне асыҡланған. Әммә сөгөлдөрҙә барыбер ҙә организмға кәрәкле матдәләр күберәк.

■ "Әсәһенең улы", "атаһының ҡыҙы" тигәнде йыш ишеткәнебеҙ бар. Шуға ла ғалимдар бала кемдең генын күберәк үҙләштереүен асыҡларға булған. Беҙ барыбыҙ ҙа гендарҙы атайҙан да, әсәйҙән дә тигеҙ күләмдә алабыҙ, әммә атайҙың ДНК-ларын күберәк ҡулланабыҙ, имеш. Әгәр ҙә "сәләмәт булмаған" ген әсәйҙән күсә икән, ул үҙен әүҙем рәүештә күрһәтмәүе лә ихтимал. Ә бына атай яғынан күскән төрлө сирҙәр өҫкә ҡалҡып сығыуы бар.

■ Зифа буйлы булырға хыялланған ҡатын-ҡыҙҙар йыш ҡына шәкәрҙән баш тартып, шәкәр алыштырыусы ҡуллана. Күптәр был шәкәр алыштырыусыны организм өсөн бөтөнләй зарарһыҙ, тип иҫәпләй. Әммә уның составында ацесульфам йөрәктең ағзаларҙы ҡан менән тәьмин итә алмауына, цикломат бөйөр сирҙәренең көсәйеүенә килтереүе ихтимал. Шәкәр алыштырыусылар үт ҡыуығы юлдары сирҙәре менән яфаланыусыларға ла зарарлы. Ҡайһы берәүҙәр шәкәр урынына фруктоза, сорбит йәки ксилит ҡуллана, әммә улар калорияһы буйынса шәкәрҙән айырылмай. Табиптар фекеренсә, иң зарарһыҙы булып фруктоза тора, сөнки уның составында организмға зыян килтереүсе компоненттар аҙыраҡ.

■ Гүзәл затҡа бәйле тағы бер ҡыҙыҡлы мәғлүмәт. Британияның St.Tropez косметик фирмаһы хеҙмәткәрҙәре ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлеге өсөн аҙнаның иң ауыр көнөн асыҡлаған. 2000 ҡатын-ҡыҙ араһында үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, дүшәмбе гүзәл заттарҙың күпселек өлөшө үҙен ҡартайған тип тоя. Быға ял көндәре сәбәпсе, ти белгестәр, сөнки был көндәрҙә һуң йоҡларға ятабыҙ, әүҙем ял итеп арыйбыҙ. Шулай ҙа иң ауыр көн булып шаршамбы тора, сөнки был ваҡытҡа эштәге стресс та ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлегенә насар тәьҫир итеп өлгөрә. Шаршамбы 15.00-16.00 сәғәткә ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөҙөндә һырҙар күберәк күренә. Аҙнаның иң яҡшы көнө булып йома иҫәпләнә. Эш аҙнаһы аҙағына ҡатын-ҡыҙҙарҙың 60 проценты үҙен сикһеҙ бәхетле тоя икән.

*ТӘҮБӘ*



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 14-се һабаҡ: "Башҡорттар эсмәй"

Бер заман гәзит-журналдарҙа "Халҡыбыҙ эсә, үләбеҙ, ҡырылабыҙ", - тигән һымағыраҡ әрнеү-һыҡтау һүҙҙәре күбәйеп китте лә, был зарланыу тулҡыны нисек башланып киткән булһа, шулай уҡ тынып ҡалды. Ни өсөн шулай: әллә мәсьәлә үҙенән-үҙе ыңғай яҡҡа хәл ителдеме, йәғни эсеүселәрҙең барыһы ла тәүбәгә килдеме, әллә эсеү беҙгә оҡшап уҡ ҡалдымы?

Юҡ! Ваҡытлы матбуғатта бындай яҙмаларҙың күренмәй башлауының сәбәптәре бөтөнләй икенселә. Дөрөҫөн әйткәндә, халҡыбыҙ бөтөнләй эсмәй. Шуға күрә "Халҡыбыҙ эсә", - тигән бындай һүҙбәйләнеш, үҙе үк ысынбарлыҡҡа тап килмәгәнлектән, оҙаҡ йәшәй алманы.

XX быуат аҙағында һәм XXI быуат башында кемдәрҙер иблис һыуы менән "шаярып" алған икән, бер нисә мең йыл йәшәгән тотош халыҡты эсә тип әйтеү - яҙыҡ һүҙ. Был йылдар дөйөм халыҡ ғүмеренең бер процентын да тәшкил итмәй, йәғни кеше ғүмеренең бер көнө лә түгел. Тормошоноң бер көнөндә кемдер берәү ниндәйҙер яҙыҡ эш башҡарһа, барлыҡ ғүмере улай түгел бит. Икенсенән, бер тапҡыр яһалған хата ғүмерлек мөһөр була алмай. Шуға күрә, "Халҡыбыҙ эсә" тип әйтеү Урал батыр рухын йөрөткән халыҡтан, ерһыуыбыҙ, милли асылыбыҙ өсөн йәнен ҡорбан итеүселәрҙең әруахынан көлөү булараҡ яңғырар ине. Үҙ кәйефенең, нәфсеһенең ҡоло булғандар иблис һыуына йоғонған икән, улар бит халыҡ түгел, бары айырым бер вәкилдәре генә.

Мәсьәләгә бөтөнләй икенсе яҡтан килеү зарурҙыр. Әйтәйек, шундай билдәләмә тәҡдим итәм: "XX быуат аҙағында һәм XXI быуат башында башҡорт милләтенең ҡайһы бер вәкилдәре дин юлынан тайпылып, иблис һыуы эсеп, юлдан яҙлығып алды. Әммә эскелек был халыҡтың йолаһына әүерелә алманы, сөнки ул башҡорттоң әхлағына ҡаршы килде, милләтте эске яҡтан тарҡатыу, тәбиғи асылын ҡыйратыу ҡурҡынысы менән янаны. Шуға күрә оло илдә тәрән кисереш мәле еткәс, милләттең аҫыл улдары һәм ҡыҙҙары эскелекте бөтөнләй инҡар итте..."

Күреһегеҙ, милләтебеҙ был сирҙән башкөллө арынғас, ошо билдәләмә үҙенән-үҙе тыуасаҡ. Шулай тип әйтергә минең тулы ышанысым бар һәм был ҡоро оптимизм түгел.

"Халҡыбыҙ эсә" тигән кеше үҙенең дә эсеүен аҡлар өсөн әйтә был һүҙҙәрҙе. Йәнәһе, үҙе лә ошо уҡ халыҡтың вәкиле һәм "халҡыбыҙ" тигәнгә үҙен дә индереп, үҙенең ихтыярһыҙ булыуын шулай йәшерергә маташа. Тотош милләтте эсә тип әйтеү өсөн халыҡ яралғандан алып үткән ваҡыттың яртыһынан күберәге ошо йоғонтола үтергә тейештер, минеңсә. Ҡайһы бер халыҡ вәкилдәренең генә юлдан яҙлығыуын, оло хатаһын тотош халыҡҡа япһарыу - дошман һүҙе ул.

Ысынында иһә, башҡорттар эсмәй. Дәлилдәрме? Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың "Хәтирәләр"енә генә туҡталайыҡ. Унда "Өсөнсө Башҡорт ҡоролтайы" (Ә.В. Туған "Хәтирәләр", Өфө - 1996, "Китап", 205-се бит) тигән бүлектә шундай юлдар бар: "... Үҫәргән кантонында, батша тарафынан дөйөм мобилизация мөнәсәбәте менән араҡы һатыу тыйылғанлыҡтан, Самакиндың араҡы фабрикаһында бик күп араҡы йыйылғайны. Уны конфискациялап, рустарға һатырға ҡарар иттек. Был яҡтағы бөтә рус ауылдарынан, хатта Ырымбур казак ауылдарынан рустар сәйнүк, шешә, биҙрә, ҙур шешә, мискә менән килделәр. Осоҙ хаҡҡа һатылды. Ярты миллион һум тирәһе рус аҡсаһы йыйылды... Ҡыҙыҡ ваҡиғалар ҙа булғыланы. Рустарҙың күбеһе шунда уҡ эсеп, фабрика янында аунап ятты. Стакан менән эсеп туя алмай, ҡайһылары мискә кранына ауыҙын ҡуйып эсә башланылар. Береһе бер нисә метр бейеклектәге мискәнең өҫтөнә менгән, иҫерек булғанлыҡтан, мискә эсенә ҡолап, тонсоғоп үлгән. Башҡорт һалдаттары, рустар белеп ҡалһа, был мискәләге араҡыны алмаҫ, тип, үлгән русты йәшерен рәүештә сығарып күмгәндәр һәм бер кемгә лә һөйләмәгәндәр. Башҡорттар араҡы эсмәй ине..."

Әхмәтзәки Вәлиди Туған һөйләгән ваҡиғалар 1917 йылда бара. Беҙҙең халыҡ вәкилдәре асылда Бөйөк Ватан һуғышында тәүге тапҡыр араҡыны тәмләп ҡарай. Был турала күп яҙҙылар инде, ҡабатлап-тәфсирләп тормайым. Шулай ҙа иң күп эскән йылдар тип 1970-1990-сы йылдарҙы атарға кәрәктер. Һәр төрлө социаль-ижтимағи сәбәптәр менән бер рәттән, күпләп эсеүҙә психологик сәбәптәр ҙә ҙур урын алып тора. Беҙҙең халыҡ өсөн ул ике ҙур тетрәнеүгә бәйлелер тип уйлайым. Беренсеһе - һуғышсан атеизмдың дингә ҡаршы һуғышына бәйле булһа, икенсеһе - халыҡтың тәбиғәттән айырылыуы, йәғни донъяға яралғандан алып булмышына ереккән йәйләү, сәхрә хозурлығын юғалтыу. Дингә яйлап ҡайтабыҙ ҙа ул, тик йәйләү менән мәңгелеккә хушлашҡанбыҙҙыр. Ул беҙҙең ҡан тибештәрендәге оло юҡһыныу, иркенлекте һағыныу тойғоһо ғына булып йәшәй. Шул уҡ ваҡытта йәйләүһеҙ ҙә йәшәргә өйрәндек.

Һуңғы ваҡытта бигерәк тә йәш быуындың спиртлы эсемлектәрҙе бөтөнләй инҡар итеүен мин тап шунда, йәйләүһеҙ йәшәргә өйрәнеүҙә күрәм. Был йоғонтоға бирелгән йәштәр аҙ ғына бар, улары ла ауыл ерендә, йәғни йәйләүгә яҡын урында. Күрәһең, ауыл кешеһенең күңелен сәхрә хозурлығы һәр саҡ елкендереп торғас, йәйләүҙе һағыныу тойғоһо ла оҙаҡ йәшәйҙер. Хәҙер 70-се йылдарҙа тыуған йәштәрҙең ҙур өлөшө бөтөнләй эсмәй һәм эсмәйәсәк тә, 80-селәр ҙә араҡыны инҡар итә. Бигерәк тә ошо ике быуын йәштәренең ҡала ерендә тыуғандары араҡыға әйләнеп тә ҡарамай. Улар, киреһенсә, үҙ эшен асырға ынтыла, мал таба, спорт менән шөғөлләнә, үҙебеҙҙең милләт йәштәре менән ғаилә ҡора һәм тағы ла шуныһы ғәжәп: балаларына инде онотолоп бөткән боронғо башҡорт исемдәре ҡуша. Хәҙер күбеһенең балалары Сыңғыҙ, Буранбай, Ирәндек, Ирәмәл, Ирхан, Хансура, Зөлхизә, Сәлимәкәй, Фатима һәм башҡа исемдәрҙе ғорур йөрөтә. Ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, хәҙер ҡала ерендәге йәштәрҙең 99 проценты тик үҙ милләте вәкиле менән ғаилә ҡора.

Шулай итеп, эскелек беҙҙең халыҡ араһында тамыр йәйә алманы, бары үткәнде, ундағы йәйләү иркенлеген һағыныу, юҡһыныу юшҡынын ваҡытлыса баҫыусы бер "әмәлһеҙ сара" ғына булып ҡалһын. Уның шулай икәнлеген элек эскән кеше булараҡ, мин беләм. Беҙҙекеләр саҡ ҡына эсеп алдымы, үҙҙәрен йәйләүҙә тип хис итә, ирәүәнләнеп ала ла китә. Күңел торошо ла, һөйләгән һүҙ ҙә киңлеккә тартыла башлай, һөҙөмтәлә самалар онотола, сиктәр ҡыйрала. Бына шуға ла инде беҙгә эсеү бөтөнләй ситен, тәбиғи асылыбыҙға ҡаршы килә. Эсеү беҙҙең ҡанды ҡайнатып, ваҡытлыса ғына булһа ла гендарыбыҙҙа ойоған йәйләүгә алып китә лә, шул уҡ сәхрә хозурлығындай тәбиғи асылыбыҙҙы ҡыйрата. Йәғни зыяны күберәк. Тегенеһе уның хыял булһа, икенсеһе, хәтәрерәге, ысынбарлыҡ.

Өлкән быуындың күбеһе дин юлына баҫып, эскелектән арына алды, Аллаға шөкөр, ләкин ҡайһылары һаман да ул һаҙлыҡтан ҡотола алмай йонсой. Йәштәребеҙ, әйткәнемсә, эскәндәрҙән ғибрәт, замандан фәһем алып эсеүҙән баш сөйә. Былар барыһы ла нимә тураһында һөйләй һуң: баҡтиһәң, халҡыбыҙ бөтөнләй эсмәй икән, ә был йылдар беҙгә оло һынау ғына булған. Беҙ уны йырып сығып киләбеҙ. Иманыбыҙ шуға камил булһын, яңынан 35-45 йылдан беҙҙең халыҡ иблис һыуынан бөтөнләй азат буласаҡ. Мин шуға ышанам. Ышанғығыҙ килһә, һеҙ ҙә эсеүегеҙҙе ташлағыҙ. Ул саҡта рухығыҙ мин юғарыла килтергән дәлилдәрҙе һеҙгә лә һөйләп бирер.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

*ТАРИХИ ФАРАЗДАР*

# "БАШҠОРТ" АТАМАҺЫ ҠАЙҘАН?

**XX быуат башында Сергей Иванович Руденко башҡорттар араһында ғилми тикшеренеүҙәр үткәреп йөрөгән. Шул ваҡыттан ул төшөргән бик күп фотоһүрәттәр һаҡланып ҡалған. Ғилми күҙәтеүҙәрендә ғалим башҡорттар араһында төрлө антропологик типтарҙы билдәләп үтә һәм был типтарҙы ул фотолар ярҙамында дәлилләй.**

Шул фотоларҙы ҡарап, ул саҡтағы башҡорттарҙың бөгөнгөләре менән антропологик яҡтан айырылмауы асыҡ беленә. Айырма шунда ғына: йөҙ йыл элек йәшәгән башҡорттар кәүҙәгә бик ҙур, физик яҡтан һау һәм ғәйрәтле булған. Боронғо һөйәктәрҙе өйрәнеү ҙә ошоно раҫлай. Бындай айырмалыҡтарҙың төп сәбәбе, әлбиттә, бар кешелек үҫешенә хас булғанса, боронғо башҡорттарҙың тәбиғәткә яҡын тороуында, экологик яҡтан таҙа тәбиғәт шарттарында үҫеп, меңәр йылдар буйы күнегелгән сифатлы милли ризыҡ менән туҡланыуында.

Сарматтар, савроматтар дәүерендә Дәүҙәр (беҙҙеңсә - алпамышалар) ырыуы йәшәгән. Дәүҙәр, йәғни Дағтар күбеһенсә хәҙерге Төркмәнстанда, Арал диңгеҙе буйында һәм көньяҡ Уралда көн күргән. Уларҙың йылғаһы Яйыҡ (Дәү-ыҡ) булған. Дәүҙәр антропологик яҡтан башҡорттар кеүек каспий, понтик тибына ҡараған. Һәр бер халыҡтың боронғолоғон понтик тибы күрһәтә. Минең фаразым буйынса, беҙҙең милләттең атамаһы төрки яңғырашҡа тиклем "башгурд" булғандыр. Фарсы телендә "бача" бала, тоҡом тигәнде аңлатһа, "гурд" баһадир, тип тәржемә ителә. Әгәр ошо ике атаманы ҡушып әйтһәк, "башгурд" "баһадирҙар тоҡомо" тигән төшөнсәне аңлата булып сыға. Башҡорт - баһадирҙар тоҡомо булғас, тимәк, улар Дәүҙәр тоҡомо ла. Дәүҙәрҙе Дағтар-Дактар тип тә атағандар, тинек. Шулай булғас, "иштәк" атамаһы беҙҙең милләттең боронғо атамаһы булып сыға. "Иштәк", тимәк, "Дағтарға иш" йәғни Дәүҙәрҙең, Дағтарҙың тоҡомо. Тимәк, бер үк боронғо дәүерҙә (сарматтар заманы) башҡорттарҙың бер йөкмәткеле ике атамаһы "иштәк" менән "башгурд" төрки дәүергә тиклем бергә йөрөгән.

**Ринат ЙОСОПОВ.**

✓ ***Быйылға берәмләп һатыу нөктәләре генә ойоштороурға ҡарар иттем. Ҡымыҙҙы үҙемдең тыуған районымда - Учалыла урынлашҡан һәм оҙаҡ йылдар ҡымыҙсылыҡ менән шөғөлләнгән "Байрамғол" агрофермаһынан алып килдем.***

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

**Эшҡыуарҙар күп бөгөн. Улар араһында бигерәк тә йәштәрҙең йылдан-йыл артыуы ҡыуандыра. Төрлө өлкәлә үҙен тапҡан егет һәм ҡыҙҙар был ҡатмарлы ла, мауыҡтырғыс та, хәүефле лә шөғөлөнән илһам алып, килем туплап, матур тормошта йәшәргә ынтыла. Ләкин уларҙың бик һирәктәре генә үҙ ерлегенең асылын аңлап, тыуған яғының айырылғыһыҙ өлөшө булған тармаҡты күтәреүгә көс һала. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ, халҡыбыҙҙың милли эсемлеге ҡымыҙҙы киң ҡулланылышҡа индереү өсөн тырышҡан йәштәребеҙҙең береһе - Вадим ЙОМАБАЕВ.**

# ӨФӨБӨҘҘӨ...

## ҡымыҙсылыҡ үҙәге итергә хыялланам



**➔ Ҡымыҙ менән бәйле эшҡыуарлыҡҡа тотонорға нимә этәрҙе?**

- Баш ҡала ҡымыҙ һатыу тураһындағы уй ҡапыл ғына башыма килде. Шулай бер баш ҡала урамы буйлап китеп барғанда һәр мөйөштә тиерлек кеүәҫ һатыуҙарына, магазин, киоск кәштәләре төрлө һут менән тулы булыуына иғтибар иттем. Әллә ниндәй төр маркалы, ете диңгеҙ аръяғында эшләнгән эсемлектәр араһында тик Башҡортостанды көүҙәләндереүсе, беҙҙең республикаға ғына хас үҙенсәлекле эсемлектең булмауы күҙгә ташланды. Оҙаҡҡа һуҙмайынса, Өфө халҡын, ҡала ҡунаҡтарын сифатлы ҡымыҙ менән тәьмин итеү ниәтен тормошҡа ашырыу яйын эҙләй башланым. Тәүҙә баш ҡала урамында ҡымыҙ ғына һатылған берәй урын асыуҙы юллап йөрөп ҡараным. Ләкин сатырҙы урынлаштырыу мәсьәләһен оҙаҡ хәл итеп булмағас, быйылға берәмләп һатыу нөктәләре генә ойоштороурға ҡарар иттем. Ҡымыҙҙы үҙемдең тыуған районымда - Учалыла урынлашҡан һәм оҙаҡ йылдар ҡымыҙсылыҡ менән шөғөлләнгән "Байрамғол" агрофермаһынан алып килдем. Был хужалыҡта йәйге миҙгелдә 300-ләп бейә һауылып ҡымыҙ етештерелә. Ләкин һәр хужалыҡтағы кеүек үк, тауарҙы һатыу йәһәтенән хәл итәһе мәсьәләләр бар. Шуға күрә минең Өфөгә ҡымыҙ алып барыу уйымды агроферма етәкселеге ҡуш ҡуллап күтәреп алды. Май аҙағынан октябрь баштарына тиклем 11 тоннанан ашыу ҡымыҙ һаттым.

**➔ Башланғысыңдың уңышлы булыуы һиндә был эшмәкәрлеккә ҡарата ниндәй фекерҙәр тыуҙырҙы?**

- Һатып алыусылар тарафынан ҡымыҙға булған һорауҙың ни тиклем ҙур булыуын күреү икенсе йылда ошо йүнәлештәге эшмәкәрлегемде әүҙемләштерергә этәргес булды. Алдағы йылда баш ҡаланың тағы бер нисә урынында өҫтәмә ҡымыҙ һатыу нөктәләре булдырырға ниәт итәм. Шулай уҡ быйыл тормошҡа ашмаған ниәтемде - ҡымыҙ сатыр ҡуйып ҡымыҙ тәҡдим итеүҙе лә юлға һалырға иҫәп тотам. Әҡайһы берәүҙәрҙең Өфө тирәһендәге райондарҙы ла ҡымыҙ менән тәьмин итеү тәҡдимен әлегә йөпләмәйем. Күп урынға өлгөрөргә тырышып, эштең йәмен ебәргәнсе, уны бер нисә генә урында, ләкин сифатлы итеп башҡарыу мөһим. Урын-еренә еткереп, бар яҡтан да уйлап эш иткәндә генә һатып алыусыларҙың күплеген тәьмин итергә була.

Киләһе миҙгелдә алдымда торған тәү бурыстарҙың береһе - ҡымыҙҙы пластик һауыттарҙан "ҡотҡарыу", сөнки ундай һауытта ҡымыҙҙың тәме китә. Шулай уҡ пластик һауыт эсемлектең сифатына ла йоғонто яһамай ҡалмайҙыр, тип уйлайым. Әбыяла һауыттарға ҡойолған ҡымыҙ алыҫ юлда шартларға мөмкин. Быяла һауыттағы ҡымыҙҙың тағы бер кәмселеге - ҡапҡасын асҡанда эсемлектең яртыһы тиерлек түгелеү ихтималлығы. Иң хуш еҫле ҡымыҙ, әлбиттә, ағас мискәнең үҙенән тура ҡойолғаны. Шуға күрә ҡымыҙҙы бер ҡайҙа ла бушатмайынса, батмандың үҙендә алып килеү мәсьәләһен ыңғай хәл итергә тырышасаҡмын. Тағы ла һауыттар күләмен дә төрләндереү тураһында фекерҙәр бар.

**➔ Ҡымыҙ яратыусылар тураһында нимә әйтерһең?**

- Ҡымыҙ һатып алыусылар араһында төрлө милләт, төрлө республика һәм хатта сит ил вәкилдәре булды. Уларҙың ҡайһы берәүҙәренә нәҡ бөгөн генә бешелгән ҡымыҙ кәрәк булһа, икенселәр, киреһенсә, ике-өс көнлөк ҡымыҙҙы хушһына. Ҡымыҙҙың хаҡына ҡарата ла (1,5 литрлыҡ һауыт 210 һум) төрлө фекерҙәр яңғыраны. Хаҡлы ялда булыусылар ҡуйылған хаҡты үтә лә ҡиммәт, тип белдерһә, эшҡыуарҙар, мәҫәлән, осһоҙлатыуыма баҫым яһаны. Ҡул көсө менән әҙерләнгән, алыҫтан алып килеңгән, юл, ҡуртым сығымдары һалынған хаҡты, теләгән хәлдә лә, төшөрөп булмай, сөнки ул саҡта мин үҙемә зыянға эшләйәсәкмен. Күптәр ҡымыҙҙы онтаҡтан (порошоктан) эшләнә икән, тип тә хаталана. Уларға ла бейә һөтөн онтаҡҡа әйләндереүсе аппарат тик "Йоматау" шифаханаһында ғына булыуын һәм, гәҙәттә, онтаҡтан ҡымыҙҙы ҡыш миҙгелендә генә эшләүҙәре тураһында һөйләргә тура килде. Ул да шул уҡ ҡымыҙ, ләкин уның тәме яңы ғына һауылған бейә һөтөнән әҙерләнгән ҡымыҙҙан ныҡ айырыла.

Күрше төбәктән Өфөгә ҡунаҡҡа килеүсе һәм ҡымыҙҙың ысын фанатына әйләнеүселәрҙе лә осратырға тура килде. Улар көн һайын килеп, бер нисә һауыт ҡымыҙ алып китер ине. Белдереүҙәренсә, уларҙа ла ҡымыҙ етештерәләр, ләкин Башҡортостандағы кеүек киң масштабта түгел һәм, иң мөһиме, тәме һәм сифаты яғынан күпкә ҡалыша икән. Был һүҙҙәр миндә тик беҙҙә генә ҡымыҙҙың бар нескәлектәрен белеп, урын-еренә еткереп эшләйҙәрҙер, тигән уйҙар тыуҙырҙы. Унан һуң, башҡорт ҡымыҙының сифатында беҙҙең тәбиғәтебеҙ үҙе, унда үҫкән үләндәр ҙә ҙур роль уйнай икәнен беләм.

Һатыу итеү барышында күңелде иң әрнеткәне - ата-бабалары ҡымыҙ тураһында хәбәрҙар булып та, йөҙҙәренән ошо мәҙәниәттең айырылғыһыҙ өлөшө икәнлектәре күренеп торған йәштәрҙең ҡымыҙҙы мыҫҡыллауы, көлөүе. Бына ҡайҙа сағыла ҡайһы берәүҙәрҙең үҙ тарихын белмәүе, булмышынан ситләшеүе. Үҙемдең эшмәкәрлегем менән ошондай кире стереотиптарҙы юҡҡа сығара алһам, күпкә өлгәштем, тип әйтергә мөмкин буласаҡ.

**➔ Бөгөн магазиндарҙа ла ҡымыҙға ҡытлыҡ юҡ шикелле...**

- Ҡымыҙ күпселек төрки халыҡтары араһында киң таралған эсемлек. Ләкин ҡайһы берәүҙәр бейә һөтөнән генә түгел, ә һыйыр, кәзә һөтөнән эшләнгән һәм әсе тәме булған эсемлекте лә ҡымыҙ тиҙәр. Миненсә, был дөрөҫ түгел. Ҡымыҙ тип тик бейә һөтөнән бөтә ҡатмарлы процессы урын-еренә еткереп башҡарыуҙан барлыҡҡа килгән эсемлекте генә атарға мөмкин. Ә ҡалғандарының тышында мотлаҡ рәүештә "ҡымыҙ эсемлеге" тигән яҙыу булырға тейеш.

Магазин кәштәләрендә осраған ҡымыҙ күпселек осраҡта бейә һөтө әсеткеһе ҡулланып, һыйыр һөтөнән эшләнгән эсемлек. Бындай эсемлектәр кешелә ысын ҡымыҙҙың тәме тураһындағы төшөнсәне боҙа. Шуға күрә мин тәҡдим иткән ҡымыҙҙы һатып алыусылар араһында ҡайһы берәүҙәрҙең тәмен оҡшатмағандары ла осраны. Ләкин традицион ысул менән эшләнгән ҡымыҙҙың ниндәй булырға тейешлеген аңлатып биргәндән һуң, башҡаса ризаһыҙлыҡ белдермәйҙәр.

Әйткәндәй, ҡышҡыһын да бейә һөтөнән ҡымыҙ эшләргә була, ләкин йәйге кеүек уның күләме күп булмаясаҡ. Үҫеп ултырған һутлы үлән ашаған бейә һөтөнән бешелгән ҡымыҙ кипкән бесән ашап тороусы мал һөтөнән эшләнгәненән сифат яғынан да күпкә юғарыраҡ. Ҡышҡыһын ҡымыҙ эшләү ҡолондарҙы әсә һөтөнән мәхрүм итеүе менән дә насар. Шулай уҡ һиуыҡ миҙгелдә эсемлектәргә ихтыяж ҡырҡа кәмей - был да ҡышын ҡымыҙ әҙерләүҙе туҡтатыу өсөн дәлил.

**➔ Ҡымыҙға бәйле тағы ла ниндәй уйфекерҙәрең бар?**

- Башҡортостан элек-электән ҡымыҙы менән дан тотҡан. Уҙған быуаттарҙа беҙҙең төбәккә ҡымыҙ менән дауаланыу өсөн махсус килеүсе билдәле шәхестәрҙең бихисап булыуы ла быға асыҡ миҫал. Уларҙың һәр береһе тиерлек үҙ әҫәрендә, һүрәтендә һәм башҡа рәүешле Башҡортостанға, уның тәбиғәтенә һәм халҡына, аш-һыуына булған һоҡланыуын сағылдырған. Улар араһында ҡымыҙға, уның шифаһына һәм файҙаһына бағышланған маҡтау һүҙҙәрен дә йыш уҡырға һәм күрергә була. Ләкин XIX быуат баштарынан төбәктә ҡымыҙсылыҡҡа ҡарата иғтибар кәмегән, күпләп бейә тотоусылар әҙәйгән. Ә ҡымыҙ менән дауалаусы махсус учреждениелар бөтөнләй юғалған тиерлек.

Бөгөнгө көндә был өлкәлә һиҙелерлек йәнлелек тойола. Республикала, айырыуса Урал аръяғы райондарында ҡымыҙсылыҡ менән шөғөлләнеүселәр йылдан-йыл арта, ҡымыҙҙы үҙ итеүселәр ҙә күбәйә. Был Башҡортостандың ҡымыҙ иле тигән данын кире ҡайтарыуға мотлаҡ булышлыҡ итәсәк. Уны башҡорт ҡурайы, башҡорт балы кеүек үк донъя кимәлендәге брендҡа әйләндереү буйынса маҡсатлы, көсөргәнешле эшләү мөһим. Республикала хәҙер туризмды үҫтереүгә күп көс түгелә. Туристик маршруттарҙа ҡымыҙ тәҡдим иткән урындарҙы күпләп ойоштороу файҙаға ғына буласаҡ. Урындағы фермерҙар ҙа ҡымыҙын һатып ҡаласаҡ, туристар ҙа Башҡортостандың бер үҙенсәлегенә шаһит буласаҡ.

**➔ Республикала тағы ниндәй төр эшҡыуарлыҡ актуаль булыр ине, тип уйлайһың?**

- Ҡымыҙҙы ғына түгел, ә үҙебеҙҙең башҡа милли ризыҡтарҙы ла күтәреү йәһәтенән әүҙем эшмәкәрлек алып барырға кәрәк. Мәҫәлән, Ҡаҙағстанда ҡорот бик популяр. Бәләкәй генә кибеттә лә, ҙур магазинда ла уның әллә нисә төрөн табырға була. Ә беҙҙә ысын ауыл ҡоротон һатып алыу ауырға төшә, сөнки быны менән шөғөлләнгән үҙебеҙҙең эшҡыуарҙар юҡ кимәлендә. Бер нисә кешенең генә эш араһында ошо эшмәкәрлеккә иғтибар бүлеүе уны масштаблы итә алмай. Шулай уҡ ҡалыҡтан һөт, ҡаймаҡ, май, ҡорот, эремсек, йомортҡа һәм башҡа ауыл аҙыҡ-түлеген күмәртәләп һатып алып, ҡала халҡына тәҡдим итеүселәр ҙә уңышҡа өлгәшәсәк. Бөгөн ауыл халҡы булған тауарын нисек һата? Һөт-майын ҙур-ҙур сумкаларға тултырып, автобустарҙа ҡалаға алып бара, көнө буйы ундағы баҙарҙа ултырып, кискә генә арманһыҙ булып ҡайтып инә. Әгәр ҙә һөт-ҡаймаҡ һатыусылар күп булһа, кире алып ҡайтмаҫ өсөн хаҡын төшөрөргә, әсеп әрәм булмаһын, тип, осһоҙға ғына биреп ебәрергә лә мәжбүр була. Ә йәй буйы ҡарап үҫтергән малының итен һатыу өсөн күпме интегә? Шуға күрә тауарҙарын ауылға килеп алыусы табылһа, барыһы ла ҡуш ҡуллап риза буласаҡ, тип уйлайым. Тәү ҡарашҡа мәшәҡәтле һәм ҡатмарлы күренһә лә, бер тапҡыр юлға һалып алғанда, ауыл халҡына ла, эшҡыуарға ла файҙалы һәм килемле эш булыр ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өфөбөҙҙө ҡымыҙсылыҡ үҙәге итергә хыялланам, тине Вадим әңгәмә барышында. "Егет һүҙе бер булыр", тигән халыҡ. Тырыш һәм маҡсатлы егеттең үҙ ниәтен тормошҡа ашырып, республикабыҙҙың баш ҡалаһын ошо сихәтле эсемлек үҙәге итерене бөтә көсөн һәм булдыҡлығын һалыуына шикләнмәйбеҙ. Уға юлдарының уң, башҡарған эштәренең ырамлы булыуын теләргә генә ҡала.**

Гөлназ САФУАНОВА.

✓ Башҡорт шәле республиканың брендына әйләнергә тейешлеге хаҡында Республика Башлығы Баймаҡ районы Темәс ауылында үткән республика кәңәшмәһендә белдергәйне.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# КӘҢӘШЛЕ ЙЫЙЫН ТАРҠАЛМАҪ

## 21 ноябрь Бөтөн донъя башҡорттарының IV Ҡоролтайы башлана




Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.

**45-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Гәзит. Мәғрифәтсе. Әрме. Стадион. Ситса. Кәрәклек. Метафора. Диктофон. Макрекер. Монолог. Хроника. Егет. Сағитов. Апостол. Рст. Ваза. Брифинг. Забастовка. Интервью. Ым. Лото. Йәтәс. Аяҡсы. Алка. Ҡоҙоҡ. Дүрт. Исмәғилов. Армыт. Шлюз.

**Вертикаль буйынса:** Имам. Хоҙайбирҙин. Ниелло. Ыҙа. Имаго. Софизм. Оҫта. Мунса. Плагиатлыҡ. Рам. Офицер. Гөрөлдәүек. Олоно. Ҡиәфәт. Оноре. Ирәүән. Аспид. Инеш. Кадр. Инйәр. Ете. Хисамов. Врез. Азот. Ғәзиз. Клоун. Актриса. Ихтыяр. Стиль. Канва. Ватт. Юйма.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Ноябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (11) дүшәмбе | 7:33 | 9:03 | 13:30 | 15:30 | 17:00 | 18:30 |
| 24 (12) шишәмбе | 7:34 | 9:04 | 13:30 | 15:29 | 16:59 | 18:29 |
| 25 (13) шаршамбы | 7:36 | 9:06 | 13:30 | 15:28 | 16:58 | 18:28 |
| 26 (14) кесе йома | 7:38 | 9:08 | 13:30 | 15:27 | 16:57 | 18:27 |
| 27 (15) йома | 7:40 | 9:10 | 13:30 | 15:26 | 16:56 | 18:26 |
| 28 (16) шәмбе | 7:41 | 9:11 | 13:30 | 15:25 | 16:55 | 18:25 |
| 29 (17) йәкшәмбе | 7:43 | 9:13 | 13:30 | 15:24 | 16:54 | 18:24 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ЙОМАРТЛЫҠ - ИМАН ЕМЕШЕ

"Иң күркәм иман - йомартлыҡ менән сабырлыҡ", - тигән бәйғәмбәребеҙ. Уларҙан һуң оялсанлыҡ китә. Уңайһыҙланыу, ялған, буш хәбәрҙәрҙән йыраҡ тороу - имандан, ә оятһыҙ һүҙҙәрҙән айырыла белмәү, тел биҫтәһе булыу - икейөҙлөлөктөң, монафиҡлыҡтың билдәһе".

Изге Ҡөрьәндә: "Оятһыҙлыҡты ишәйтеп, таратып, иманлылар хаҡында юҡ-бар хәбәр һөйләп йөрөгән кешеләргә фани донъяла ла, Ахирәттә лә әрнеүле ғазап булыр", - тиелгән.

**"Нур" сүрәһенән.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 ноябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инс.)
**22 ноябрь "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәнһүҙин), комедия
**24 ноябрь "Джут"** (О. Жанайдаров), драма
**25 ноябрь "Бер мәл санаторийҙа"** (Н. Ғәйетбай), комедия
**26 ноябрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия
**27 ноябрь "Ике төш"** (М. Багаев), драма

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**24 ноябрь "Өлкән улым"** (А. Вампилов), комедия
**25 ноябрь "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), баш ватырлыҡ комедия
**27 ноябрь "Алтын балта"** (С. Сурина), әкиәт. Башлана 10.00, 12.00

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

Башҡортостандың халыҡ артисы **Вәхит Хызыров 30 ноябрҙә "Ихлас йөрәктән, һеҙҙең Вәхит..."** исемле концертына саҡыра. Унда йырсының ижадташ дуҫтары - Флүрә Килдейәрова, Индира Әсәҙуллина, уҡыусылары - Руслан Сәйфетдинов, Вадим Зәкиев, Искәндәр Ғәзизов, Рөстәм Шаһбалов, БР дәүләт академик хор капеллаһы, БР халыҡ ҡоралдары милли оркестры ҡатнаша. Концерт "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үтә.

**Кем алыҡ?**

Вәхит Хызыров ниндәй дәүләт премияһына лайыҡ?

Телефон: **276-24-41**

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**21 ноябрь "Сказка о купце и его работнике Балде"** (В. Жуковский). Башлана 12.00
**25 ноябрь** П. Чайковскийҙың 175 йыллығына концерт

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# БАШҠОРТ ШӘЛЕ - ДАНЛЫ ШӘЛ



**Ейәнсура районы үҙәге Иҫәнғол ауылында башҡорт шәле республика байрамы үтте. Быға тиклем районда ғына үткәрелеп килгән "Ейәнсура шәле" бәйгеһе быйылдан яңы статусҡа эйә булды. Ул мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренә бирелгән Республика Башлығы грантына үткәрелде.**

Фестиваль барышында командалар ярышы ойошторолдо, күргәҙмә эшләне. Ейәнсура, Күгәрсен райондарынан, Ырымбур өлкәһенән килгән командаларҙы абруйлы баһалама ағзалары баһаланы. Иҫәнғол ауылынан Зөлфиә Бикбулатованың эше Гран-при яуланы.

Башҡорт шәле республиканың брендына әйләнергә тейешлеге хаҡында Республика Башлығы Баймаҡ районы Темәс ауылында үткән республика кәңәшмәһендә белдергәйне.

- Өфөлә йылына ике тапҡыр башҡорт шәле фестивале үтә, хатта башҡорт шәлен әүҙем тәҡдим итеүсе эшҡыуарҙар ҙа барлыҡҡа килде, - тигәйне Рөстәм Хәмитов. - Ырымбурҙың билдәле мамыҡ шәленең нигеҙҙәре - Башҡортостанда. Шуға ла башҡорт шәленең данын таратыу буйынса эштәр башҡарыу бөгөнгө көн өсөн бик мөһим.

ЗАУЫҠ

## Ҡоролтайға ҡотлау

*Мостай Кәрим*

Далаларҙан, тауҙан, урмандарҙан
Шәрбәт йыйып ҡайтты бал ҡорттарым.
Бал ҡорттары һымаҡ, йыйылдылар
Баш йортома бөгөн башҡорттарым.

Оҙаҡ йылдар, оҙон юлдар буйлап,
Ашҡынышып килдек, һағынышып.
Ҡоштар ҙа бит табышҡанда шулай
Ҡыуаналар, ҡанат ҡағынышып.

Хәсрәт түгел, хәстәр йыйҙы беҙҙе:
Туғанлыҡты кәрәк яңыртыуҙар,
Һүрелмәһен өмөт, һүнмәһен дәрт,
Һүнеп ҡалғанда ла янар тауҙар.

Йөҙәтмәһен әжәл юраусылар,
Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ,
Үҙебеҙҙең йырыбыҙҙы йырлап,
Тарих арбаһында барасаҡбыҙ.

Әммә һис ҡасан да бирелмәбеҙ
Күкрәк һуға торған мин-минлеккә,
Табынырбыҙ башҡорт илендәге
Татыулыҡтар менән именлеккә.

## Башҡорт ҡоролтайына

*Кәҙим Аралбай*

Сәсәндәр ораны донъяны ураһын,
Ҡурайҙар тупланыу көйҙәрен уйнаһын,
Ҡоролтай турында бар ғаләм тынлаһын,
Башҡортта азатлыҡ тойғоһо уянһын!

Ҡоролтай - ҡоро дау, лаф ороу булмаһын,
Конгресс - ҡаңғырыш, ҡан ҡойош булмаһын,
Башҡортта бороңғо олпатлыҡ уянһын,
Ғорурлыҡ, үҙаллыҡ тойғоһо тулаһын!

Был быуат ҡояшы байыуға барғанда,
Низағтар хәл итеш атышҡа ҡалғанда,
Күп милләт аҙмышын ҡулына алғанда,
Башҡортом ымһынып ҡалмаҫ ул ялғанға.

Ҡоролтай - гел байрам, уйын-йыр түгел дә,
Тормоштар шәплектән уйнаҡлау түгел дә,
Был йыйын - ирекҡә һыуһаған күңелдәр,
Ул - халҡым өмөтө сыраҡһыҙ төнөндә.

Ут йотҡан, яу кискән, бөлөнгән башҡортом,
Тарҡалған кҫтәрҙе туплаған Баш ҡортом,
Ҡоролтай саҡыра: ҡайтып бер баш ор, тип,
Ҡурсалар атайсал - Уралың, Баш йортоң.

Сәсәндәр ораны донъяны ураһын,
Ҡурайҙар тупланыу көйҙәрен уйнаһын,
Ҡоролтай саң ҡаға - бар ғаләм тыңлаһын,
Башҡортта берҙәмлек тойғоһо уянһын!

## Ҡоролтайға ҡыуаныу

*Ирек Кинйәбулатов*

Бөгөнгөһө көндә иң ҙур шатлыҡ,
Иң ҙур байрам башҡорт илендә.
Йыйындары - мәңге үҙ ерендә,
Тантанаһы - туған телендә.

Әгәр быны ҡанбабалар күрһә -
Түбәләре күккә тейерлек.
Улар ерҙе ҡурсалаған өсөн
Улар өсөн баштар эйерлек.

Халыҡ көсө ерен һис бирмәҫлек,
Йыр-моңона донъя һоҡланыр.
Күпме хазинаһы - ер аҫтында,
Үҙ ризығы - үҙе туҡланыр.

Барыһынан алда булғанда ла,
Китмәҫкә һис артыҡ маһайып.
Беҙҙә бөтә милләт татыу йәшәп,
Донъяға бер өлгө яһайыҡ.

Ерҙә беҙҙең ҡаҡшамаҫлыҡ дуҫлыҡ -
Башҡорт күңеленең киңлеге.
Кәрәк саҡта ҡылған батырлығы -
Була легендаға тиңлеге.

Ҡай ваҡытта шомландырып ҡуйһа,
Ысынында булған һаныбыҙ.
Әллә кемдән көтмә, сәбәп ҡыл һин,
Ҡайнап тора әле ҡаныбыҙ.

Беҙҙең ҙур дуҫлыҡҡа иҫе китеп
Ил-ҡитғалар беҙгә баҡҡандар.
Йөрәктәргә күпме ҡан һауҙыра
Күпме илдә ҡандар аҡҡанда.

Оло хыял тотҡан оло халҡым
Оло юлдан бара, киң юлдан.
Мең мәртәбә артыр, халҡым йәшәр,
Ҡоролтайҙар булыр мең йылдан.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# СИРЛЕ БАЛАЛАРҘЫ ҠАЙҒЫРТЫП...



**Баш ҡаланың Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында "Дмитрий Хворостовский һәм дуҫтары - балаларға" шәфҡәтлек концерты уҙҙы. Концертта беҙҙең танылған яҡташыбыҙ, Мария театры һәм Метрополитен-опера солисы, Башҡортостандың халыҡ артисы Илдар Абдразаҡов та ҡатнашты.**

Дмитрий Хворостовскийҙың традицион сараға әйләнгән шәфҡәтлелек концерттары Рәсәйҙә шәфҡәтлекте үҫтереүгә, ауыр сир менән яфаланыусы балаларға һәм уларҙың ата-әсәләренә финанс һәм психологик ярҙам күрһәтеүгә йүнәлтелгән. Концерт алдынан театр фойеһында "Сит булмаған балалар" исемле тематик фотоһүрәттәр күргәҙмәһен асып, республика Башлығы Рөстәм Хәмитов: "Беҙ - власта булған һәм власта булмаған кешеләр - бөтә йәмғиәт беҙҙең тирәләй барған ваҡиғаларға лайыҡлы иғтибар бирергә тейешбеҙ. Беҙҙең күңелдәр ҡатырға тейеш түгел", - тине. Өфөләге концертҡа билеттарҙың алдан уҡ алынып бөтөүе, аукциондың әүҙем уҙыуы 30 миллиондан ашыу аҡса йыйырға булышлыҡ итте. Был аҡса тиҫтәләгән, шул иҫәптән республикала йәшәүсе 38 сирле баланы дауалауға тотоноласаҡ.

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# СӨРСӨЛТКӘНСЕ...

## ЭШЛӘТКӘН

**Мөтөрәйеп** - баш баҫып, буйһоноп
**Ҡалбырҙаҡ** - ашығып, аңлайышһыҙ һөйләүсе
**Сыҙрый-мыҙрый** - арлы-бирле, насар
**Янға ҡалдырыу** - һаҡлау, экономиялау
**Домфоран йөрөй** - шәп, елдереп йөрөй
**Үҙле ҡамыр кеүек** - сиселеп һүҙ һөйләмәй, ныҡ
**Иҙем ишеү** - аңғартыу, үтенеү
**Ҡалыпланып тора** - килешеп тора
**Самай заядлый йүнһеҙ** - даны сыҡҡан йөрөмтәл
**Сынъяһау** - өр-яңынан кейенеү, биҙәү
**Сипайгүҙ** - күҙенән туҡтауһыҙ йәш аға
**Төкәлеп ултырыу** - баш күтәрмәй уҡый, эшләй
**Һанда һаяҡ** - әллә ниҙә бер, һирәк
**Һынһыпайтып** - биҙәнеп, кейенеп тик йөрөү
**Ҡараһына ҡатҡан** - ябыҡҡан, йонсоған
**Ужа ғына** - күп ашай, туймай
**Зыҡы һаран** - ҡомһоҙҙан да ҡомһоҙ
**Һүрәмһеү** - һүрән генә янған ут, әҫе түгел
**Кимек** - һөйәктең осондағы йомшаҡ өлөшө
**Ныҡ һандырай** - ныҡ бошона, үкенә
**Һыпын ғына** - шым ғына, йәшереп кенә
**Ойотҡоһон ойотҡан** - сөрсөлткән, тын да алдырмай эшләткән.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯМАН ДАУҒА ТУЙМАҪ,
## йығылған көрәшкә туймаҫ

Ҡаршы кеше уйын боҙор, тиле кеше йыйын боҙор.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бөтөн ҡылыҡтарың үҙ йәшеңә ярашлы булырға тейеш.

**(Квинт Флакк).**

Эштән һуң сәләмәт торошта ял итеү - ошонан да ҙурыраҡ ҡәнәғәтлек булыуы мөмкинме!

**(Иммануил Кант).**

Власть - ғорурҙарҙы һәм ярһыуҙарҙы, байлыҡ ҡыйыуһыҙҙарҙы һәм баҫалҡыларҙы ылыҡтыра; бына ни өсөн йәшлек власҡа ынтыла, ә ҡартлыҡ иһә байлыҡ алдында ялағайлана.

**(Сэмюэл Джонсон).**

Иң тәүҙә һүҙ булған, һуңынан иһә ул тапалған.

**(Станислав Лем).**

Азатлыҡ закондарҙың эсендә генә йәшәй.

**(Освальд Шпенглер).**

Изгелек һәм ғилемлелек һәр саҡ бергә атлай, береһе юғалһа, уға алмаш эҙләргә кәрәкмәй.

**(Артур Дойл).**

Әйҙәгеҙ, алға барайыҡ. Ни өсөн хаталарға һәм ҡайғы-хәсрәттәргә йәбешеп ятырға? Ниңә өмөткә һәм мөхәббәткә кәртә булып торған нәмәләрҙән ысҡынып китмәҫкә?

**(Будда).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡһаҡал уҡыусыларын эйәртеп, урман буйлап китеп барғанда юлына урмансылар осрай. Улар йөҙәрләгән ағасты киҫеп, юл ситенә өйөп һалған. Әммә ағастарҙан бушаған майҙанда бер йыуан ағас ҡына һерәйеп ултырып ҡалған. Аҡһаҡал был ағастың ниңә киҫелмәй ҡалыуы тураһында һорашҡас, ағас киҫеүселәр:**

**- Ә был ағас файҙаһыҙ, ул бер эшкә лә яраҡһыҙ, унан хатта йорт йыһазы ла яһап булмай, - тип яуап бирә.Шунда аҡһаҡал уҡыусыларына табан борола ла, былай ти:**

**- Ошо ағастан файҙаһыҙ булырға өйрәнегеҙ. Шул саҡта һеҙгә бер кем дә теймәҫ. Был бик бөйөк ағас. Ҡарағыҙ, уның тирәяғындағы бар ағастар йығылған, һәләк булған. Улар төҙ һәм һомғол булғандыр. Улар, моғайын, үҙҙәренең ошо тышҡы йөҙө менән ғорурланғандыр. Шул арҡала ул кемдәргәлер кәрәк булғандыр. Шуға ла файҙаһыҙ булығыҙ, ләкин был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңларға тырышығыҙ: тауарға, әйбергә әйләнмәгеҙ, юҡһа, һеҙҙе һатасаҡтар һәм һатып аласаҡтар..."**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойошторoccусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 20 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 5280